ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 декабрь (аҡъюлай) 2023

№49 (1091)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҡын көнсығыш тағы ла яҡыная**



3

**Балалар тыңлай,**

атай-әсәйҙәр аңлай



6,15

**Боронғо Башҡортостан**



7

**Ирҙәр төҙөгән өйгә...**

тик ҡатын-ҡыҙ ҡулы ғына эске йәм бирә ала



8-10

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### *Беҙҙең халыҡ йәшелсә-картуф үҫтереп, һуғым һуйып, ҡышҡылыҡҡа утә нык әҙерләнеусән. Һеҙҙең әҙерлек нисегерәк булды?*

***Ғәлимйән ХАРРАСОВ, пенсионер, хеҙмәт ветераны, Ейәнсура районы:*** Ауылда йәшәүебеҙгә етенсе йыл китте инде. Үҙем дә, ҡатыным да ауылдан сыҡҡанбыҙ, ләкин ғүмер буйы Стәрлетамаҡ, унан Салауат ҡалаларында химия тармағында эшләп, йәшәп, һаулыҡ ҡаҡшай башлағас, пенсияға сыҡҡас та ауылға ҡайтырға ҡарар иттек. Эшләгән осорҙа уҡ ауылыма ҡайта йөрөп, атай нигеҙенә йорт та һалып ҡуйғайным инде, шул нигеҙ тәҡәтһеҙ үҙенә тартып тик торҙо. Ауыл һауаһына-һыуына, изгелекле кешеләренә етәме һуң инде! Ҡайтҡас та күрше-тирә өмәгә килеп, кәртә-ҡура төҙөргә ярҙам иттеләр. Ә кәртәне буш тотоп булмай бит инде! Ҡатыным иң тәүҙә һыйыр һораны. Быҙаулы һыйыр һатып алдыҡ, бик уңдыҡ: һөтлө булып сыҡты. Күпләп ҡош-ҡорт үрсетә башланыҡ - шулай итеп, әкренләп кенә донъябыҙға ҡот ҡуна башланы, әлхәмдүлиллаһ. Һыйырыбыҙ йыл да быҙаулап бирә, башмаҡтарын ашатып, һимертеп, һуғымға әҙерләйбеҙ. Быйыл да ҙур ғына башмаҡ һуйҙыҡ, ләкин йылҡы ите лә ашағы килә бит: ошо уҡ ауылда йәшәүсе ҡустымдан йылҡы ите лә һатып алдыҡ. Өҫтәүенә, егерме ҡаҙ, ун бер өйрәкте лә салып, таҙартып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләндек.

Ауыл халҡының ҡунаҡсыллығы! Ҡайҙа тағы бар икән беҙҙәге кеүек ауылдар! Бер ғаилә булып, берҙәм, татыу йәшәйбеҙ. Ҡаҙ өмәһен дә бергәләшеп, килендәр, һеңлекәштәр килеп ярҙамлашып, тиҙ генә эшен башҡарып та ҡуйҙылар. Әле бына башланды өй һайын һуғымға саҡырышыуҙар. Беҙ үҙебеҙ бер бүлә саҡырып алдыҡ туғандарҙы, күршеләрҙе, хәҙер дуҫ-иштәрҙе саҡырырға йыйынабыҙ. Бынан алда ҡалала йәшәүсе улыбыҙ менән ҡыҙыбыҙ ғаиләләре менән ҡайтып, ярҙамлашып, ҡунаҡ булып, күстәнәстәр тейәп ҡайтып киттеләр. Уларһыҙ булмай: йәй отпускыларын алып, йә бесән эшләшәләр, йә картуф-йәшелсәһен тәрбиәләшеп, утап-күмеп, тигәндәй, байтаҡҡа эште еңеләйтәләр, рәхмәт яуғырҙар. Ысынында, он, тәм-томдан башҡа бер нәмә лә тиерлек һатып алмайбыҙ, шөкөр. Ит, май-ҡаймаҡ, һөт-ҡатыҡ, ҡорот-эремсек тиһеңме - бөтәһе лә үҙебеҙҙеке. Өҫтәүенә, быйыл картуф уңды; унан тыш, кәбеҫтә, һуған, кишер, сөгөлдөр, еләк-емеше - барыһы ла бар, тик һаулыҡ ҡына кәрәк.

Һаулыҡ, тигәндәй, ауылыма ҡайтҡас, үҙемде бөтөнләй яңынан тыуғандай тоям: һөт ризыҡтары, йәшелсә таҙа, химикатһыҙ. Әлеге йылҡы аҫраған ҡустым менән килен ҡымыҙ яһайҙар. Завод һауаһынан тонсоҡҡан үпкәләрем таҙарып, тыным иркенәйеп ҡалды ошо ауылға ҡайтҡаны бирле. Ҡыҫҡаһы, ауылдар бөтә, тигәнгә ышанмағыҙ, ауылдарыбыҙ яңыра, уның халҡы үҙ ҡулдары менән матур, мул тормош ҡороп, хәләл хеҙмәттәренең рәхәтен, бәрәкәтен күреп йәшәй.

*ШУНДАЙ КӘҢӘШ*

## ТУҒАН ТЕЛЛЕ БУЛҺЫНДАР!

### Бала саҡтан туған телеңде үҙләштереүҙең шәхес өсөн ниндәй донъяуи һәм рухи әһәмиәте бар?

Туған тел - зиһен асҡысы: баланың психологик үҫеше барышында туған теленең һүҙҙәре һәм терминдары уның интеллекты нигеҙен хасил итә.

Бала тарафынан үҙләштерелгән һәр бер яңы һүҙ уның мейе эшмәкәрлегененең нейрофизиологик һәм нейропсихологик механизмдары ярҙамында нығынып ҡалып, фекерләү системаһын камиллаштырыуҙы тәьмин итә.

Үҫеп килеүсе баланың эмоциональ халәте, хис-кисерештәр донъяһы туған теле аша тышҡы донъяла сағылыш таба, башҡа балаларға һәм оло кешеләргә аңлайышлыраҡ булып, тейешле яуап реакцияһына нигеҙ була.

Бала саҡтан уҡ үҫеш алған туған тел системаһы артабан икенсе, өсөнсө бер телдәрҙе үҙләштерә алыуҙы еңеләйтә.

Ата-әсәләре, яҡын туғандары, иптәштәре һәм башҡа кешеләр менән туған телендә аралашҡан баланың тәне һәм йәне гармониялы рәүештә үҫешә, йәғни уның шәхесенең биологик һәм рухи-психологик бөтөнлөгө еңелерәк формалаша.

Туған телендә иркен аралаша алған, уның яҙма формаларын юғары кимәлдә үҙләштергән баланың тәбиғәттән бирелгән һәләттәре иртәрәк асыла, ижади мөмкинлектәре барлыҡҡа килә.

Бына ошо сәбәптәрҙе генә иҫәпкә алғанда ла, балаларыбыҙҙы үҙ туған телендә тәрбиәләү һәм уҡытыуҙың ни тиклем мөһим икәнлеген тәрәнерәк аңларға була.

**Бәҙри ИҘРИСИ, балалар психологы.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## АРТИСТ ҠУРСАҠТАР...

**Билдәле булыуынса, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 2022 йылда реконструкция эшләү маҡсатында ябылғайны. Төҙөкләндереү һәм яңыртыу эштәре тамамланып килә, 23 декабрҙә театрҙың яңы бинаһын тантаналы асыу байрамы уҙғарыласаҡ.**




Театрҙың ҙур һәм бәләкәй залдары, кафе, уйын зоналары, балалар студиялары, интерактив уйын залы һәм ҡурсаҡтар музейы кескәй тамашасыларҙы ҡабул итергә әҙер. Театр бинаһының фасадына ҡуйылған ҙур ҡурсаҡтар - Ҡыҙыл Башлыҡлы ҡыҙ, Ҡурғаш һалдат, Итекле бесәй, Буратино, Төлкө һәм Йоморо күмәс, Көлдөрмөш, Мәскәй әбей, Урал батыр - театрға тамаша ҡылырға килеүсе балаларҙы һәм ололарҙы йыраҡтан уҡ сәләмләп тора. Әүәл, 1976 йылдан бирле театр фасадында легендар арт-объект - ҡурсаҡлы сәғәт торҙо. Яңыртылған театр фойеһын ошо сәғәттең бәләкәйләтелгән күсермәһе биҙәп торасаҡ. Яңы йыл каникулдарында театрҙың ҙур залында "Щелкунчик" спектакле ҡуйыла, ә бәләкәй залда бәләкәсерәктәр "Нимә һуң ул Яңы йыл?" тип аталған тамаша ҡарай ала.

12+

✓ *Ҡаланың төрлө структураларының үҙ-ара бәйләнештә эшләмәүе ҡала урамдарында ҙур тығындар барлыҡҡа килтерә, социаль көсөргәнеш булдыра һәм кешеләрҙә стресс тыуҙыра түгелме?*



*БАШ ҠАЛАМ*

# ЕҢЕЛ ХӘЛ ИТЕЛЕРҘӘЙ ҺЫМАҠ...

**Мин Өфөлә йәшәйем. Көн һайын башҡа меңәрләгән эшкә йөрөүселәр менән мин дә эш урыныма ашығам. Юлда барғанда баш ҡалабыҙға һәм ҡала етәкселәренә ҡағылышлы төрлө фекерҙәр, күп һорауҙар барлыҡҡа килә.**

Мәҫәлән, ни өсөн беҙҙең Өфөлә иртәле-кисле, бөтә халыҡ уҡыуға, эшкә ашыҡҡанда, автомобиль юлдары тулы булғанда ҡала урамдарына "У" яҙыулы, йәғни машина йөрөтөргә өйрәнеүселәр ултырған машиналар күпләп сыға икән? Ниңә коммуналь хеҙмәттәрҙең бөтә төр транспорты тап ошо мәлдә ҡыҙыу эш башлай? Бигерәк тә уларҙың тығындар барлыҡҡа килтереп, юлдың ике һыҙатын да ҡаплауы һәм бик әкрен йөрөүе маҙаға тейә. Ҡайһы берҙә ҡаланың иң ҙур юл саттарында светофорҙар эшләмәй һәм махсус хеҙмәттәр шулай уҡ тығындар барлыҡҡа килтереп, уларҙы төҙөкләндерә башлай. Мәҫәлән, Өфөлә иртәнге 8-ҙән 10-ға һәм киске 5-тән 7-гә тиклемге арауыҡта ҡайһы бер машиналарҙы һәм хеҙмәттәрҙе бөтөнләй ҡала урамдарына сығармаҫҡа мөмкинлек бармы икән, тигән һорау мине генә ҡыҙыҡһындырмай. Былар Өфөләге ҡайһы берҙә 10 баллыҡ тығындарҙы бөтөрөргә мөмкинлек бирә икән, ни өсөн ошондай график эшләмәҫкә, ти? Бындай осраҡта ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре лә юл хәрәкәтен көйләргә тейештер бит инде?

Йәйгеһен ҡала урамдары бушап, тығындар бер аҙ кәмеп ҡала, сөнки уҡыуҙар тамамлана, күптәр ял итә. Ошо ваҡытта ҡалала төрлө кимәлдәге төҙөкләндереү эштәре башҡарыу бик уңайлы һанала, әммә ни өсөндөр был эштәр өсөн беҙҙә көҙҙө, ҡышты көтәләр кеүек. Мәҫәлән, әле ноябрь айында ла тегендә-бында урамдар ябылып, юл хәрәкәте сикләнә. Ҡаланың төрлө структураларының үҙ-ара бәйләнештә эшләмәүе ҡала урамдарында ҙур тығындар барлыҡҡа килтерә, социаль көсөргәнеш булдыра һәм кешеләрҙә стресс тыуҙыра түгелме? Ғөмүмән, юл-транспорт мәсьәләләре хәл итеүҙе көтә. Өфөлә метро булмаҫын барыһы ла аңлай, тимәк, автобус, трамвай һәм башҡа транспорттың эшен камиллаштырырға кәрәк. Өфөләрҙең бер өлөшөнөң булһа ла шәхси машиналарҙан йәмәғәт транспортына күсеп ултырыуы ҙур бер проблеманы хәл итәсәк бит.

Һүҙһеҙ, баш ҡала яҡшы яҡҡа үҙгәрә - парк, скверҙар, автобус туҡталыштары әүҙем төҙөкләндерелә, юлдарҙа ремонт эшләнә. Был ҡалала тыуған, йәшәгән, уҡыған һәм эшләгәндәр өсөн Өфө - иң яҡын, матур һәм донъялағы иң яҡшы ҡала. Ҙур тарихҡа эйә булған, шул уҡ ваҡытта замандан артта ҡалмаған, Салауат Юлаев һәм Миңлеғәле Шаймуратовҡа ҡуйылған мөһабәт һәйкәлдәр, йәшәүгә уңайлы яңы райондары, күркәм Якутов һәм Ҡашҡаҙан парктары, ҙур заводтары гөрләп эшләп торған Черниковка биҫтәһе, саф һауалы урмандар аша һалынған "Өфө муйынсағы" - барыһы ла күңелебеҙгә яҡын һәм ҡәҙерле. Һәм беҙ барыбыҙ ҙа Өфөбөҙҙөң тағы ла уңайлыраҡ булыуын теләйбеҙ. Ләкин ҡайһы бер күңелде ҡырған, беҙҙең ҡарамаҡҡа еңел генә хәл ителә торған проблемаларға ла иғтибар итһен ине ҡала етәкселәре, тип кенә әйтергә теләгәйнем.

**Рөстәм БАЯНОВ.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# БАЙ - БАЙЫҒА,

## ярлы - һаман ябаға

**Утта янмай, һыуҙа батмай - кем бөгөн был "геройҙар", нисек уйлайһығыҙ? Юҡ шул, әлеге осраҡта һүҙ ысынлап та ут эсендә ил именлеген һаҡлап, Рәсәй суверенитетын яҡлап, нацистарға ҡаршы ғына түгел, ә Америка менән Евроберләшмә һөжүменә лә күкрәген ҡуйып, йәш ғүмерҙәрен аямай, үлемесле хәүеф аҫтында йөрөүселәр хаҡында түгел. Илебеҙ халҡы махсус хәрби шарттарҙа яугирҙарыбыҙға ҡулдан килгән бөтөн ярҙамды күрһәтеп, Ватаныбыҙ ҡеүәтен дә күтәрмәләргә, ситтәрҙән бойондороҡлолоҡҡа сик ҡуйырға тырышып ятҡан бер заманда, самалы ғына эш хаҡы һәм астан үлмәҫлек минималь пенсияға көнләп түгел, сәғәтләп артҡан хаҡтарҙы һис ҡыуып етә алмай аҙапланған бер мәлдә ҡотороп байып ятҡан бер төркөм әҙәмдәр ҙә бар, имеш...**

Әлеге Махсус хәрби операцияның көйҙөргөс ут-ялҡыны ла, санкция хөкөмө лә, бәғзе берәүҙәренең сит илдәге яхталарын тартып алыуҙар ҙа - бер ни ҙә батыра ла, яндыра ла алмай, ти быларҙы, сөнки Рәсәй капиталистары, үҙҙәре һәм ғаиләләре күптән сит илдә йәшәп ятһа ла, һаны-сигенә сыҡҡыһыҙ миллиардтарын йомарт һәм дә хушкүңелле ошо беҙҙең Ватаныбыҙ еренән һуралар, талайҙар, ишәйтәләр һәм сит ил банкыларына сығарып, һалып ҡуялар. Кемгә - һуғыш, ә кемгә - кеҫә ҡайғыһы! Рәсәйҙә уларҙың килеменә һалымды арттырыу хаҡында урамдағы эт кенә һөйләмәйҙер хәҙер, ләкин уларҙың башынан һыйпау дауам итә. Илгә һынау килгән мәлдә, киреһенсә, улар өсөн һалымды бишләтә лә түгел, бәлки, унлата түләтеү ҙә ғәйеп булмаҫ ине.

Тарихтан хәтерләһәгеҙ, АҠШ Бөйөк депрессия кисергән осорҙа президент Рузвельт Америка миллиардерҙары килеменә һалымды 90 процентҡа тиклем күтәрә һәм был үҙ һөҙөмтәһен бирә, сөнки ватан өсөн һынылыш ваҡытында бөтөн саралар ҙа үҙен аҡлай. Беҙҙә - киреһенсә, ошо йыл башынан алып 25-ләгән миллиардер төркөмө үҙ кеҫәләрен 38575 млрд долларға ҡалынайтыуға ирешкән. Улар араһында төрлө тармаҡ - нефть, металлургия, химпром, финанс әһелдәре бар. Улар араһында ла иң ныҡ байығыусы нефть батшаһы Алекперов финанс хәлен 9,14 миллиардҡа ишәйткән! Йәмғеһе ул шәхси иҫәбендәге 24,5 млрд доллары менән исемлек башындағы В.Потанин ("Норникель"- 30,7 млрд доллар) һәм Л. Михельсондан (НОВАТЭК - 27,3 млрд доллар) һуң өсөнсө урында тора. Иң бай ТОП-10 иҫәбендә тағы ла В. Лисин (22,9), А. Усманов (20,3), А. Мордашов (19,3) А. Мельниченко (17,2), М. Прохоров (15) һәм Г. Тимченко (15) бар. Был әҙәмдәрҙән илгә әллә ни файҙа булмаһа ла, "һуңғы ваҡыт Рәсәй баҙары күтәрелә төштө", ти Юғары иҡтисад мәктәбе университеты профессоры Евгений Коган һәм әлеге миллиардерҙарҙың байығыуын шуға бәйләп ҡарай. Уның фекеренсә, бөгөн нефть, банк өлкәләрендә, химия сәнәғәтендә, агрохолдинг һәм, ғөмүмән, аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә үҫеш күҙәтелә, шунлыҡтан ошондай компаниялар хужалары капиталдарын арттыра, ә инвесторҙар аҡса эшләй ала. Әгәр ысынлап та, баяғы профессор әйтмешләй, илебеҙ хәле тотороҡлана һәм үҫеш тә ала башлаған икән, уның байҙары ла байырға тейештер, күрәһең, ләкин был ябай халыҡтың тормош кимәлендә һис кенә лә сағылмай икән, бында инде уйланырға урын бар...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

## *Беҙҙең халыҡ йәшелсә-картуф үҫтереп, һуғым һуйып, ҡышҡылыҡҡа утә ныҡ әҙерләнеусән. Һеҙҙең әҙерлек нисегерәк булды?*

***Әлиә СӘЛИХОВА, Көйөргәҙе районы Яңы Мораптал ауылы:*** Минең әсәйем менән атайым Гәүсәриә менән Әҡсән Сәлиховтар Баймаҡ районы Таулыҡай ауылында йәшәйҙәр. Бында, ғөмүмән, эшсән, бер-береһенә ярҙамсыл, дәртле халыҡ йәшәй. Башҡа ауылдаштарым кеүек үк, атай-әсәйебеҙ ҙә гөрләтеп донъя көтәләр. Әсәйем иртә яҙҙан ҡош-ҡорт себештәре алып, уларҙы тәрбиәләп, ҡурсылап тигәндәй генә ҡарап үҫтерәләр. Шул уҡ ваҡытта баҡса эштәрен дә онотмайҙар. Тәүҙә атайым тракторында картуф баҡсаһы ерен һөрҙөрөп сыға. Ауылдаштарға ла был эштә ихлас ярҙамлаша. Шулай итеп, минең ҡәҙерлеләрем йыл һайын баҡса тултырып йәшелсәнең һәр төрлөһөнән, картуфтан мул уңыш алалар. Һарай тулы мал-тыуар аҫрайҙар, шөкөр, шунһыҙ бит ауылда тормош күңелһеҙ ҙә, файҙаһыҙ ҙа булыр ине. Йәй уртаһынан алып, мал-тыуарға бесән эшләп алалар. Әлбиттә, йәй буйы бил яҙмай утап-күмеп, һыу һибеп, үҫтереп алған йәшелсә-емештән көҙ ҡутарып уңыш алыуы үҙе бер кинәнес, ҡышҡылыҡҡа бына тигән запас, бер нәмә лә һатып алмайһың.

Картуф-йәшелсә янына ит тә әҙерләй ауыл халҡы. Эйе, дөрөҫ әйтәһегеҙ, беҙҙең халыҡ тир түгеп эшләй ҙә, хеҙмәтенең рәхәтен күреп, бәрәкәтен татып йәшәй ҙә беләә. Ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ-түлек запасының иң мөһиме, әлбиттә, ит, шунһыҙ башҡорт буламы! Атайымдар ҙа йылҡы тота, һыйыры-башмағы, һарыҡтары бар. Әйткәндәй, улар ҙа бит бик ныҡ тырышлыҡ, тәрбиә талап итә, шунһыҙ иттең таты ла юҡ. Ҡыш башынан алып, малдар кәртәгә ингәс тә уларҙы ашатып, бесәнен һалып, емен өҫтәп биреп, һыу эсереп, аҫтарын таҙартып, иртәнән кискә тиклем өйгә инмәй ауыл кешеһе. Тәүге ҡырпаҡ ҡар төшөр-төшмәҫтән ҡош-ҡорттан башлайҙар ит запаҫын тулыландырыуҙы ауылдаштар. Әсәйем дә иҫәпһеҙ-һанһыҙ бройлер тауыҡтарын, өйрәк-ҡаҙҙарын салдырып, күрше-тирә, килен-еңгәләр менән өмә ойошторол, тиҙ генә йолҡоп, таҙалап, таҙа һыуҙа сайҡатып, эштәрен бөтөрөп тә ҡуялар. Ҡош-ҡорт ите тәмле, аҡһымға бай булһа ла, мөгөҙлө һыйыр малы йәки йылҡы итенә етә буламы инде!

Һуғым осоро ауылдарҙа айырыуса бер йәнлелек һиҙелә: бер-беренә мал һуйышырға йөрөйҙәр, аҙаҡ һуғым ашына саҡырышыуҙар үҙе бер йәмле осор ауылда. Әсәйем-атайымдар ҙа һуғымға бер баш йылҡы, бер башмаҡ һуялар. Йылҡы ҡаҙыһы, башмаҡ ите менән эс-ҡарынынан тултырма эшләп, өмәселәр бер-береһенә ныҡ ярҙам итәләр. Шунан кис мул итеп, төрлө иттән һалмалап бешерелгән бишбармаҡ менән һыйланырға һуғым ашына йыйылалар. Бына шулай, ауылдарыбыҙҙа ата-бабаларҙан ҡалған йола урын-еренә еткереп үтәлә: кем эшләй - шул ашай.

**Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?**

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 418 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 271 пациент, шул иҫәптән 177 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 3871 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 1816-ы - 60 йәште үткән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, илебеҙҙең Украина биләмәһендә Махсус хәрби операция үткәреүен иҫәпкә алып, чиновниктарҙы яңы йыл байрамдарын шау-шыуһыҙ ғына билдәләргә саҡырҙы. "Муниципалитет башлыҡтарын төрлө фейерверктар менән мауыҡмаҫҡа саҡырам. Дәүләт һәм муниципаль учреждениелар етәкселәренән яңы йыл корпоративтарын шау-шыуһыҙ үткәреүҙәрен һорайым. Ләкин етәкселәрҙең бурысы - халыҡтың ялын матур итеп ойоштороу", - тине Радий Хәбиров .

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, донъя чемпионы һәм ҡатнаш көрәш төрҙәре легендаһы Джефф Монсонға федераль дәүләт наградаһы - Халыҡтар дуҫлығы орденын тапшырҙы һәм: "Джефф Монсон республикабыҙҙа ҙур грэпплинг мәктәбен булдырҙы, иң мөһиме, ул Донбаста йәшәүселәргә булышлыҡ итеү менән ныҡлап шөғөлләнә, унда күп тапҡыр булғаны бар", - тине. Ошо көндәрҙә Джефф Монсондың Өфөлә өйһеҙҙәргә ярҙам үҙәген асырға йыйыныуы билдәле булды.

✓Башҡортостан егеттәре Рәсәй Оборона министрлығының фәнни ротаһы сафын тулыландырҙы. Республиканың хәрби комиссариатынан хәбәр итеүҙәренсә, туғыҙ егет конкурс буйынса һайлауҙы үткән һәм үҙҙәренең фәнни хеҙмәттәрен күрһәткән. "Бер егет ЭРА фәнни технополисында хеҙмәт итергә бара. Был хеҙмәт уларға белемдәрен күрһәтергә, яңы асыштарҙа ҡатнашырға мөмкинлек бирә", - тип билдәләне Башҡортостандың хәрби комиссары Михаил Блажевич. Һигеҙ йыл эсендә Башҡортостандан йөҙҙән ашыу егет Рәсәй Ҡораллы көстәренең фәнни ротаһына хеҙмәт итергә ебәрелгән.

✓Лилиә Шәйхетдинова Стәрлетамаҡ районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров белдерҙе. "Бик көслө район. Уны артабан да үҫтерербеҙ", - тине Башҡортостан Башлығы. Райондың элекке етәксеһе Евгений Волков, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, биләгән вазифаһынан бушатылды.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ЯҠЫН КӨНСЫҒЫШ ТАҒЫ ЛА ЯҠЫНАЯ



**Рәсәйҙең эске һәм тышҡы сәйәси-иҡтисади эшмәкәрлеге һәм, ғөмүмән, һәр хәрәкәте, аҙымы Көнбайыш менән АҠШ-тың көнсөл һәм бәйләнсекле күҙәтеүе аҫтында.**

Әле генә РФ Президенты Владимир Путиндың дүрт истребитель оҙатыуында Яҡын Көнсығышҡа, атап әйткәндә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре һәм Сәғүд Ғәрәбстанына сәфәре донъя киң мәғлүмәт сараларында шау-шыу тыуҙырҙы һәм төрлө йөкмәткеле шаңдау алды. АҠШ-тың билдәле бер даирәләре таныуынса, был сәфәре менән В. Путин АҠШ тарафынан Рәсәйҙең башҡа илдәр менән аралашыуын сикләргә, тыйырға маташыуҙарын юҡҡа сығарҙы. Был бигерәк тә Америка журналистарына оҡшап етмәне. "Осраҡлымы, әллә махсус рәүештәме - был визит сәғәт ярым аралыҡта барған бөтөн донъя экологія саммитына ҡуҡыш күрһәтеү булды. Тимәк, Путиндың артабан да нефть һурҙырыуға иҫәбе ҙур", - тип яҙҙы улар.

Bloomberg яҙып сығыуынса, Путин Фарсы ҡултығына сәфәре менән халыҡ-ара аренала үҙен һаман да иркен, ышаныслы тойоуын күрһәтте. Британияның Sky News каналы Рәсәй етәксеһенең ғәрәп илдәренә визитын уны бында нисек дуҫтарса һәм йылы ҡаршылауҙары хаҡында айырыуса ентекләп, ыңғай мөнәсәбәт белдерә тасуирланы. Бөйөк Британияның икенсе бер баҫмаһы Un Heard Яҡын Көнсығыш һөйләшеүҙәренә тотош аналитик мәҡәлә бағышлап, унда Фарсы ҡултығы монархияһының әкренләп АҠШ йоғонтоһонан арына барыуы, Мәскәү һәм Пекин менән бәйләнештәр ҡороуы айҡанлы борсолоу белдерҙе.

Башҡа күҙәтеүселәр ҙә Сәғүд Ғәрәбстаны менән АҠШ араһының күҙгә күренеп боҙола барыуын билдәләне. Көнбайыш матбуғатының ҡайһы берҙәре Путиндың был визитын үҙ уҡыусыларынан йәшерергә, һис булмағанда ла уның әһәмиәтен кәметеп күрһәтергә тырышты. Ләкин, беҙ туҡта ятмай, тигәндәй, донъя кимәлендә баһа алған был ваҡиғаны бөгөнгә төпһөҙ мәғлүмәт киңлегендә баҫырып ҡалдырыу мөмкинме һуң! "Путинды нисек ҡаршылауҙарына ҡарағанда, был визиттың Әмирлектәргә лә, Сәғүд Ғәрәбстанына ла бик мөһим булыуын һәм уның АҠШ менән башҡаларға туранан-тура ишара икәнен үҙебеҙ күреп торабыҙ", - тип белдерҙе CNN телеканалы хәбәрсеһе Фредерик Плейтген. "Был визит бик кәрәкле, шул иҫәптән нефтҡа хаҡтарҙы көйләү өсөн дә, - тигән айыҡ аҡыллы фекер яңғыраны Францияның France24 телеканалынан.- Иң мөһиме - санкцияға ҡарап тормаҫтан, Рәсәйҙең ғәрәп партнерҙарына үҙ көсөн күрһәтеүе. Путин үҙен бик ышаныслы тота. Күрһәң, Көнбайыштың энергия сығанаҡтарына сикләү һалыуына Рәсәйҙең иҫе лә китмәй. Украина конфликты Рәсәй иҡтисадын ҡаҡшата алманы". Әлеге CNN журналисы Плейтген үҙ фекерен дауам итеп, Әмилектәр менән Рәсәйҙең бер-береһенә бик кәрәкле партнерҙар булыуын һәм Путиндың Мәскәү менән Яҡын Көнсығыш бәйләнештәренең ни тиклем юғары кимәлдә икәнлеген күрһәтеүгә өлгәшеүен билдәләне.

Владимир Путиндың бишенсе тапҡырға үҙ кандидатураһын РФ Президентлығына күрһәтеүе лә донъя матбуғатын тулҡынландырмай ҡалманы. The New York Times хәбәрҙәрендә Рәсәйҙәге һайлау алды кампанияһының башланыуы Путиндың сираттағы енеүе менән тамамланасаҡ, тип белдерелә. Ҡалған баҫмалар ҙа бының көтөлмәгән хәбәр түгеллеге, Путиндың еңеүенә шик юҡлығы хаҡында яҙа.

Шул уҡ ваҡытта донъя хәлдәре һаман да көсөргәнешле булып ҡалыуын дауам итә. Украинаның һуғыш яландарында хәрби техникаларҙың күпләп юҡ ителеүе арҡаһында Көнбайыштың Киевҡа ярҙам сығанаҡтары ҡытлыҡҡа килеп терәлде, ә АҠШ Сенаты шулай уҡ Украинаға ғына түгел, Тайвань менән Израилгә лә ярҙам турһында законды ҡабул итмәне. "Аҡса бөттө, был Украинаны тубыҡланырға мәжбүр итәсәк", - тип белдерҙе Аҡ йорттоң ҡаҙна идаралығы етәксеһе Шаланда Янг һәм Конгресс ағзаларын финанс буйынса сара күрергә саҡырҙы.

Ошоға бәйле, "Киевты бағыусылары яҙмыш ағымына ташлай", тигән имеш-мимеш фараз ғына булып ҡала, ахыры, сөнки, мәғлүмәтле эксперттар күҙәтеүенсә, Штаттар былый алтын валютаһы резервтарын 7,6 млрд долларға арттырыуға өлгәште, уның дөйөм суммаһы 21 млрд самаһы тәшкил итә. Ошо аҡсаны ҡорал һатып алыу өсөн Украинаға инселәп торосулар ҙа бар. Хәрби эксперт Виктор Литовкин фекеренсә, АҠШ барыбер Украинаға ярҙамды туҡтатмаясаҡ, сөнки, ти ул, асылда АҠШ Украина территорияһынан тороп Рәсәй менән һуғыш алып бара. Украинаға ҡорал ташыу дауам итәсәк, сөнки АҠШ иҡтисады өсөн был отошло, уның иҡтисад моделе шуға ҡоролған. Ләкин уның Рәсәйҙе ҡаҡшатыу, көсһөҙләндереү планы барып сыҡмаясаҡ: ракета-ядролы дәүләттең еңелеүе мөмкин түгел, ти хәрби эксперт.

Евросоюзда Украинаға ярҙам мәсьәләһе етди бәхәстәр һәм фекер айырымлыҡтары килтереп тыуҙырҙы, күп илдәр: Польшанан башлап, Венгрия, Италия, Испания, Швейцария был "бурыстары"нан баш тартты һәм Украинаға финанс һәм ҡорал ебәреүҙе дауам итеүгә ризаһыҙлыҡтарын белдерҙе.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

## ***Беҙҙең халыҡ йәшелсә-картуф үҫтереп, һуғым һуйып, ҡышҡылыҡҡа утә ныҡ әҙерләнеүсән. Һеҙҙең әҙерлек нисегерәк булды?***

***Фәрхизә ШАЙМОРАТОВА, Яңауыл районы Ахтиял ауылы:*** Халыҡ әйтмешләй, ысынлап та бит аяғын тәпәйләһә генә ауыҙын сәпелдәй. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡышҡа әҙерлекте яҙҙан башлайбыҙ. Йыл да картуфты күп ултыртабыҙ. Быйылғы ҡырауҙан шытым биргән картуфты бесән менән ҡаплап, имен алып ҡалдыҡ. Кис һыу һалып сыҡтыҡ, был сара ла яңы шытымды һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итте. Картуф быйыл, нисдәй генә һауа торошона ҡарамаҫтан, мул уңыш бирҙе, Аллаға шөкөр. Йәшелсә лә уңды, күп итеп төрлө йәшелсәнән ҡышҡылыҡҡа салат эшләйем, ҡыяр, помидор, кәбеҫтә тоҙлайым. Оло бер баш мал һуйҙыҡ, үҙебеҙгә лә, һатырға ла, балаларға бирергә лә етте. Һыйырыбыҙ һөтлө генә, шулай ҙа һыуалы осорона табан күп итеп һөт туңдырам, ҡатыҡ, эремсек эшләйем, май яҙам. Ошо муллыҡты күреп, аҙыҡ-түлек ҡытлығы килеп тыуған үткән быуаттың 90-сы йылдары иҫемә килеп төшә. Ул саҡ халыҡ бик интекте. Хоҙай аслыҡты күрһәтмәһен. Әле интернеттан уҡып белеүемсә, Африканың 20 процент халҡы, йәғни 240 млн кеше, аслыҡтан яфа сигә, бигерәк тә балалар йәл. Беҙҙә йәнең ни теләй, бөтәһе лә бар, шуға күрә булғандың ҡәҙерен белеп, аҙыҡ-түлекте исрафламай йәшәргә кәрәк. Магазиндарҙа ла бөтә нәмә бар, аҡсаң ғына булһын, тик һуңғы ваҡыт аҙыҡ-түлек бик ныҡ ҡиммәтләнде, ә һатып алған нәмәнең ни тәме, ни бәрәкәте юҡ. Шуға ла аҙыҡ-түлекте үҙ хужалығыңда етештереүгә етмәй: бик күп көс түгергә тура килһә лә, исмаһам, һатып алмайһың; хәләл, экологик таҙа ризыҡ; күпкә етә.

Шөкөр, һуғым мәлдәре лә гөрләп үтеп бара, Яңы йыл яҡынлаша. Хәҙер байрамдарҙа өҫтәлдәрҙә нимә генә юҡ, ный тулы һауыт-һабаны ҡуйырға ла урын ҡалмай, әлхәмдүлиллаһ! Хәйер, байрамда ғына түгел, көн дә өҫтәлдәребеҙ һыйҙан һығылып тора, көн дә шулай йәшәй, шулай туҡлана эш һөйөүсән ауыл халҡы. Ауылда йәшәүҙәре рәхәт: утын яҡмайбыҙ, һыу һәм бөтөн уңайлыҡтар ҡалалағы кеүек өйгә үткәрелде. Баҙ тулы ризыҡ, туңдырғыс тулы ит-май, һөт... Инде бар теләгәнебеҙ һуғыш бөтөп, тыныслыҡ урынлашһын ине тиҙерәк. Артабан йорт-илебеҙ тағы ла бөтәйеп, ҡеүәтләнеп, изге хәбәрҙәр генә ишетеп йәшәргә насип булһа ине, тип теләйбеҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда ауыл ерендә эшләп йөрөгән 150 йәш уҡытыусының һәр береһенә республика етәксеһенең 690 мең һумлыҡ гранты бирелә. Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттарына 15 мендән кәмерәк кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙың дөйөм белем биреү ойошмаларында эшләгән 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар дәғүә итә ала. Конкурс еңеүселәре аҡса алғандан һуң Башҡортостандың бер үк районындағы төп белем биреү ойошмаларында ун йылдан ашыу эшләргә бурыслы.

✓Башҡортостанда ҡаты һыуыҡтар булды. Салауат районының Әлкә ауылы халҡы социаль селтәрҙә хәбәр итеүенсә, үтеп барған аҙнаның бер көнөндә термометр бағанаһы хатта -54° күрһәткән. Шул уҡ районлдың Иҙелбай ауылында иһә - 52° булған. "Подслушано Месягутово" төркөмөндәге яҙма авторы температура рекордтары менән уртаҡлашырға тәҡдим иткән. Ҡыйғы районының Сағыр ауылынан Айҙар Фазылов дүрт көн буйына -50° һыуыҡ булыуы хаҡында яҙған. Дыуанда, Валентин Харин һүҙҙәренсә, термометр бағанаһы -55° күрһәткән.

✓Рәсәй хөкүмәтендә төбәктәр өсөн субсидиялар күләменә аныҡлыҡ индерелде. Аҡса 2023 һәм 2024 йылдарҙа белем биреү ойошмаларында яңы урындар булдырыуға йүнәлтелә. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Документтан күренеүенсә, Башҡортостан 2023 йылда - 258,2 миллион һум, ә 2024 йылда 404,8 миллион һум дотация алырға тейеш. Төбәктәр араһында бөтәһе 68,89 миллиард һум бүленә.

✓Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы хәбәр итеүенсә, 2024 йылда республика халҡын 118 өҫтәмә ял көнө көтә. 2023 йылдың 30 декабренән 2024 йылдың 8 ғинуарына тиклем - яңы йыл каникулдары; 23 февралдән 25-нә тиклем - Ватанды һаҡлаусылар көнө; 8-10 март - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө; 10 апрель - Ураҙа байрамы; 28 апрелдән 1 майға тиклем - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы; 9-12 май - Еңеү көнө; 12 июнь -Рәсәй көнө; 16 июнь - Ҡорбан байрамы; 3 һәм 4 ноябрь - Халыҡтар берҙәмлеге көнө.

✓Бөрйән районында туризм биләмәне үҫтереүҙең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып тора. Урындағы эшҡыуар Элина Кинйәбаева был өлкәлә 2021 йылдан уңышлы эшләй. Әлеге ваҡытта ул йылға буйлап кәмә-катамарандарҙа ағып төшөү эшен ойоштороу менән шөғөлләнә. Туристарға ҡунаҡхана йорто, глэмпинг һәм ял итеү өсөн бөтә уңайлы шарттар тәҡдим ителә. Ҡышҡыһын бында даими рәүештә тюбинг трассаһы эшләй.

ҠЫҪҠАСА

# АВГУСТА БАЙРАМ ИТӘБЕҘ

**"Тура бәйләнеш" барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан тантаналар ҡасанға планлаштырылыуы хаҡында һөйләне.** Ҡала көнө 12 июндә билдәләнһә лә, байрам саралары август аҙағында үткәреү планлаштырыла. Радий Фәрит улы баш ҡаланың 450 йыллығы алдынан Өфөлә ағастарҙы ҡырҡыу тураһында һорауға ла яуап бирҙе. Киреһенсә, һәр ваҡыт яңы ағастар ултыртыла, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. "Ултыртылған ағастар теге йәки был сәбәптәр арҡаһында ҡырҡылғандарына ҡарағанда күберәк, - тине Радий Хәбиров. - Бер өлөшөн ҡырҡабыҙ, әммә улары урынына мотлаҡ яңыларын ултыртырбыҙ. Беҙҙә баш ҡалабыҙҙы йәшелләндермәйһегеҙ тип гәйепләргә кәрәкмәй, беҙ шуның менән генә шөғөлләнәбеҙ - матур ағастар ултырттыҡ. Беренсенән, улар яңы, сирләмәй һәм башҡалар. Ағастарыбыҙ әкренләп яңыртылырға тейеш.

✓ **Башҡортостан парламенты антибиотиктарҙы рецептһыҙ биреү мәсьәләһен тикшереүгә ҡушыла. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачевтың ҡушыуы буйынса, был проблема буйынса "Түңәрәк өҫтәл" ойошторолаһ, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте.** Парламентарийҙар фекеренсә, ғәмәлдәге һатыу тәртибе антибиотиктар әйләнешен тейешле контролдә тотмай. Рецепт буйынса бирелергә тейеш булыуына ҡарамаҫтан, бындай препараттарҙың һаны иҫәпкә алынмай һәм дарыуxана хеҙмәткәрҙәре йыш ҡына рецептһыҙ һата. Бактерияларҙың антибиотиктарға ҡаршы тороу проблемаһы кешелек һаулығына иң етди хәүеф булып тора. Уның ҡарарында был дарыуҙарҙы ваҡлап һатыуҙы ҡәтғи контролдә тотоу ҙур роль уйнай ала.

✓ **Башҡортостанда ҡабул ителгән ҡарар буйынса, "Профессионалдар" һөнәри оҫталыҡ буйынса чемпионаттың һәм юғары технологиялар чемпионатының һайлап алыу (төбәк-ара) этабында еңеүселәргә һәм призерҙарға, шулай уҡ уларҙың остаздарына премиялар түләнә.** Рәсми документтан күренеүенсә, беренсе урын өсөн - 115 мең, икенсе һәм өсөнсө урындар өсөн 57,5 мең һум түләнә. Бер нисә чемпионат призерҙарына һәм еңеүселәренә һәр ҡаҙаныш өсөн түләү ҡаралған. Еңеүселәрҙе һәм призерҙарҙы әҙерләгән остаздарға 57,5 мең һум күләмендә премия түләнә. Әгәр әҙерлек барышында бер нисә уҡытыусы ҡатнашһа, был сумманы улар үҙ-ара тигеҙ бүлешә. Остаздың бер нисә еңеүсеһе һәм призеры бар икән, ул һәр береһе өсөн матди ярҙам алырға хоҡуҡлы.

✓ **2024 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда эш хаҡы район коэффициенты менән бергә кәмендә 22 128 һум була, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан дәүләт хеҙмәт инспекцияһынан.** Хәбәр ителеүенсә, Дәүләт Думаһы өсөнсө, һуңғы уҡыуҙа 2024 йылдың 1 ғинуарынан минималь хеҙмәт хаҡы күләмен айына 19 242 һумға тиклем арттырыу тураһында закон проектын ҡабул итте. "Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексында билдәләнеүенсә, эш биреүселәр МРОТ кимәленән аҙыраҡ хеҙмәт хаҡы түләргә тейеш түгел, - тине Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы етәксеһе урынбаҫары Оксана Ванскова. - 2023 йылда республикала был сумма - 18 678 һум".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЛЕГЕНДАР МАЙҘАНСЫҠ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2021 йылда башланған күләмле реконструкция эштәренән һуң "Башҡортостан" ДТРК-ның АСБ-1 телевидение студияһын асыуҙа ҡатнашты.**

АСБ-1 студияһы - легендар майҙансыҡ. Башҡортостан телевидениеһының йылъяҙмаһы тап ошо телевизион баҙанан башланған. 65 йылға яҡын тарихы булған АСБ студияһы ҡунаҡтары араһында республиканың, Рәсәйҙең һәм донъяның күренекле эшмәкәрҙәре бар: композитор Заһир Исмәғилев, СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, космонавт Владимир Комаров, Сергей Ревин, "донъяның балалар докторы" Леонид Рошаль һәм йөҙләгән сәйәсмәндәр, иҡтисадсылар, актерҙар, дәүләт эшмәкәрҙәре. Бөгөн Башҡортостан телевидениеһының алтын фондын тәшкил иткән тапшырыуҙар ҙа ошонда төшөрөлгән.

Тәүҙә сараның ҡунаҡтары легендар башҡорт телевидение студияһының тарихы тураһында ролик ҡараны. Артабан Башҡортостан Башлығы коллективты Башҡортостан телевидениеһының технологик үҫешендә сираттағы алға китеш ваҡиғаһы менән ҡотланы. Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһының генераль директоры урынбаҫары, төбәк департаменты етәксеһе Рифат Сабитов: "Күп йылдар Башҡортостан телевидениеһының тарихи студияһын яңыртыу тураһында хыялландыҡ, хәйер, был еңелдән булманы. Радий Фәрит улы, һеҙгә ярҙамығыҙ өсөн рәхмәт, бында, ысынлап та, республиканың өлөшө бик ҙур. Бөгөн беҙ легендар студияның яңырыуын күрәбеҙ. Ветерандарыбыҙ алдында түбәнселек менән баш эйәбеҙ, улар башлап ебәргән традицияlar бөгөн дә дауам итә", - тип билдәләне. Башҡортостан Башлығы, Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһының генераль директоры урынбаҫары һәм "Башҡортостан" ДТРК-һы директоры Азамат Сәлихов символик төймәгә баҫып, яңыртылған студияның эшенә старт бирҙе.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨНДӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала йәшәүселәрҙе Башҡорт теле көнө менән ҡотланы һәм башҡорт телендә һөйләшкән "Һомай" аҡыллы колонкаһы хаҡында һөйләне.**



- Башҡортостанда башҡортса һөйләшкән аҡыллы колонка уйлап сығарылған. Ул башҡорт һәм рус телдәрен аңлай, бер телдән икенсеһенә тәржемә итергә, һорауҙарға яуап бирергә, музыка һәм әкиәттәр тыңлатырға, башҡорт аш-һыуы рецептарын табырға мөмкин. Уның ярҙамында өлкәндәргә лә, балаларға ла башҡорт телен өйрәнеүе бик еңел. Проект "Һомай" тип атала. Уны Айгиз Ҡунафин етәкселегендәге программистар төркөмө әҙерләгән. Аҡыллы колонка нигеҙендә - яһалма интеллекты чатбот. Уны камиллаштырырға кәрәк әле, алда эштәр бик күп. "Һомай" - Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн бүленгән гранттар конкурсы еңеүселәренең береһе. Беҙ уларҙы тап ошондай проекттарға ярҙам итеү өсөн булдырҙыҡ та инде. Туған телде һәм мәҙәниәтте өйрәнергә, унан да бигерәк яратырға мәжбүр итергә ярамай тип иҫәпләйем. Әммә заманса алымдар һәм технологиялар ярҙамында уҡытыу процесын ҡыҙыҡлыраҡ һәм мауыҡтырғысыраҡ итергә мөмкин. Бөгөн Башҡортостанда Башҡорт теле көнөн билдәләйбеҙ. Башҡортса һөйләшкән, үҙе лә телде өйрәнгән һәм башҡаларҙы ла өйрәткән кешеләрҙе ҡотлайым. Байрам менән! Туған телде белейек, ҡәҙерләйек, үҫтерәйек! - тип мөрәжәғәт итте Башҡортостан Башлығы республикала йәшәүселәргә.

Билдәле булыуынса, 2019 йылдан Башҡортостан Башлығы указы менән башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында Башҡорт теле көнө билдәләнә. Байрам йыл да башҡорт шағиры, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөндә - 14 декабрҙә үткәрелә. Был юлы Өфөлә байрам саралары IX быуат башҡорт шиғриәтендә үҙенең ижады менән тотош бер поэтик мәктәп тыуҙырған мәғрифәтсе шағирҙарҙың береһе Мифтахетдин Аҡмулла һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башланды. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин, Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе урынбаҫары Тамара Танһыҡҡужина, шулай уҡ танылған яҙыусылар һәм шағирҙар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, педагогия университеты студенттары ҡатнашты.

# БАЛАЛАРҘЫ ЯҠЛАП...

**Башҡортостанда балаларҙы буллингтан яҡлау өсөн балалар омбудсменының вәкәләттәре киңәйтелә, тип хәбәр итә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәте.**

"Башҡортостанда балалар хоҡуҡтары буйынса вәкил тураһында"ғы БР Законының 11-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проектының төп маҡсаты - балалар араһында буллингка ҡаршы көрәш. Тап ошоноң өсөн балалар хоҡуҡтары буйынса вәкилдең вәкәләттәрен арттырырға уйлайҙар. Документҡа ярашлы, вәкил атаәсәләрҙең һорауы буйынса конфликтты хәл итеүҙә ҡатнаша, балаларҙың хоҡуҡтары боҙолоу факттары буйынса парламент тикшереүҙәре ойоштороуҙы талап итеп, Дәүләт Йыйылышына мөрәжәғәт итә алаcаҡ. Константин Толкачев билдәләүенсә, парламенттың эшсе төркөмө мәктәптәрҙә килеп тыуған ҡайһы бер хәлдәрҙә ҡатнашып, бер нисә тәҡдим менән сығыш яһай.

- Яңы саҡырылышта эшсе төркөм форматын киңәйтеп, уҡыусыларҙың социаль норманан тайпылыш мәсьәләләре менән шөғөлләнәсәк. Балалар буллингы бала психикаһына ныҡ насар йоғонто яһауын иҫәпкә алып, был хәлгә ҡаршы көрәш артабан да өҫтөнлөклө буласаҡ. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, балаларҙың 10 проценты ниндәй ҙә булһа кәмһетеүҙәр менән көн һайын осраша, ә яртыһы иһә ваҡыты-ваҡыты менән бындай хәлдә ҡала. Буллингта төрлөсә ҡатнашырға мөмкин: кемдер ҡорбан, кемдер яҙалаусы, кемдер ситтән күҙәтеүсе, әммә был ролдә булыусыларҙың барыһының да шәхесенә ул ныҡ насар йоғонто яһай. Бындай шарттарҙа вәкилдең буллингты булдырмауҙа ла, үҙ роле булырға тейеш, - тине ул.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓12 декабрҙән 14-нә тиклем Башҡорт теле көнө уңайынан Педагог һәм остаз йылына арналған "Аҡмулла диктанты" акцияһы ойоштороldо. Быйыл диктант дүртенсе тапҡыр үткәрелде. Унда 30 тест эше: М. Аҡмулланың һәм уның замандаштарының тормошо һәм ижады тураһында 10 һорау, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының ғилми-методик һәм педагогик эшмәкәрлеге хаҡында 10 һорау, нәфис әҙәбиәтте һәм сәнғәтте уҡытыусы образы тураһында 10 һорау булды.

✓Өфө уҡыусыһы ил Президенты Владимир Путин менән хоккей уйнарға хыяллана. Өсөнсө класс уҡыусыһы Мария Веремеева дәүләт башлығына яҙған хатында Владимир Путиндан автографлы портрет һораған, ә киләсәктә уның менән бергә осрашырға теләүен белдергән. Башҡортостан буйынса баш федераль инспектор Алексей Касьянов яҡташыбыҙға бүләк тапшырҙы. Марияның әсәһе Эльвира Веремеева һүҙҙәренсә, ҡыҙы мәктәптә яҡшы уҡый, хоккей уйнарға ярата, "Ағиҙел" спорт командаһында шөғөлләнгән, хатты үҙе яҙған һәм бына, ниһайәт, яуап алған.

✓Өфөлә данлыҡлы хәрби летчик-штурмовик, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев тураһында анимация фильмы өҫтөндә эш тамамланып килә. "Муса Гәрәев тураһында фильм - бик ҙур һәм ҡатмарлы эш. Беҙ анимацияны ротоскоп техникаһында эшләйбеҙ. Башта бөтә актерҙарҙы киностудияла төшөрҙөк, монтажланыҡ, ә һуңынан уның буйынса кадрҙар төшөрә башланыҡ. Актерҙар булып Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультетын тамамлаусылар сығыш яһаны", - ти рәссам-аниматор Дамир Мөхәмәтйәров.

✓Бөйөк Устюгтағы Ҡыш бабайҙың почта йәшнигенә балаларҙан һәм өлкәндәрҙән 234 меңгә яҡын хат килгән, шуларҙың 2024-е - сит илдәрҙән, 231 772-һе - Рәсәйҙән, тип хәбәр иттеләр Яңы йыл тылсымсыһы резиденцияһында. Быйыл Бөйөк Британиянан, Ирландиянан, Черногориянан хаттар бар. Хаттарҙа иң йыш теләнгән теләк - тыныс күк йөҙө. Үҫенсәлеклеләрәнә килгәндә иһә, суперкөслө булыу, хыялдарҙы бойомға ашырыу өсөн эшләпә, ике метрлыҡ киндер һәм башҡалар. Өлкәндәр фатир, машина, үҙенең мөхәббәтен осратыу тураһында хыялланa.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

# ЙЫЛДЫ ЙОМҒАҠЛАП...

**Был аҙнала Рәсәй Президенты Владимир Путин йыл һөҙөмтәләрен барланы. Был сара бер юлы матбуғат конференцияһы һәм тура бәйләнеш форматында үтте һәм унда федераль, төбәк, сит ил журналистары ҡатнашты. Дүрт сәғәткә һуҙылған осрашыуҙа Президент махсус операция, иҡтисад, тышҡы сәйәсәт тураһында һөйләне һәм төрлө һорауҙарға яуап бирҙе.**

Сара юҡҡа ғына йыл һөҙөмтәләрен барлау тип иғлан ителмәгәйне, Рәсәй Президенты унда, тәү сиратта, ил иҡтисадының санкциялар баҫымы аҫтында ла яҡшы уңыштарға өлгәшеүе тураһында белдерҙе. 2023 йыл һөҙөмтәләре буйынса Рәсәйҙә инфляция 7,5 процент тәшкил итәсәк йәки 8 процентҡа етәсәк, тип билдәләне В. Путин. Шул уҡ ваҡытта Үҙәк банк һәм Рәсәй хөкүмәтенең инфляция үсешенә юл ҡуймау өсөн барыһын да эшләүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Йыл һөҙөмтәләре буйынса Эске тулайым продукт күрһәткестәрен дә яҡшы, тип атаны Президент. Йыл аҙағына уның 3,5 процентҡа артыуы ла көтөлә. Президент билдәләүенсә, Рәсәйҙә былтырғы Эске тулайым продукт 2,1 процент тәшкил иткәйне, быйыл иһә уны үтеп китеп, хатта бер аҙым алға атларға мөмкинлек булған.

Владимир Путин эш хаҡы артыуы һәм эшһеҙлек кимәле түбәнәйеүе тураһында ла әйтте. "Инфляцияны иҫәпкә алып, реаль эш хаҡы яҡынса 8 процентҡа артасаҡ. Әлбиттә, бөтәһендә лә улай булмаясаҡ, әммә уртаса ил буйынса был статистика дөрөҫ, реаль килемдәр ҙә арта. Йыл башында эшһеҙлек 3 процент тип ҡыуанғайныҡ, бөгөнгө көнгә иһә ул 2,9 процент, Рәсәйҙә күптән быйың күҙәтелгәне юҡ ине, был иҡтисадтың торошон да күрһәтә. Реаль килем үҫәсәк, тигәнгә ҡайтҡанда, 1 ғинуарҙан минималь эш хаҡы күләме 18 процентҡа артасаҡ", - тип билдәләне Владимир Путин.

Бынан тыш, йыл дауамында эшҡәртеүсе сәнәғәт 7,5 процентҡа үҫкән. Предприятиеларҙың килеме лә арта. Былар барыһы ла ныҡлы иҡтисади үҫешкә, яңы эш урындары барлыҡҡа килеүенә этәргес буласаҡ. Рәсәйҙең тышҡы бурыстары ла 46 млрд долларҙан 32 млрд долларға кәмегән.

Сараның ҙур ғына өлөшө МХО-ға арналыуы аңлашыла. Путин был конфликтты "оло трагедия" тип атап, уға килтергән сәбәптәрҙе тағы ла бер тапҡыр телгә алып үтте. МХО-ның хәҙерге дөйөм хәленә ҡағылғанда иһә, Рәсәй хәрбиҙәре бөтөн линия буйынса үҙенең положениеһын яҡшырта, тип белдерҙе ул. Украина менән тыныслыҡ килешеүе тураһында ла айырым әйтте ил Президенты. Тыныслыҡ килешеүе МХО маҡсаттарына өлгәшкәс төҙөләсәк, ә улар әлегә үҙгәрешһеҙ ҡала. "Мобилизацияның икенсе тулҡыны буласаҡмы?" тигән һорау ҙа бирелде. "Быйың кәрәге юҡ", - тип белдерҙе ил Президенты. 2022 йылда өлөшләтә мобилизация һөҙөмтәһендә армияға 300 мең кеше саҡырылды, 2023 йылда контракт буйынса хеҙмәт итергә теләүселәрҙең һаны арткан. Әлеге мәлдә МХО зонаһында мобилизацияға эләккән 244 мең кеше хеҙмәт итә, уларҙың араһында 14 Рәсәй геройы бар. 41 меңе йәше тулыу йәки һаулығы арҡаһында хеҙмәттән бушатылған. "Рәсәй Ҡораллы көстәре менән контракт төҙөргә саҡырып мөрәжәғәт иткәндә йыл аҙағына 400 мең кеше йәлеп итергә тигән маҡсат бар ине. Бөгөн был һан 486 меңгә еткән һәм илен һаҡларға теләүсе ир-егеттәрҙең һаны кәмемәй, көн һайын 1,5 мең кеше 2-3 йылға килешеү төҙөй", - тине В. Путин.

Шулай уҡ Рәсәйҙең яңы төбәктәренән дә һорауҙар булды. Был төбәктәрҙә үҫтереү һәм уларҙы Рәсәйҙең иҡтисади һәм социаль тормошона индереү өсөн йыл һайын федераль бюджетта триллион һум ҡаралған. Бынан тыш, Рәсәйҙең төрлө төбәктәре уларҙы үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. "Был яңы субъекттар ҙа федераль бюджетҡа яҡынса 170 млрд һум килтерҙе", тип белдерҙе ил Президенты.

Рәсәйҙең Көнбайыш илдәре менән мөнәсәбәтенә ҡағылған һорауҙарҙы башлыса сит ил журналистары бирҙе. "Был илдәр менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу уларҙың үҙҙәренән тора", - тип яуапланы Владимир Путин. Ә бына Ҡытай менән тауар әйләнеше 200 млрд долларға етәсәк, тигән ышаныста. Быйыл был үҫеш 31 процент тәшкил итәсәк. "Рәсәй-Ҡытай мөнәсәбәттәре донъяның тотороҡлоғон булдырыусы бер гарант булып тора. Беҙ хәрби, иҡтисади, гуманитар өлкәлә хеҙмәттәшлек итәбеҙ", - тине Путин.

Мигранттарҙың эшенә сикләүҙәр индереү темаһы ла ҡуҙғатылды. Әле илдә 10 млн мигрант иҫәпләнә. Хеҙмәт баҙарындағы проблемаларҙы улар ярҙамында хәл итергә тырышыу Рәсәй халыҡтарына уңайһыҙлыҡтар килтерергә тейеш түгеллеген дә билдәләне Путин. Шулай ҙа квалификациялы эшсе ҡулдарҙы йәлеп итеү кәрәк, тине ул. "Мигранттар Рәсәй халыҡтарының ҡанундарын, йолаларын ихтирам итергә тейеш. Был проблема бөгөн генә килеп тыумаған, был йүнәлештә эшләргә кәрәк. Беҙ, тәү сиратта, урындағы халыҡтың ҡыҙыҡһыныуҙарын иҫәпкә алырға тейеш", - тине ил Президенты.

Шулай уҡ хаҡтарҙың артыуы ла борсой халыҡты. Һуңғы осорҙа барыһы ла һөйләгән яңылыҡ - йомортҡаның бер тиҫтәһе 100 һумдан ашып китеүен Президент "Хөкүмәт эшендәге тотҡарлыҡ" менән аңлатты, йәғни, етештереү кимәле элеккесә, ә ихтыяж артҡан һәм быны Хөкүмәт ваҡытында хәл итмәгән. Хәҙер йомортҡаны Төркиәнән, Беларусь Республикаһынан индерә башлауҙары ла бар. Әйткәндәй, ҡышлысаға ҡаршы вакцина етештереүҙең тотҡарланыуы нигеҙендә лә йомортҡа дефициты ята.

Ил башлығы льготалы ипотека программаһын оҙайтыу кәрәклеге тураһында ла белдерҙе. Халыҡ телендә "ғаилә ипотекаһы" булараҡ билдәле булған был программа 2024 йылдың 1 июлендә тамамлана. Уның ярҙамында ике балиғ булмаған балаһы булған ғаиләләр тәүге торлағын йылына 6 процент менән генә һатып ала ине. "Шулай ҙа был программа оҙайтыла ҡалһа, ул бюджеттың мөмкинлектәренән дә сығып ҡараласаҡ", - тине Владимир Путин.

"2000 йылға кире әйләнеп ҡайтһаҡ, үҙегеҙгә нимә тип әйтер инегеҙ?" тигән һорауға Владимир Путин: "Дөрөҫ юлдан бараһығыҙ, иптәштәр! - тиер инем, тип яуапланы. - Үҙҙәрен партнер тип иҫәпләгәндәргә ҡарата артыҡ ышаныуҙан һаҡланығыҙ, тип иҫкәртер инем. Көнҙәштәргә килгәндә, бөйөк рус, Рәсәй халҡына ышанырға кәрәк. Рәсәйҙең уңышы, яңырыуы, булмышы, үҫеше ошо ышаныс нигеҙендә".

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**14 декабрҙә һөйөклө туған телебеҙ - Башҡорт теле көнөн билдәләү айҡанлы "Киске Өфө" гәзите өр-яңы проект иғлан итә. Беҙ уны "Улар башҡорт мәктәбендә уҡыны!" тип атаныҡ. Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулағанд, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## РАФАЭЛЬ ИБРАҺИМ УЛЫ БАЙДӘҮЛӘТОВ

Белорет районының Береш ауылында тыуған. Уҫмангәлe һәм Инйәр мәктәптәрендә белем ала. Һөнәре буйынса энергетик, Иваново энергетика институтын тамамлай. Дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре. 1999 - 2008 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Премьер-министры, 2008 - 2010 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы. Башҡортостан Республикаһының 2-се саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты (1999 - 2003).

Рәсәй Берҙәм энергетика системаһының атҡаҙанған хеҙмәткәре (2003), Рәсәй ягыулыҡ-энергетика комплексының почётлы хеҙмәткәре (2003). Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған энергетигы (1993). "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" орденына (2003), Почёт орденына (2004), Салауат Юлаев орденына (2008) лайыҡ булған. Белорет ҡалаһы һәм Белорет районының почётлы гражданы.

## МАНСУР ӘНҮӘР УЛЫ ӘЙҮПОВ

Дәүләкән районының Исмәғил ауылында тыуған. Тыуған ауылында башланғыс мәктәптә уҡый, Ҡаҙанғол урта мәктәбен тамамлай.

Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, сәйәсәт белгесе, журналист. 1990 - 1994 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Премьер-министры урынбаҫары, 1994 - 1998 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Дәүләт секретары, 1998 - 2003 һәм 2007 - 2011 йылдарҙа Башҡортостан Президенты ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры. Башҡорт АССР-ының 11-се саҡырылыш Юғары Советы һәм Рәсәй Федерацияһының 4-се саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты. Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты (2009), сәйәсәт фәндәре докторы (2004), философия фәндәре кандидаты, профессор (2009). Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1997). "Башҡортостан Республикаһы алдында хеҙмәттәре өсөн" ордены кавалеры (2012).

(Дауамы. Башы 48-се һанда).

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Сей яра ауырыуы

❖ 1 балғалаҡ ҡалған үләненә (лапчатка прямостоячая) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә һәм төнәтмәне 3 өлөшкә бүлеп, ашарҙан 30 минут алда йылы көйөнсә эсергә. Шунан 10 минуттан һуң 1 балғалаҡ һырғанаҡ майын йоторға. Был рәүешле 1 ай дауаланырға. 2-се айҙа - көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 50-100 грамм тирәһе картуф һуты эсергә. 3-сө айҙа - тағы ла ҡалған үләне һәм һырғанаҡ майы ҡулланырға.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡлап киптерелгән дегәнәк тамырына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда эсә көйөнсә яртышар стакан эсергә.

## Теш ҡаҙнаһы

❖ Ҡаҙна ҡанаһа, ауыҙҙы имән ҡайырыһы һәм йүкә сәскәһе төнәтмәһе менән сайҡатыу кәңәш ителә халыҡ дауаһында. Быйың өсөн 2 өлөш имән ҡайырыһы һәм 1 өлөш йүкә сәскәһен ҡушырға. Әҙерләнгән 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә.

## Һарымһаҡ

❖ 300 грамм һарымһаҡты йыуып таҙартып, ярты литрлыҡ банкаға һалырға һәм спирт ҡойорға. 3 аҙна төнәтергә һәм көн һайын 20-шәр тамсыһын ярты стакан һөткә тамыҙып эсергә. Был дөйөм торошто яҡшырта һәм склерозға ҡаршы яҡшы сара.

## Өшөтөнөү

❖ Өшөткән урындарҙы дауалағанда 150-200 грамм киптерелгән сельдерейҙы 1 литр һыуға һалып бешерергә, һыуытырға. Шунан аяҡ-ҡулдарҙы төнәтмә бөтөнләй һыуынғансы тығып ултырырға. Тағы ла һыуыҡ һыу менән ҡойоноп, ҡаҙ майы һөртөргә. Уны көн һайын кискегә һөртөргә кәрәк.

❖ Бөтә тән туңғанда ауырыуҙы 25 градуслы һыу йыйылған ваннаға яткырылар. Шунан 15-20 минут эсендә эҫе һыуҙы даими өҫтәп тороп, һыу температураһын 36-37 градусҡа тиклем күтәрәләр. Ошо эҫелектә һаҡлап тороп, бөтә тәнен әҙүем массаж яһарға. Тән температураһы һәм пульс нормаға килгәс, ауырыуҙы ваннанан сығарып, кибендерергә һәм йылы юрғанға урап, йылыктыстар һалып, яткырырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Заман һынауҙарының береһе - коронавирус пандемияһы осоронда дистанцияла уҡытыу булды. Дистанцияла уҡытыуҙың белем биреү сифатына ниндәй кире йоғонто яһауын күрҙек.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡылғойроҡ (Шилохвость)**



Һуна өйрәктән бәләкәйерәк. Муйыны нәҙек оҙон, ҡойроғо - осло, беҙ кеүек, русса исеме лә шунан алынған - ҡыл кеүек ҡойроҡло. Суҡышы, тәпәйҙәре ҡара-һоро. Ата ҡоштоң башы һоро, ҡанатындағы "көҙгө"һө бронза төҫөн биреп, йылтылдап торған йәшел, осоп барышлай аҡ ҡорһағы, муйыны күренә. Инә ҡоштоң "көҙгө"һө ялтырамай. Инә ҡош йорт өйрәге кеүек тауышлана. Ата ҡош "трюк" тигәнерәк тауыш сағара.

Ҡылғойроҡ илдең бөтөн төбәгендә лә осрай. XIX-XX быуаттарҙа Өфө тирәһендә күп була, үткән быуаттың 70-се йылдарында Урал алдында тәйәкләнеүҙән бөтөнләй туҡтай. Көньяҡ Уралда һәм Урал аръяғында осрамай. Беренсе тапҡыр Урал аръяғында беҙ уны 1965 йылдың 11 майында Сыбаркүлдә, ошо йылдың 21 майында Атауҙы һәм Көньяҡ Үләнделә күрҙек. Хәҙерге ваҡытта Дәүләкән районында Тиҙ Танып, Ҙур Йылан, Ағиҙел йылғаларында, Баймаҡ районында бар.

Ағиҙелдә ҡылғойроҡ апрелдең баштарында уҡ күренә башлай. Йылға буйҙарындағы туғайҙарҙа, күл буйҙарында оя ҡора. Ояны инә ҡош ҡора. 7-11 йомортҡа һала һәм 22-24 көн эсендә яңғыҙы ғына баҫып сығара.

Һыу бөжәктәре, һыу үҫемлектәре һәм уларҙың орлоҡтары менән туклана. Сумып аҙыҡ тапмай, бары тик вертикаль рәүештә һыуға ятып ҡына ала. Һаҙ көйгәнәге, эре аҡсарлаҡтар, һоро ҡарға кеүек ҡоштар, эттәр, төлкө уларҙы нығыҡ ҡына ҡыра. Ата ҡоштар инә ҡош йомортҡа һала башлағас та мамығын ҡоя башлай. Был мәлдә улар тупланып, Волга һәм Урал тармағына китә.

Бәпкәләр 50 көн эсендә осорлоҡ була. Август аҙаҡтарында, сентябрь башында ҡылғойроҡтар тупланып, ҙур һыу буйҙарына йыйыла. Сентябрҙең икенсе декадаһында осоп китә башлайҙар. Каспий диңгеҙенән алып Ирландияның көнбайышына, Испанияға тиклем, көньяҡтараҡ Үҙәк Африкаға, Ҡыҙыл диңгеҙгә һәм Һиндостанға тиклем киң майҙанда ҡышлай. Тәбиғәттә 20-26 йыл тирәһе йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Ауыл йөрәге - мәктәп, тибеҙ. Сөнки мәктәп бөтһә, ауыл да яйлап һүнә, балаларҙың шат тауышы яңғырамаған төбәктә йәшәү йәмe ҡалмай халыҡҡа. Шуға ауылдың хәлен белгегеҙ килһә, йәмғәт, мәктәбенә күҙ һалығыҙ. Бына, әйтәйек, Өфө районы Шамонино ауылы мәктәбе - тораҡ пункттың йылдан-йыл үҫешеүенә бер дәлил. Был белем усағы тураһында унаң директоры Зилә Заһир ҡыҙы НУРИЕВА менән әңгәмәләштек.**

# БАЛАЛАР ТЫҢЛАЙ,

## атай-әсәйҙәр аңлай



**Мәктәптең асылыуына тиҫтәнән ашыу йыл үткән. Ошо араудыҡ эсендә республика кимәлендә үҙегеҙҙе ниндәй белем усағы итеп таныттығыҙ?**

- Мәктәп 2010 йылда асылды, мин бында 2011 йылда эшкә килдем. Тәүге йылдарҙа бында йөҙләп кенә уҡыусы белем алһа, 550 урынлыҡ мәктәптә бөгөн 1500 уҡыусы. Быйылғы уҡыу йылында беҙҙә 54 класс-комплект, ике сменала уҡыйҙар. Мәктәбебеҙҙә Шамонино, күрше Шмидтово һәм Бурцево ауылдарынан балалар йөрөп белем ала. Ошо йылдар эсендә мәктәп республика мәғариф учреждениелары араһында лайыҡлы урын алып, тик яҡшы яҡтан танылды, тип иҫәпләйем. Бында белем биреү менән бер ҡатарҙан тәрбиә буйынса ла эш алып барыла. Һуңғы осорҙа мәктәптәрҙә тәрбиә эше, айырыуса патриотик тәрбиә тураһында йыш телгә алһалар ҙа, беҙ быны бер ваҡытта ла хәтеребеҙҙән сығарманыҡ. Сөнки мәктәптәрҙә әле Советтар Союзы осоронда тыуған һәм тәрбиәләнгән педагогтар эшләй, улар өсөн әхлаҡи һәм рухи тәрбиә биреү - намыҫ ҡушыуы. Мәктәбебеҙҙең данын уҡыусыларыбыҙ ҙа, педагогтарыбыҙ ҙа күтәрә. Ҡайҙа барһаҡ та, "Шамонино мәктәбен беләбеҙ", тип торалар һәм юғай баһалайҙар.

Мәктәптә беренсе синыфтан алып уҡыған үҙебеҙҙең тәүге сығарылыш уҡыусыларыбыҙ ике йыл элек оло тормошҡа аяҡ баҫты. Беҙҙә белем алған балалар уҡыуҙа ла алдынғылар, һәр яҡлап һөнәрҙәрен арттыралар. Төрлө кимәлдәге спорт ярыштарында алдынғылыҡты бирмәйбеҙ: баскетбол, футбол, волейбол түңәрәктәренә бик яратып йөрөйҙәр. Грек-рим көрәше һәм милли көрәш, гимнастика буйынса ихлас шөғөлләнәләр. Ҡул эштәре оҫталарының түңәрәктәрен бик яраталар, заманса бейеү менән дә шөғөлләнәләр, ә инде "Дарман" халыҡ бейеүҙәре өлгөлә ансамбле бөтә республикаға "Байыҡ" конкурсында Гран-при яулаусы коллектив булараҡ билдәле.

Республиканың мәғариф өлкәһендә бойомға ашырылған барлыҡ проекттарҙа ҡатнашабыҙ. Мәҫәлән, "Ҡанатлан!" мәғариф проекты сиктәрендә бөтә модулдәр тормошҡа ашырыла беҙҙә. "Спорт көрәше - Башҡортостан мәктәптәренә" тигән проект сиктәрендә грек-рим көрәшен индереп, спорт залын тейешле йыһазландырҙыҡ. Былтыр "Заманса мәктәп" төбәк проектын бойомға ашырыу сиктәрендәге "Үҫеш нөктәһе" цифралы һәм гуманитар профилле белем биреү үҙәге асылды. Быйыл ошо проект сиктәрендә алынған өр-яңы заманса ҡорамалдар менән эш итеү буйынса республика педагогтары өсөн ҙур семинар ойоштороҡ. Ике "Шайморатов класы" астыҡ, был йүнәлештәге барлыҡ стандарт талаптар бойомға ашырыла, милли компоненты һаҡлап ҡалыуға ла булышлыҡ итте был. Әле мәктәп музейына тип ҡомарткылар туплай башланыҡ. Тантана залында тирмәбеҙ бар, шуны ла бер юлы яңыртып, матур ғына бер крайҙы өйрәнеү музейы ойоштороп ҡуйырға ниәтләйбеҙ. Айырым кабинет булдырыу мөмкин түгел әлегә, шуныһы ҡыҙғаныс.

Ә инде коллективыбыҙға килгәндә, 95 проценты - юғары категориялы педагогтар, Башҡортостандың мәғариф отличнигы тигән маҡтаулы исем йөрөткән педагогтарыбыҙ ҙа, атҡаҙанған уҡытыусыларыбыҙ ҙа бар. Педагогик кадрҙарға ҡытлыҡ кисереү тураһында һөйләһәк тә, беҙҙең мәктәп тулыһынса тәьмин ителгән. Әлбиттә, директор булараҡ, мин артабанғы үҫеш юлдары тураһында ла уйларға тейешмен. Әммә былары - көндәлек хәл итә торған мәсьәләләр, әйләп барыһын да яйға һала барабыҙ.

**Барлығы мең ярым уҡыусы белем ала, тинегеҙ. Уларҙың милли составын проценттар менән һанап әйткәндә нисек?**

- Был һорауға теүәл мәғлүмәт бирә алмайым. Тәүге йылдарҙа уҡыусыларыбыҙҙың 80-85 проценты башҡорт булһа, хәҙер тирә-яҡтағы ауылдарҙың үҫешенә бәйле, балалар һаны ла ҡырҡа артып, милли состав та үҙгәрҙе. Шулай ҙа беҙ традициябыҙға торғо ҡалырға тырышабыҙ, "Шайморатов кластары"н да шул маҡсаттан астыҡ һәм унда белем алған балаларға дәрестән тыш сараларҙа башҡорт теле, мәҙәниәте, үҙебеҙҙең йолалар тураһында һөйләйбеҙ. Беренсе кластан алып йыл һайын бер башҡорт класы асабыҙ: унда башҡортса һөйләшкән балалар ғына уҡый. Улар менән бөтә сараларҙы башҡортса ойоштораБыҙ, ата-әсәләр йыйылыштары башҡортса үтә. Былар - ата-әсәләрҙең, балаларҙың законлы вәкилдәренең ғаризалары буйынса ойошторолған кластар.

Шамонино ауылында сығыштары менән республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән килеп төпләнгән бик аңлы, зыялы атай-әсәйҙәр йәшәһә лә, ҡайһы берҙәрен йөрәк менән аңлап булмаған осраҡтар ҙа булғылай. Ғаиләләрендә башҡортса һөйләшеп тә, мәктәптә туған башҡорт телен уҡытырға теләмәһәләр, аптырайым. Бындай осраҡтарҙа һөйләшергә, башҡорт класында уҡыған балаларға бирелгән белемдең шулай уҡ сифатлы булыуы, матур сараларҙа ҡатнашыу мөмкинлектәре, уҡытыу эшенең ҡыҙыҡлыраҡ алып барылыуын аңлатырға тура килә. Әлбиттә, еңел тип әйтеп булмай, әммә был юҫыҡта эш даими алып барыла һәм дауам итәсәк.

**Мәғариф өлкәһендә йылдан-йыл үҙгәрештәр индерелеп тора, һеҙ заман талаптарына яуап биреп өлгөрәһегеҙме?**

- Бөтә талаптарға ла яуап биреп өлгөрөргә тырышабыҙ, бер ыңғайҙан үҙебеҙ ҙә эшкә өйрәнәбеҙ, тәжрибә туплайбыҙ. Сөнки хәҙер тормош үҙе шундай: белем алып сыктым, бөттө, тип ултырып булмай. Көнөнөкө көнөндә яңы хәл ителәһе мәсьәләләр ҡалҡып тора, ҡайһы саҡта кистән билдәләп ҡуйған план буйынса ғына бармауы ла бар ул эштәрҙең. Алдыбыҙға ҡуйылған бурыстар бик күп, улар араһында эш ҡағыҙҙары, отчеттар, сайтты биҙәү, эште ойоштороуға талаптар - ҡайһы берҙәре генә.

Эшмәкәрлегебеҙгә тулыһынса үҙгәреш индергән заман һынауҙарының береһе - коронавирус пандемияһы осоронда дистанцияла уҡытыу булды. Балалар һаны күп булғас, бик уҡ еңелдән булманы, әммә тиҙ генә ойошоп, эште алып барҙыҡ. Дистанцияла уҡытыуҙың белем биреү сифатына ниндәй кире йоғонто яһауын күрҙек. Атай-әсәйҙәр ҙә бер ваҡыт мәктәптең барлыҡ балалары өсөн ни тиклем яҡшы, әһәмиәтле булыуын төшөндө. Бәхетенән, мәктәп көн дауамында балалар менән шөғөлләнә, бында тукланыу ҙа яҡшы ҡуйылған, алыҫтан йөрөгәндәрен автобус менән килеп алалар, буш ваҡыттарын мөмкин тиклем файҙалы үткәреү ойошторолған, барыһы ла яҡшы икән. Ә дистанцияла уҡығанда баланың дәрес башында тоташыуы күренһә лә, аҙағыраҡ камераһын һүндереп, барып ашап килергә, уйынға әүрәргә, хатта йоҡлап китергә мөмкин. Санпин буйынса 30 минут ҡына барырға тейеш дәрестә уҡытыусы һәр уҡыусыны даими рәүештә күҙәтеп тора алмай һәм был белем биреүҙең сифатына бик ҙур йоғонто яһай. Шулай ҙа мәктәпте миҙалға тамамлаған, яҡшы өлгәшкән уҡыусыларыбыҙ булды. Юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр һаны буйынса күрһәткестәребеҙ гел юғары. Өфө районы мәктәптәре араһында беҙҙә генә 10-11 кластарға мәғлүмәти-технология һәм универсаль-гуманитар йүнәлештәрҙә белем алыу мөмкинлеге бирелә. Маҡсат ҡуйып килгән уҡыусылар 6 сәғәт физика, 4 сәғәт информатика дәрестәрен уҡыйҙар. Берҙәм дәүләт имтихандарын бик уңышлы тапшырып, теләгән вуздарына уҡырға инәләр.

(Дауамы 15-се биттә).

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



#### Кушнаренко мәҙәниәте ҡәбиләләре

VI-VIII быуаттарҙа Көньяҡ Уралда Кушнаренко ауылы биләмәһендәге ҡәберлектә табылған тәүге балсыҡ һауыт-һабалары буйынса шартлы рәүештә кушнаренко мәҙәниәте тип аталған ҡәбиләләрҙең ҙур бер төркөмө булыуы билдәләнде. Кушнаренко ҡәбиләләренең ҡомартҡылары әлегә етерлек кимәлдә өйрәнелмәгән, әммә тупланған материалдар улар мәҙәниәте буйынса бахмутлыларҙан һәм турбаҫлыларҙан ғына түгел, Көньяҡ Уралдың иртә урта быуаттарҙағы башҡа ҡәбиләләр төркөмдәренән дә ҡырҡа айырылып тороуын дәлилләй. Һуңғы йылдарҙа кушнаренко ҡәбиләләренең тарихы һәм мәҙәниәте буйынса элегерәк билдәле булған сығанаҡтар материалдарын тулыландырған ҡиммәтле ғилми мәҡәләләр баҫылып сығыуы хаҡында әйтеп үтергә кәрәк.

Кушнаренко ҡәбиләләре ҡомартҡылары территориаль яҡтан бөтөн Көньяҡ Уралда, уның көнсығыш һырттарында, һәм Урта Кама буйында урынлашҡан. Ағиҙел йылғаһы бассейнында улар бахмут һәм турбаҫлы ҡомартҡылары уратып алған "утрауҙар" булып ята. Кушнаренко ҡәбиләләренән ҡалған эҙҙәр Урта Камала ла асыҡ беленеп тора. Кушнаренколылар өсөн типик булған һауыт-һаба табылдыҡтары I Үрге Саин ҡаласығында һәм ҡәберлегендә, Үрге Утчан, I Күҙебай ҡаласыҡтарында һәм башҡа ҡомартҡыларҙа теркәлгән. Уларҙа ошондай һауыт-һабаның урындағы ҡәбиләләрҙең төп керамик комплексына (неволин, үрге утчан мәҙәниәттәре) ҙур булмаған өҫтәмә рәүешендә ҡулланылыуы хаҡында һығымта эшләргә була, һәм, моғайын, был кушнаренколыларҙың Пермь крайының көньяғына һәм Удмуртия сиктәренә тиклем үтеп инеүенә дәлил.

Кушнаренко ҡәбиләләренең 30-ға яҡын торағы табылды, шул иҫәптән мәҙәни ҡалдыҡтары әллә ни әһәмиәтле булмаған бер генә ҡатламлы ҡаласыҡтар төркөмө. Уларҙа табылған әйберҙәр, башлыса, кушнаренко һәм ҡара яҡуп керамикалары ярсыҡтарынан торған ике төркөмдө хасил итә. Беренсеһе күбеһенсә кувшинға оҡшаш формалағы оҙонса тар муйынлы йоҡа (ҡалынлығы 3-4 мм) һауыт-һабанан тора. Улар тышҡы яҡтан, йыш ҡына төптәре лә, киҫеп яһалған горизонталь билғау һыҙыҡтары һәм овал формаһындағы тешле штамптар тамғалары, шулай уҡ ҡыҫҡа ғына сатмаш киртектәр менән биҙәлгән. Һауыт-һаба бик ентекләп эшләнгән. Йоҡалығы арҡаһында был һауыттар көнкүрештә тиҙ ватылыусан һәм ғәмәлгә яраҡһыҙ булғанлыҡтан, моғайын, ритуал өсөн ҡулланылғандыр. Бәлки, улар металл һауыттарға оҡшатып яһалғандыр. Быны Урта Азия ювелирҙарының торевтикалы предметтарындағы (металл һауыт-һабаны ҡулдан рельеф орнамент менән биҙәү. - Тәрж. иҫк.) орнаментҡа оҡшаш булыуы күрһәтеп тора. Һауыт-һабаның икенсе бер төркөмө формаһы буйынса кушнаренконыҡыларға яҡын, әммә уларҙан күпкә тупаҫыраҡ эшләнеүе һәм орнаменты муйынының өҫкө ҡырыйында ғына булыуы менән айырылып тора. Ул "шыршы" кеүек яһалған ҡыҫҡа сатмаш киртектәрҙән, ҡыя һыҙыҡтарҙан һәм ярым борсаҡ формаһындағы ҡабарынҡы нөктәләрҙән тора.

Кушнаренко ҡәбиләләре мәҙәниәте ҡорған материалдарында яҡшыраҡ сағылыш тапҡан.

Лағыр (Әй йылғаһы буйында), Мәнәк (Тиҙ Танып йылғаһы буйында), Таҡталасуҡ (Ағиҙел тамағында) һәм Һынташтытамаҡ (Дим йылғаһы буйында) ҡурғандары ошо ҡомартҡыларҙың иң ҙурҙарынан һанала. Уларҙың төҙөлөшө үҙенсәлектәренән ябай һай ҡәберҙәр өҫтөнә уртаса 7-8 м диаметрындағы бейек булмаған ер өйөмдәре булыуын билдәләп үтергә кәрәк. Ер өйөмдәре аҫтында айырыуса ҡиммәтле предметтар өсөн махсус рәүештә яһалған йәшерен урындар булыуы хас.

Ҡурғандарҙа мәйеттәр табуттарға һалынған, ҡәбер төбө септә менән ҡапланған. Аттарҙы ҡәберҙәрҙә һәм улар янында ритуаль ерләү киң ҡулланылған. Ҡурғандарҙың төп әйбер материалы, керамиканан тыш, VI-VIII быуаттарҙағы турбаҫлы ҡомартҡыларын ҡабатлай, был уларҙың синхрон булыуын раҫлай. Табылдыҡтарҙан бил ҡайыштары тупланмалары, күкрәк һәм муйын биҙәүестәре, шул иҫәптән ҡатмарлы итеп үрелгән муйынсаҡтар, ат һыны рәүешендәге суҡтар, һырғалар, балдаҡтар һ.б. күләме яғынан иң күптәре. Ҡоралдар Р-рәүешле элмәктәр менән биҙәлгән ҡындарҙа йөрөтөлгән оҙон ҡылыстарҙан тора. Табылдыҡтар араһында Көньяҡ Уралда иң тәүгеләр иҫәбенә ингән өҙәңгеләр күп. Ҡайһы бер ҡатламлы ҡомартҡыларҙа (мәҫәлән, Мәнәктә) кушнаренко һауыт-һабаһы ҡараяҡуп тибындағы (Ҡара Яҡуп ҡаласығы исемендә) балсыҡ һауыт-һаба менән бергә табыла. Ҡара Яҡуп, Иҫке Ҡалмаш һәм Таптыҡ ҡаласыҡтары ҡомартҡыларының керамикаһы тик кушнаренко һәм ҡараяҡуп төркөмөнә ҡараған һауыт-һабанан тора. Шулай булһа ла, кушнаренко керамикаһы булған ҡомартҡыларҙың билдәле бер типологик һәм хронологик айырымлыҡтары асыҡ беленеп тора, һәм уларҙың килеп сығышын өйрәнгәндә быны күҙ уңынан сығарырға ярамай. Көнбайыш Себерҙә Урал буйының кушнаренко-ҡараяҡуп ҡомартҡылары менән билдәле бер яҡынлығы булған ҡомартҡылар төркөмө бар. Улар - Перейми ҡәберлеге һәм Логинов ҡаласығы. Ошо ҡомартҡылар төркөмө тураһында түбәндәрәк ентекләп бәйән итербеҙ.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**




*Карта № 9. Археология мәғлүмәттәре буйынса V-VIII быуаттарҙа Көньяҡ Уралда һәм уға сиктәш территорияларҙа йәшәгән ҡәбиләләрҙең биләмәләре: 1 - бахмут мәҙәниәте ҡәбиләләре; 2 - именьков мәҙәниәте ҡәбиләләре; 3 - үрге утчан мәҙәниәте ҡәбиләләре; 4 - ломоватов мәҙәниәте ҡәбиләләре; 5 - неволин мәҙәниәте ҡәбиләләре; 6 - турбаҫлы мәҙәниәте ҡәбиләләре; 7 - бакал мәҙәниәте ҡәбиләләре; 8 - кушнаренко мәҙәниәте ҡәбиләләре.*

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**Ҡашғари: "От" - малға ашата торған һәр төрлө аҙыҡ. Әйтәләр: atqa ot bergil - "атҡа аҙыҡ бир".** Әлбиттә, ат үлән менән туҡлана, әммә боронғо төркиҙәр малға ашата торған аҙыҡтарҙы - бесәнде, һолоно, һаламды ла ошо уҡ "от" һүҙе менән атай башлаған. Бында беҙ һүҙҙең формаһын үҙгәртмәйенсә генә уны яңы мәғәнәлә ҡулланыу осрағын күрәбеҙ.

**Ҡашғари әлеге "от" һүҙенең башҡа бер омонимдарын да теркәп ҡуйған: "от" - дарыу. Әйтәләр: "ot ičtim" (от ичтим) - мин дарыу эстем. Бынан "otačï" (отачи) һүҙе - дауалаусы.**

**Йәнә"ot" - ағыу. Әйтәләр: "beg agar ot berdi" (бек агар от берди) - "бек уға ағыу бирҙе".**

Был осраҡта ла ошо уҡ тамыр һүҙҙән - "от"тан ике яңы омоним барлыҡҡа килеүенә төшөнөргә була. Боронғо дәүерҙәрҙә лә, урта быуаттарҙа ла сирлеләрҙе дауалауҙың төп сығанағы итеп дарыу үләндәре ҡулланылғаны билдәле. Бағымсылар, дауалау оҫталары - табиптар ниндәй үләнде һәм нисек итеп файҙаланыу серҙәрен белгән.

Кешеләр ағыулы үләндәрҙе лә һәйбәт белгән, уларҙан ағыу яһау алымдарын белеүселәр ҙә була. Шуныһы ҡыҙыҡ, боронғо төркиҙәрҙең "от" - ағыуына рустарҙың "отрава" һүҙе тура килә, бында "трава" тамыры үҙенән-үҙе беленеп тора. Тел серҙәрен өйрәнеүселәр, этимологтар өсөн Мәхмүт Ҡашғари һүҙлегендә теркәлеп ҡалған лексемаларға лингвистик анализ яһау, башҡа бер телдәр менән сағыштырыу аша төрлө телдәр системаһына ҡараған лексик берәмектәрҙең мәғәнәүи ерлеген асыҡлау, уларҙың этимологияһын өйрәнеү юлында яңы мөмкинлектәр асыла.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 42-46-сы һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Ковель йүнәлешендәге һәм Владимир-Волынский янындағы яу хәрәкәттәре

11 апрелдән 18 апрелгә тиклем корпус 42 саҡрымлыҡ арауыҡта һуғыш хәрәкәттәре алып бара, резервтар юҡ, һуғыш припастары етешмәй. Ошо арҡала юғалтыуҙар күбәйә бара. 14-се Мозырь гв. атлы дивизияһының 54-се Ҡыҙыл Байраҡлы атлы полкына бигерәк тә ауырға тура килә - ул ҡамауҙа ҡалған көйө дошман атакаларын бер-бер артлы кире ҡаға.

Ҡаты алыштар барышында беҙҙең подразделениелар дошманды күп юғалтыуҙарға дусар итте. Немецтарҙың 2,8 мең һалдат һәм офицеры, 19 танкы, 8 "фердинанд" штурм орудиеһы сафтан сығарылды, 3 самолеты бәреп төшөрөлдө.

69-сы армияның бойороғона ярашлы корпус частары 20 апрелдән оборонаға күсә. Корпусҡа ярҙамға 247-се уҡсылар дивизияһы килә. Әммә дошман да тик ятмай - ул нисек итеп булһа ла беҙҙең ғәскәрҙәрҙең оборонаһын өҙөргә ниәт итә ине.

16-сы гв. атлы дивизияһы бер танк полкы, бер танкыға ҡаршы артполк һәм бер "катюшалар" батареяһы менән көсәйтелә. Төп боевой бурыс - дошмандың тере көстәрен һәм техникаһын фронт һыҙығы аша үткәрмәҫкә, мөмкин булғанса тотҡарлап тороп, уны юғалтыуҙарға дусар итергә. 24 апрелгә ҡаршы төндә 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадрон командиры, гв. өлкән лейтенанты М.В. Кирик 15 иң ҡыйыу яугир менән разведкаға бара. Төнөн йылға аша сығып, немецтарға тылдан һөжүм итеп, уларҙың 15-ләгән һалдатын ҡырып һалып, 3-һөн әсиргә алып, дивизия штабына илтәләр. 26 апрелдә беҙҙең разведчиктар тағы ла дошман тылына үтеп инә, был юлы улар менән шул уҡ 60-сы гв. атлы полкының 1-се эскадроны командиры, гв. өлкән лейтенанты И.Г. Гаевский командалыҡ итә. Йылға аша һындағы бер землянкала бер нисә тиҫтә немец һалдаттары һәм офицерҙары йоҡлап ятҡан була. Тауыштынһыҙ ғына шыуышып барып еткәс, дошман өҫтөнә гранаталар оса. Немецтар ҡаршылыҡ күрһәтеп өлгөрмәй ҡала. Төркөм немец пулеметын ҡулға төшөрә, тағы ла 5 һалдатты әсиргә ала. 1 майҙа Советтар Союзы Геройы, 60-сы гв.атлы полкының разведка начальнигы, гв. лейтенанты Г.И. Соловьев һәм гв. өлкән лейтенанты М.В. Кирик етәкселегендәге төркөм көпә-көндөҙ дошман тылына сығып, унда паника тыуҙыра. Дивизия 1944 йылдың май урталарына тиклем 18 км арауығында оборона тота.

Май айының тәүге көндәрендә комкор, генерал-майор М.П. Константинов дивизияғаҠыҙыл Байраҡ орденын тапшыра.Был бүләк беҙҙең дивизиябыҙға Мозырь һөжүм итеү операцияһында күрһәткән уңыштары өсөн бирелә. 17 майҙа корпус Турья йылғаһы буйындағы оборона позицияларын уҡсы дивизияларға ҡалдырып, 1944 йылдың 14 июленә тиклем 1-са Белорус фронтының резервына сығарыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Магнитогорск педколледжына Физкультура бүлегенә ситтән тороп уҡырға индем, уны Ҡыҙыл диплом менән тамамланым. Эшем шул тиклем оҡшай башланы, 8 йыл буйына мәктәптә физкультура уҡытыусыһы булып эшләнем.***

# ИРҘӘР ТӨҘӨГӘН

## тик ҡатын-ҡыҙ ҡулы ғына

**Башҡортостандың дәүләт власы органдарында һәм муниципалитеттарҙа етәксе вазифалар биләгән ҡатын-ҡыҙҙар әллә ни күп түгел. Күп йылдар буйына ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтары постарына тик ирҙәр генә тәғәйенләнде йә иһә һайланды. Ошо йәһәттән Ҡыйғы районы хакимиәте башлығы Зөһрә Мәүлитбай ҡыҙы ГОРДИЕНКОны тәүге ҡарлуғас, тип нарыҡларға була. Уҡыусыларыбыҙҙы уның тормош юлы, эшмәкәрлеге һәм ижтимағи-сәйәси ҡараштары менән таныштырабыҙ.**

**Һәр бер кешенең яҙмышы иң элгәре тыуып үҫкән ере, ата-әсәләре, яҡын туғандары менән бәйле. Хөрмәтле Зөһрә Мәүлитбай ҡыҙы, ғаиләгеҙ, бала саҡ йылдарығыҙ хаҡында хәтирәләрегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине.**

- Мин Учалы районында тыуғанмын. Әсәйем Фәниә Сабит ҡыҙы Яңы Байрамғол ауылынан, һөнәре буйынса уҡытыусы ине. Атайым Мәүлитбай Лоҡманов Белорет районының Тирлән ауылынан, һөнәре буйынса - геолог, замандаһында спорт менән мауыҡҡан, бокс буйынса Башҡортостандың экс-чемпионы исемен йөрөттө. Шулай килеп сыҡҡан, уларҙың икеһенең дә 30 йәштәр тирәһендә тәүге никахтары тарҡалған. Әсәйем Рәсүл ауылында рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгәндә мин тыуғанмын, ә атайым төньяҡ тарафтарына эшкә киткән була. Миңә 9 ай тулыуға ғаиләбеҙ Ямал-Ненец автономиялы округының Тарко-Сале тигән ҡасабаһына (хәҙер ҡала статусында) бөтөнләйгә күсеп китә. Әлбиттә, атайым-әсәйемдәр, яңы ғаилә ҡорғас, сит ерҙә яңы тормош өсөн ҡулайлыраҡ булыр, тип уйлағандарҙыр. Шулай итеп, минең бала сағым Себерҙә, Төньяҡ Поляр түңәрәгенән әллә ни алыҫ булмаған географик мөхиттә уҙҙы. Шул ҡасаба мәктәбендә 10-сы класты тамамлағас, Башҡортостанға кире ҡайтырға булдыҡ, сөнки атай-әсәйемдең төньяҡ тарафта эшләүенә 15 йыл тулды, былдай хеҙмәт стажы төньяҡ коэффициенты менән пенсияға сығыу өсөн мотлаҡ ине. Ул саҡта 3 майҙа бәләкәй һеңлем дә донъяға килгәйне.

**Тарко-Салела йәшәгән осорҙан матур хәтирәләр ҙә ҡалғандыр?**

- Беҙ Себерҙә лә ҡаҙимгесә, балалар нисек көн күрә, шулай йәшәнек. Себерҙәге тормошобоҙҙо ул тиклем үк етеш ине, тип тә әйтеп булмаҫ. Әсәйем тәүҙә тәрбиәсе булып эшләп алды, шунан торлаҡ-коммуналь хужалығы системаһына күсте, унда етәксе булып китте. Ул холҡо менән бик тәүәккәл, ҡыйыу эш итә белгәндәрҙән булды. Атайым нефть-газ етештереү өлкәһендә эшләне. Ул тәүге ғаиләһенә лә ярҙам итеп торҙо, ә әсәйем үҙ ғаиләһендә иң өлкән ҡыҙ булғас, кесе туғандарын ярҙамһыҙ ҡалдырманы. Шулай булғас, әллә ни артыҡ аҡсабыҙ булманы. Ә беҙ йәшәгән фатирҙа һәр саҡ күңелле була торғайны. Өйөбөҙ түрендә гитара, гармун булды. Атайым гармунда уйнарға ярата ине, кистәрен шиғыр уҡып күңел астыҡ. Атайым китап уҡырға әүәҫ булды, Ғүмәр Хәйәм робағиҙарын яттан белә ине, Есенин шиғырҙарын яратты. Шуныһы мөһим - ғаиләбеҙҙә матди ҡиммәттәр беренсе урында булманы. Беҙ йәшәгән фатирҙа бик йыш тыуған яҡтарҙан килгән ҡунаҡтар туҡталып, ҡунып китә инеләр. Кем генә килһә лә, әсәйем уларҙы йылмайып ҡаршы алды, барынса ҡунаҡ итте.

**Төньяҡ Себер климаты ситтән килгән кешеләрҙең һаулығы өсөн ауырыраҡ булманымы?**

- Мин әле лә ошо ауыр климат шарттарында йәшәүселәргә йәлләберәк ҡарайым. Ни өсөн? Унда ҡыштарын кеше организмы кислородты етерлек кимәлдә үҙләштерә алмай, көн яҡтыһы күпкә аҙыраҡ, поляр төндәр ҙә кеше һаулығы өсөн файҙалы түгел. Һеңлем Тарко-Салела тыуҙы һәм, күп тә үтмәне, уны бик көслө аллергия яфалай башланы. Уның тән тиреһе боҙолоп, һуйылып төшә башланы. Шунан һуң беҙгә Себерҙән ҡайтып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Шулай итеп, мин унда 11-се класты тамамлай алманым, шуның арҡаһында Төньяҡ Себер мәктәптәрен тамамлаған уҡыусыларға вузға ингәндә бирелә торған льготанан мәхрүм ҡалдым. Әлбиттә, шулай килеп сығыуын мин ауыр кисерҙем ул саҡта, хатта бер аҙ үпкәләп тә йөрөнөм...

**Башҡортостанға ҡайтҡас, ҡайҙа урынлаштығыҙ?**

- Беҙ Силәбе өлкәһе Верхнеуральск районының Межозерный ҡасабаһында йәшәй башланыҡ, ул Учалы ҡалаһынан 25 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Атайыма 46 йәш, пенсияға иртәрәк, тап шул ҡасабалағы шахталарға геолог һөнәренә ярашлы эшкә урынлашыу мөмкинлеге булды. 1993 йыл, илебеҙҙә сәйәси-иҡтисади реформалар бара. Әлегерәк беҙ Себерҙән ҡайтҡас, королдәрсә йәшәрбеҙ, тип уйлай торғайныҡ. Киреһенсә килеп сыҡты. Атай-әсәйемдәр туплап өлгөргән аҡсалар юҡҡа сыҡты. Бер ниндәй ҙә уңайлыҡтары булмаған йортта йәшәргә тура килде. Атайымдар һыйыр һатып алды, балаларға үҙебеҙҙең һөт-ҡаймағыбыҙ булһын тигәндәрҙер. Нисек кенә булмаһын, мин ошо Межозерный ҡасабаһында урта мәктәпте тамамланым...

**Сығарылыш класы уҡыусылары ниндәйҙер бер һөнәргә эйә булыу хаҡында уйлана башлай. Һеҙҙең дә, Зөһрә Мәүлитбай ҡыҙы, шундай хыялығыҙ булғандыр?**

- Мине уҡытыр өсөн атай-әсәйемдең бер ниндәй ҙә мөмкинлектәре булмауын мин аңлай инем. Юрист булырға, хатта милицияла эшләргә хыялландым. Университеттың юридик факультетына инеү өсөн имтихандар бирҙем. Әммә мине конкурстан үткәрмәнеләр, бәлки, минең ул саҡта төньяҡта теркәлгән булыуым (пропискала тороуым) ҡамасаулағандыр. Ни эшләргә һуң? Мин төньяҡ ҡыҙы булып үҫеп еттем бит, тоттом да яңынан Себергә юлландым. Унда мәктәп-интернаттың кубовойына һыу ҡайнатыусы булып эшкә индем: һыу насар булғас, балаларға уны ҡайнатып ҡына эсерәләр ине. Эш хаҡы түбән, уныһын да икешәр ай түләмәйҙәр, техничка булып та эшләйем бер үк ваҡытта. Бер йыл эшләгәс, кире ҡайттым. Әлеге лә баяғы, вузға уҡырға инеү тураһында уйлайым. Мәктәптә уҡыған сағымда спорт менән күп шөғөлләндем - футбол, баскетбол, волейбол ярыштарында ҡатнаштым, әүҙемлегемде хуплап, Артекка ла ебәргәндәре булды. Милицияның Өфө юғары мәктәбенә барҙым. Унда 2 йыл хеҙмәт стажы булмайынса, уҡырға алмайбыҙ, тинеләр. Шунан мин Учалы ҡалаһы милицияһының ведомствонан тыш һаҡ хеҙмәтенә эшкә индем, форма бирҙеләр, автобус менән Межозерныйҙан Учалыға эшкә йөрөй башланым. Ошонда ике йыл эшләйем дә, әлеге юғары милиция мәктәбенә уҡырға инәм, тип уйлайым.

Ошолай йәй үтеп китте. Бер мәл, сентябрь урталарында ине, туҡталышта торғанда Межозерный мәктәбенең бер уҡытыусыһы осраны. Һөйләшеп киттек, Учалыға эшкә йөрөүем хаҡында әйттем. Мәктәптә физкультура, хеҙмәт уҡытыусылары юҡ икән, эш хаҡы аҙ булғас, әлегә тиклем эшләгән ир-егеттәр мәктәптән киткән. Был уҡытыусы миңә мәктәпкә физкультура уҡытыусыһы булып эшкә урынлашырға тәҡдим итте. "Махсус белемем юҡ бит, алмаҫтар ул", тип яуаплайым. Шулай ҙа барып ҡарарға булдым, йөрөп эшләү ҙә ялҡыта бит, ә хеҙмәт стажы барыбер барасаҡ. Межозерный ҡасабаһының был мәктәбендә ауыр холоҡло балалар уҡый ине. Мәктәп директоры Татьяна Николаевна Сәлимоваға индем, физкультура уҡытыусыһы булып эшләргә теләүем хаҡында әйттем.

Ул миңә нисектер аптырабыраҡ ҡараған һымаҡ булды - ул саҡта миңә ни барыһы 18 генә йәш, үҙем мәктәпте бер йыл элек кенә тамамлағанмын. Шулай ҙа: "Спорт менән шөғөлләндем, балалар менән эшләй аласаҡмын", - тигәс, директор мине эшкә алырға булды.

Шулай итеп, мәктәптә эшләй башланым. Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына, тигән боронғолар. Тап шул саҡта Магнитогорск педколледжына уҡырға инергә теләүселәр бик аҙ булып, ул өҫтәмә ҡабул итеү хаҡында иғлан бирҙе. Физкультура бүлегенә ситтән тороп уҡырға индем, уны Ҡыҙыл диплом менән тамамланым. Тора-бара эшем шул тиклем оҡшай башланы, 8 йыл буйына мәктәптә физкультура уҡытыусыһы булып эшләнем.

**Ә милицияла эшләү тураһындағы хыялығыҙҙан ваз кистегеҙме?**

- Ул хаҡта һөйләй башлаһаң, шундай ҡыҙыҡлы бер хәл иҫкә төшә. Әйткәнемсә, ауыр холоҡло балалар менән эшләйбеҙ. 90-сы йылдар - аҙ килемле, социаль яҡтан ауыр ситуацияға тарыған ғаиләләр бермә-бер күбәйгән ваҡыт. Ә беҙ шул балаларҙы эҙләп йөрөп тигәндәй табып, урам тәрбиәһе йоғонтоһонан ҡотҡарырға тырышабыҙ: улар өсөн төрлө саралар ойоштораббыҙ, спорт ярыштары, күңелле ял итеү кисәләре уҙғарабыҙ. Торғаны менән балиғ булмағандар эштәре буйынса комиссияға тиңләрлек булды эшебеҙҙе. Шулай бер көндө Верхнеуральск районының милиция начальнигы урынбаҫары килеп инде. Ул минең менән һөйләшергә килгән икән: "Беҙгә балиғ булмағандар эштәре буйынса комиссияла эшләрлек белгес кәрәк. Һеҙ риза булһағыҙ, Силәбе ҡалаһына ярты йыллыҡ курсҡа уҡырға ебәрәбеҙ", - ти. Миңә әле 21 йәш тулған, ә ярты йылдан милицияла эшләй башлаясаҡмын! Былай булғас, хыялым тормошҡа ашасаҡ, тип, шатланып киттем. Әммә директорыбыҙ Татьяна Николаевна кирегә дүндерҙе мине: "Һинең урының мәктәптә, бик яҡшы эшләйһең, балалар ҙа ярата, коллегаларың да хөрмәт итә. Һиңә юғары белем дә алырға кәрәк. Һин минең тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫарым, кадрҙар резервына индергәнмен, киләсәктә үҙең директор булырһың. Нимәгә һиңә ҡысынмалы, бетләп бөткән балалар менән интегергә? Беләһеңме нимә, милицияға барғансы, кейәүгә сығырыңды уйла", - тимәһенме. Шулай итеп, мәктәптә ҡалдым.

Ике йыл ваҡыт тиҙ генә үтеп тә китте. 23 йәштәмен. Беҙҙең бәләкәй ҡасабала "карт ҡыҙҙар" иҫәбендәмен, йәштәштәремдең барыһы ла ғаиләле булып бөттө. Мин дә шул турала уйлай башланым. Бик етеҙмен, таҙа кәүҙәле, спортсы формаһындамын, йүгермен, саңғыла йөрөйөм - тик бер егет тә миңә яҡын килмәй, минән ҡурҡалар инде әллә, тип уйлайым. Шул саҡта Верхнеуральск хакимиәте башлығы урынбаҫары мине ха-

***Тоҡомобоҙ - тулыһынса башҡорт нәҫеле. Ситтә йәшәгәс, олораҡ быуын туғандарыбыҙҙан һорашып, боронғо ата-бабаларыбыҙ хаҡында мәғлүмәт алып ҡалмағанбыҙ. Минең олатайым, атайымдың атаһы Ғаймал Лоҡмановҡа замандаштары бик һоҡланып ҡараған: төҫ-башҡа бик күркәм, ике метрға еткән оҙон буйлы, холҡо яғынан да баһалы кеше булған ул. Белоретта ҡорос ҡойоу цехында эшләгән. Ҡыҙғанысҡа күрә, был донъянан иртәрәк киткән. Әсәйемдең атаһы Сабит олатайым мулла булған, ҡатыны Ғәйниҙә унан 20 йәшкә кесерәк була, беҙгә көслө рухлылыҡ ошо ҡатын-ҡыҙ линияһы буйынса бирелгәндер, тим. Ғәйниҙә өләсәйемдең яҙмышы ла трагик хәлдәр менән бәйле: атаһы, йәғни минең ҡарт олатайым, уҡытыусы булған, ул - репрессия ҡорбаны. Уның 4 ҡыҙы етемлектә үҫә. Өләсәйем, бала сағыбыҙ булманы, тип әйтер ине. Кеше балаларын ҡарап көн иткән улар. Өләсәйем Себерҙә беҙҙең менән йәшәне, көслө рухлы ине.***

***✓ Әгәр ниндәйҙер мөмкинлектәрең бар икән, кешеләргә мотлаҡ ярҙам итергә кәрәк. Йәмғиәт мәсьәләләре булһынмы, йә иһә айырым кешеләрҙең һорау-үтенестәреме, уларҙы хәл итеү тураһында ҡайғыртһаң.***



# өйгә...

## эске йәм бирә ала

**Ни сәбәпле Учалыға барып төпләнергә булдығыҙ?**

- Беҙ Межозерныйҙа әсәйемдең өйөндә йәшәнек, Андрейҙың да, минең дә үҙ йортобоҙ юҡ ине. Межозерный - бәләкәй генә шахтерҙар ҡасабаһы, унда төпләнеп йәшәү өсөн шарттар булманы. Шуға күрә мин Учалыға барып төпләнергә ҡарар иттем, ирем ҡаршы булманы. Тәүҙә ҡуртымға алынған фатирҙа йәшәнек, һуңынан, аҡса туплап, фатир һатып алдыҡ.

Учалыла мин күнегелгән эшемде дауам иттем, 12-се башҡорт лицейына физкультура уҡытыусыһы булып урынлаштым. Шул мәктәпкә әле лә рәхмәтлемен. Ошоға тиклем ауыр холоҡло балалар менән эшләгәс, һәр саҡта ла үҙенде ныҡ етди, ҡәтғи һүҙле, талапсан итеп тоторға тура килде. Ә бында шундай матур, тыңлаусан, мөләйем ҡыҙҙар һәм малайҙар уҡый - бөтөнләйгә икенсе менталитет. Миңә өлкән кластарҙы бирҙеләр. Уларҙы төрлө сараларға йәлеп итеүе ауыр булманы. Асыҡ дәрестәр күрһәтә башланым, спорт ярыштары ойоштораm, инвалид һәм ауырыу балалар өсөн дауалау физкультураһы кабинетын астыҡ, кистәрен шейпинг клубы эшләй башланы. Шулай бер көндө лицей директоры Әғләм Әҙһәм улы миңә әйтә: "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашырға бер кеше кәрәк беҙҙән. Береһе лә риза түгел, әйҙә, һин үҙенде һынап ҡара". "Мин лицейҙа бер йыл ғына эшләнем, нисек итеп ҡатнашайым һуң?" - тимен. "Гитараңды алаһың да бараһың, ниməһе бар инде уның", - тигәс, риза булдым. Көтөлмәгәнсә, Учалы ҡалаһында конкурста еңдем.

Артабан - республика конкурсы, ә әҙерләнергә ваҡыт бирелмәне ул саҡта. Физкультура уҡытыусыһына кем республика кимәлендә урын бирһен инде, нисек булһа, шулай булыр, тип, март айында Өфөгә йүнәлдем. Ә жюри ағзалары - шундай вазифалы кешеләр, Раил Әсәҙуллин һәм башҡа профессор дәрәжәһендәге шәхестәр. Үҙемдең концепциямды яҡланым, Өфө мәктәптәренең береһендә асыҡ дәрес биргәндә ныҡ тулҡынландым, әммә уҡыусылар һынатманы - дәресемә һәйбәт баһа бирелде. Һөҙөмтәлә миңә, конкурс призерҙарының береһе булараҡ, "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән маҡтаулы исем бирелде. Миңә 27 генә йәш, педагог стажым да әллә ни ҙур түгел. Шулай ҙа үҙемдең тырышлығым, энергиям менән жюри ағзаларының оло баһаһына лайыҡ булғанмындыр. Был ваҡиға беҙҙең учалылар өсөн дә торғаны менән бер тетрәнеү булды, ул турала матур иҫтәлектәр ҡалды. Тап ошонан һуң мин Учалыла популяр булып киттем...



кимиәткә эшкә "ҡоҙалап" килде. Йәштәр эштәре буйынса урынбаҫар вазифаһына тәҡдим итәләр. Әлеге лә баяғы, мин тағы ла Татьяна Николаевнаға индем. Ул быны ни тине миңә: "Зөһрә Мәүлитбаевна, ә һин беләһеңме, район хакимиәтендә тик ҡарт ҡыҙҙар эшләй. Береһе лә кейәүгә сыға алмаған. Һин унда эшкә барһаң, һине бер кем дә алмаҫ, ҡарт ҡыҙ булып ҡаласаҡһың. Һине бында барыһы ла белә, мотлаҡ табырһың һөйгәнеңде". Тыңланым уны. Декабрь айында буласаҡ тормош юлдашым менән таныштыҡ, бер-беребеҙҙе оҡшаттыҡ, мөхәббәтебеҙ шулай яралды. Иптәшем Андрей - рус егете, элегерәк Алматыла йәшәгән. Хәҙер беҙҙең ике ҡыҙыбыҙ үҫеп килә. Шулай итеп, Татьяна Николаевнаның әйткәне хаҡҡа сыҡты. Межозерныйҙа 2002 йылға тиклем йәшәнек.

**Мин төрлө конкурстарҙы кешенең теге йәки был өлкәлә өлгәшә алған мөмкинлектәрен, күтәрелә алған бейеклектәрен барыһына ла күрһәтә алыу, тип ҡабул итәм. Бында кешенең йәше иң мөһим фактор түгелдер...**

- Килешәм. Әлбиттә, үҙ һөнәре өлкәһендә оҙаҡ йылдар буйына эшләү һөҙөмтәһендә кеше бай тәжрибә туплай ала, үҙ эшенең оҫтаһына әйләнә. Әммә йәш сағынан уҡ юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкәндәр ҙә аҙ түгел бит. Бында уларҙы "ялған исем" алыуҙа ғәйепләү һис дөрөҫ булмаҫ. Кемдер үҙ алдына юғары маҡсаттар ҡуйып, тәүәккәл эш итә икән, ундай шәхес хуплауға ғына лайыҡ.

**Күренекле шәхестәрҙең ата-бабалары ла үҙ иленең баһалы заттарынан булған - быны нәҫел ебенең дауамы итеп аңларға кәрәктер. Үҙегеҙҙең нәҫел-затығыҙ хаҡында һеҙгә ниҙәр мәғлүм?**

- Тоҡомобоҙ - тулыһынса башҡорт нәҫеле. Ситтә йәшәгәс, олораҡ быуын туғандарыбыҙҙан һорашып, боронғо ата-бабаларыбыҙ хаҡында мәғлүмәт алып ҡалмағанбыҙ. Минең олатайым, атайымдың атаһы Ғаймал Лоҡмановҡа замандаштары бик һоҡланып ҡараған: тәҫ-башҡа бик күркәм, ике метрға еткән оҙон буйлы, холҡо яғынан да баһалы кеше булған ул. Белоретта ҡорос ҡойоу цехында эшләгән. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, был донъянан иртәрәк киткән. Әсәйемдең атаһы Сабит олатайым мулла булған, ҡатыны Ғәйниҙә унан 20 йәшкә кесерәк була, беҙгә көслө рухлылыҡ ошо ҡатын-ҡыҙ линияһы буйынса бирелгәндер, тим. Ғәйниҙә өләсәйемдең яҙмышы ла трагик хәлдәр менән бәйле: атаһы, йәғни минең ҡарт олатайым, уҡытыусы булған, ул - репрессия ҡорбаны. Уның 4 ҡыҙы етемлектә үҫә. Өләсәйем, бала сағыбыҙ булманы, тип әйтер ине. Кеше балаларын ҡарап көн иткән улар. Өләсәйем Себерҙә беҙҙең менән йәшәне, көслө рухлы ине. Совет осоронда Сабит олатайым менән 5 балаһын бик тә яратып, тәрбиәләп үҫтергәндәр, барыһын да уҡытып, белемле итә алғандар. Мәктәптә уҡыған сағымда минән дә матурыраҡ кейемдә йөрөгән башҡа ҡыҙҙар булманы, тип әйтер ине әсәйем.

**Учалы ҡалаһы һәм районы хакимиәтендә эшләгән йылдарығыҙҙы нисек баһалайһығыҙ, идара итеү хеҙмәте һеҙҙең шәхесегеҙҙе үҙгәртмәнеме?**

- Хакимиәттә 5 йыл дауамында йәштәр эштәре буйынса комитет етәксеһе булдым, һуңынан хакимиәт башлығының ижтимағи-гуманитар эштәр буйынса урынбаҫары вазифаһында эшләнем. Ҡайҙа ғына эшләһәң дә, ниндәй генә вазифа биләһәң дә, һөҙөмтәле эшләү зарур. Ул саҡтағы эшемде намыҫ менән башҡара инем, республикабыҙҙың ҡала һәм район хакимиәттәренең йәштәр эштәре буйынса иң өлгөлө комитеттары иҫәбенә индек. Йәштәргә ҡыҙыҡлы булһын өсөн инициатива күрһәтергә кәрәк: велоуҙыштар, спорт ярыштары, төрлө фестивалдәр, косплейҙар, ҙур концерттар ойоштораБыҙ, әүҙем йәш лидерҙарҙы йәлеп итәбеҙ. Ул саҡта Учалыла йәштәр сәйәсәтен тейешле кимәлдә алып барҙыҡ тип әйтә алам.

Учалылар менән эшләүе рәхәт булды, унда бит шундай талантлы, әүҙем халыҡ йәшәй. Ниндәй генә яңы сара башлаһаҡ та, битараф булманылар, бергәләшеп тотонғас, барыһы ла һәйбәт килеп сыға торғайны. Тормош юлымда өлгөлө, ярҙамсыл, яҡшы күңелле кешеләр күп булды, тип ышаныслы рәүештә әйтә алам. Учалыла эшләгән йылдарҙа 4 хакимиәт башлығы алышынды, уларҙың барыһы ла минең эшемдә хуплап, дәртләндереп торҙо. Ғөмүмән, идара итеү хеҙмәтендә етәкселәремдән уңдым. Ә үҙенә талапсан, башҡаларҙы кешелеклеле мөнәсәбәттә булыуҙың мөһим икәнлегенә инандым.

**Етәксе органдарҙа эшләгән осорорроҙҙа артабанғы тормошоғоҙҙо нисегерәк күҙаллай инегеҙ - карьерағыҙҙы дауам итергәме, әллә башҡа берәй ниәттәрегеҙ булдымы?**

- Әлбиттә, булды. Йәштәр эштәре буйынса комитеттан китһәм, үҙемде бизнеста һынап ҡарарға тигән уйым бар ине. Учалы районында туризмды үҫтереү, атап әйткәндә, этник туризм объекттарын булдырыу мөмкинлектәре бар ул. Теләгем - Байрамғол ауылында "Нәҫел-нәсәб оя һы" тигән туризм объектын төҙөү. Әммә хакимиәттә эшләп йөрөгәндә был хыялды ғәмәлгә ашырыу өсөн ваҡыт та, финанс мөмкинлектәре лә булманы. 2011 йылда хакимиәттәге эшемдән китергә булдым - йәштәр эштәре менән йәшерек белгестәр шөғөлләнергә тейеш, тип уйланым. Оҙаҡ итеп ял итеп тә булманы, яңы хакимиәт башлығы Фәрит Дәүләтгәрәев мине ижтимағи-гуманитар эштәр буйынса үҙенең урынбаҫары вазифаһына эшкә саҡырҙы. Ошо вазифала 2020 йылға тиклем эшләнем.

**Ауыл ерлегендә ижтимағи проблемалар етерлек, ярҙамға мохтаждар күп. Көн һайын ошо проблемалар менән шөғөлләнеү ауыр булманымы?**

- Әгәр ниндәйҙер мөмкинлектәрең бар икән, кешеләргә мотлаҡ ярҙам итергә кәрәк. Йәмғиәт мәсьәләләре булһынмы, йә иһә айырым кешеләрҙең һорау-үтенестәреме, уларҙы хәл итеү тураһында ҡайғыртһаң. Тик шуныһы: шундай ситуациялар була, мәсәлән, һирәк осрай торған сир менән ауырығандарҙы, инвалидтарҙы дарыуҙар менән тәьмин итеү, йә иһә етемдәргә фатир табыу кеүек мәсьәләләрҙе тиҙ генә хәл итеп булмай, был хакимиәттән генә тормай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, яңғыҙдар булып тора, кешеләр торлаҡһыҙ ҡала. Улар ярҙам һорай. Йәки иркенән мәхрүм ителгән кеше тыуған яғына ҡайта, ә уны бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар. Ошондай бихисап мәсьәләләр менән көн һайын тиерлек шөғөлләнергә тура килә. Ярҙам итер өсөн бер ниндәй мөмкинлек булмаған саҡтарҙа проблеманы юғарыраҡ кимәлгә сығарып, хәл итеү юлдарын табыу зарур. Хакимиәттең иң ауыр бурыстары - ижтимағи-гуманитар эштәр өлкәһенә ҡарай. Ярай әле, бик көслө, эшмәкәр команда туплай алдым. Бер-беребеҙҙе аңлап, ярҙам итешеп, бергәләшеп эшләнек.

***Республика Башлығы ла мине алдан иҫкәртеп ҡуйғайны: "Зөһрә Мәүлитбаевна, ҡатмарлы район, унда эшләүе һеҙгә еңелдән булмаясаҡ", - тип. Һалым базаһы ныҡ түбән, килем килтерерлек етештереү предприятиялары бармаҡ менән һанап сығырлыҡ. Аҡсаһыҙ властан да көсһөҙөрәк ни бар икән? Әммә, бөтөн нәмә лә етеш булһа, эшеңдең әллә ни ҡыҙығы ла булмай. Яуаплылыҡты үҙ иңеңә алғас, эшләргә кәрәк. Шулай итеп, Ҡыйғы районы хакимиәтендә эшләй башланым. Кадрҙар, башлыса, ир-егеттәр. Кардиналь үҙгәрештәр булманы, тик, ҡайһы берәүҙәрҙең урындарын алыштырырға тура килде. Бер ниндәй ҙә конфликтҡа юл ҡуйылманы.***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***✓ Матурлыҡҡа һыуһағанбыҙ, тирә-яҡ мөхитте сүп-сарҙан, бысраҡтан таҙартып, сәскәләр үҫтереп була. Тормошобоҙҙо ла рухи яҡтан шулай ҡора алыр инек, бында ҡатын-ҡыҙ ҡарашы, аңы һәм хисе беренсе планға сыға.***



# ИРҘӘР ТӨҘӨГӘН ӨЙГӘ...

## тик ҡатын-ҡыҙ ҡулы ғына эске йәм бирә ала

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**2020 йылдан башлап һеҙ Ҡыйғы районы хакимиәтен етәкләйһегеҙ. Был районды ерҙәре Башҡортостандың ҡатмарлы климатлы төньяҡ-көнсығышында урынлашҡан. Бында урмандарҙан, яландарҙан, йылғаларҙан башҡа бер ни ҙә юҡ, тип тә әйтеүселәр бар.**

- Ни эшләп булмаһын? Бар, Ҡыйғы районының бына тигән кешеләре бар. Улар - райондың төп байлығы. Күптәр, ни эшләп Ҡыйғы районын һайланығыҙ, тип ҡыҙыҡһына. Ҡыйғыға килгәнемә һис үкенмәйем. Ниндәй ваҡыт тура килде бит әле: күп тә үтмәне, йәнде көйҙөргән ковид сире башланды, ә унан һуң - Махсус хәрби операция. Бөтә был ауырлыҡтарҙы Ҡыйғы халҡы менән бергә йөрәктән үткәрҙек.

Республика Башлығы ла мине алдан иҫкәртеп ҡуйғайны: "Зөһрә Мәүлитбаевна, ҡатмарлы район, унда эшләүе һеҙгә еңелдән булмаясаҡ", - тип. Һалым базаһы нык түбән, килем килтерерлек етештереү предприятиялары бармаҡ менән һанап сығырлыҡ. Аҡсаһыҙ властан да көсһөҙөрәк ни бар икән? Әммә, бөтөн нәмә лә етеш булһа, эшенден әллә ни ҡыҙығы ла булмай. Яуаплылыҡты үҙ иңеңә алғас, эшләргә кәрәк.

Шулай итеп, Ҡыйғы районы хакимиәтендә эшләй башланым. Кадрҙар, башлыса, ир-егеттәр. Кардиналь үҙгәрештәр булманы, тик, ҡайһы берәүҙәрҙең урындарын алыштырырға тура килде. Бер ниндәй ҙә конфликтҡа юл ҡуйылманы. Ситтән килгән етәксегә идара эштәрен әүҙемләштереп ебәреү еңелдән түгел, әммә ҡул аҫтында компетентлы белгестәр бар икән, уларҙы дәртләндереп, энергия, ҡеүәт биреү фарыз.

**Ҡыйғы районында етәкселәр йыш алмашынып торҙо. Һеҙҙе лә ваҡытлы ғына килгән хакимиәт башлығы тип иҫәпләмәнеләрме?**

- Бер йыл тирәһе эшләгәс, Гордиенко китә икән, тигән хәбәрҙәр булып алды. Мин шундуҡ: "Мине бындағы муниципаль хеҙмәткә республика етәкселеге тәғәйенләне, ышаныс белдерҙе. Мин ошо ышанысты аҡларға тейешмен", - тип белдерҙем. Әлбиттә, тәнҡит һүҙҙәре лә булды һәм буласаҡ, әммә был үтә яуаплы эште кемдер башҡарырға тейеш. Таяҡтың ауыр башы иң элгәре етәксегә төшә. Бөтөнөһөнә лә ярап булмай, эш күрһәтһәң, тәнҡит тә аҙыраҡ буласаҡ. Тәнҡит булһын, әммә конструктив булһын: тәҡдим ит, теге йәки был проблеманы хәл итеү буйынса ярҙамсыларҙы йәлеп ит.

Ҙурҙан башлап булмаһа, бәләкәйенә тотоноп була. Бәләкәй етештереү предприятиеларына иҫәп тоттоҡ. Һөт кухняһы астыҡ, асфальт-бетон заводы эшләй башланы, йыл аҙағына 5 миллионлыҡ һалым килеме алынды. Юлдарға асфальт һалыуҙы байтаҡҡа арттыра алдыҡ. Бөтөнөһө лә бер хакимиәт башлығынан тормай, урынбаҫарҙар, бүлек начальниктары менән даими кәңәш ҡороп эшләйбеҙ.

**Беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар идара итеү өлкәһендә эшләргә ашҡынып бармай, башҡарма власть органдарында улар икенсе, өсөнсө пландағы вазифаларҙы биләү менән сикләнә. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Һеҙгә алдараҡ әйткәйнем, йәшерәк сағымда тиҙерәк кейәүгә сығыу хаҡында уйландым, тип. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тәбиғи бурысы - үҙ нәҫелеңде ҡалдырыу. Тормошҡа сыҡҡас, уларҙың функциялары бермә-бер күбәйә - ул ир ҡатыны, әсәй, ғаилә усағын ҡороусы, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер бер өлкәлә эшләп тә йөрөй. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙар иң юғары етәксе органдарҙа етәксе булһа, ирҙәрҙән кәм баһаланмаҫ ине. Әммә етәксе карьераһын уңышлы башҡарыр өсөн ҡатын кешегә ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас булған күп нәмәнән ваз кисергә тура килә. Был барыбыҙға ла билдәле бит. Бына әле минең ғаиләм Учалыла тороп ҡалды. Һирәгерәк булһа ла, ҡайтып йөрөргә тура килә. Ә Үрге Ҡыйғынан Учалыға Миәс аша ҡайтып йөрөп була, шулай яҡыная ике район араһы.

Мин үҙем карьера эшләйем тип, артыҡ ашҡынып торманым. Тәҡдим иттеләр, ризалаштым. Үҙемде һынап ҡарарға теләнем. Бары шул ғына...

**Беҙҙең республикала ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәү башлап ике кеше - һеҙ һәм Гүзәл Насырова район хакимәте башлығы вазифаһына һайландығыҙ. Быны үҙенә күрә бер социаль эксперимент итеп ҡарарға буламы?**

- Бәлки, шулайҙыр. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың башҡарма власть органдарында ла етәксе булараҡ ирҙәрҙән ҡалышырлыҡ түгел икәнен тағы ла бер ҡат раҫлау итеп ҡарап була быны. Ризалашһағыҙ, бер яңы фекерем менән бүлешер инем. Беҙҙең оло Рәсәй иле менән ирҙәрсә идара итеүҙән ҡатын-ҡыҙ аңы һәм хисе аша башҡарыла торған идаралыҡ королошона күсеү ваҡыты еткәндер. Рәсәй эстән өр-яңынан төҙөкләндереүгә мохтаж. Бына, әйтәйек, ирҙәр өй һала, уға ни талап ителә, барыһын да эшләй, ҡора. Әммә өйгә тик ҡатын-ҡыҙ ҡарашы, ҡатын-ҡыҙ ҡулы ғына эске йәм бирә ала, ул ғына үҙ өйөн эстән зауыҡлы итеп биҙәй һәм билдәле бер тәртиптә тота.

Донъя ҡорғанда ир ҡулы, ир көсө, ир ихтыяры тәүге планда, ул беренсе төҙөүсе, эшкәртеүсе, сиҙәм аҡтарыусы. Рәсәй иле бар, тормошҡа кәрәкле барса нәмә лә бар, тик уны төҙөкләндереү өсөн, матурайтыу өсөн ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас башланғыстарға юл асыу, көс урынына изгелек ҡылыу алымына күсеү фарыз.

Матурлыҡҡа һыуһағанбыҙ, тирә-яҡ мөхитте сүп-сарҙан, бысраҡтан таҙартып, сәскәләр үҫтереп була. Тормошобоҙҙо ла рухи яҡтан шулай ҡора алыр инек, бында ҡатын-ҡыҙ ҡарашы, аңы һәм хисе беренсе планға сыға. Философтар ҙа: "Тирә-яҡ мөхитте төҙөкләндереп, матурлап, кеше үҙ тәбиғәтен дә яҡшы яҡҡа үҙгәртә бара", - тип әйткән бит. Маркстың яҙғаны ла дөрөҫ: "Йәшәйеш аңды билдәләй".

Беҙ Ҡыйғы районында ошо йүнәлештә күп эштәр башҡарабыҙ. Рәхмәт республика етәкселегенә, махсус гранттар булдырылды, беҙ ошо йәһәттән 13 миллионлыҡ гранттарға лайыҡ булдыҡ.

***Ҡатын-ҡыҙҙарҙың башҡарма власть органдарында ла етәксе булараҡ ирҙәрҙән ҡалышырлыҡ түгел икәнен тағы ла бер ҡат раҫлау итеп ҡарап була быны. Ризалашһағыҙ, бер яңы фекерем менән бүлешер инем. Беҙҙең оло Рәсәй иле менән ирҙәрсә идара итеүҙән ҡатын-ҡыҙ аңы һәм хисе аша башҡарыла торған идаралыҡ королошона күсеү ваҡыты еткәндер. Рәсәй эстән өр-яңынан төҙөкләндереүгә мохтаж. Бына, әйтәйек, ирҙәр өй һала, уға ни талап ителә, барыһын да эшләй, ҡора. Әммә өйгә тик ҡатын-ҡыҙ ҡарашы, ҡатын-ҡыҙ ҡулы ғына эске йәм бирә ала, ул ғына үҙ өйөн эстән зауыҡлы итеп биҙәй һәм билдәле бер тәртиптә тота.***

**Совет хужалыҡ итеү системаһында нык үҫеш алған иҡтисади берләшмәләрҙе, шул уҡ кооперативтарҙы тергеҙһәк, алға китешкә, иҡтисади үҫешкә стимул булыр ине.**

- Эйе, беҙ ул турала ла уйлайбыҙ. Хәҙерге заман иҡтисадында, образлы итеп әйткәндә, бер кеше яугир түгел. Мәҫәлән, ниндәйҙер эшҡыуар ял итеү базаһын ҡорорға проект эшләне, ти. Ул был эшкә инвесторҙарҙы, финансистарҙы, иҡтисадсыларҙы, төҙөүселәрҙе йәлеп итә алһа, маҡсатына тиҙерәк өлгәшә ала. Артабан урындағы халыҡ килешеүҙәр нигеҙендә ауыл хужалығы продукцияһы менән тәьмин итә ала. Ошо рәүешле халыҡты берләштерә алыу хаҡында уйларға ваҡыт беҙгә. Ҡыйғы фермерҙары үҙҙәре лә бер-береһен яҡшы белә, кәрәк булғанда ярҙам итешә. Хәҙер ауылда ла бик яҡшы йәшәп була, икешәр ҡатлы, бар уңайлыҡтар булған йорттарҙа йәшәгән йәштәр арта бара.

**Районда һеҙҙең башланғыс менән балаларҙа һәм йәштәрҙә ватансылыҡ тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә икән…**

- Эйе, үҙ илендең патриоты булыу - беҙҙең ҡаныбыҙҙа. Әммә һәр бер йәш быуын менән ошо юҫыҡта тәрбиә эштәрен әүҙемләштереү зарур. Мәктәптәр, мәҙәниәт йорттары, китапханалар байтаҡ эш алып бара. Беҙҙең биләмәлә "Маяҡ" балалар лагеры бар, уны төҙөкләндергәндән һуң беҙҙә Әлкәләге "Патриот" лагерының филиалы асыласаҡ. Ул эшләй башлаһа, йәш ватансылар тәрбиәләү өсөн яңы мөмкинлектәр асыласаҡ.

**Һеҙ, Зөһрә Мәүлитбай ҡыҙы, райондан Махсус хәрби операция зонаһына 4 тапҡыр гуманитар конвой менән барғанһығыҙ. Ошо хаҡта һөйләп китһәгеҙ ине.**

- Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугирҙарыбыҙға райондан барыһы 10-дан ашыу гуманитар ярҙам ебәрҙек. Ошо хәлдәр район халҡын бергә туплаһы, тиһәк тә яңылыш булмаҫ. Ҡатын-ҡыҙҙар маскировкалау селтәрҙәрен үрә, әбейҙәр бирсәткә, ойоҡ бәйләй, кемдер банкаларға быҡтырылған ит һалып, консервалар эшләй, кемдер аҡса йыйып, төрлө көндәлек кәрәк-яраҡ нәмәләрҙе һатып ала һ.б. Районыбыҙҙа 17 мең кеше йәшәй, һәм үҙебеҙҙең районды 100 мең кеше йәшәгән икенсе бер төбәк менән сағыштырһам, мине ғорурлыҡ тойғоһо биләп ала. Һәр бер конвойға 10-шар йөк машинаһын тултырып ебәрәбеҙ. Күсереп йөрөтөп була торған мунсалар, бассейндар алып барҙыҡ. Улар унда бик кәрәк. Бындай хәүефле мәлдә берҙәмлек талап ителә.

Мин бында бер образлы сағыштырыу килтерһәм, урынлы булыр. Бер өй янып киткәйне. Мин янғын урынына барып еткәндә, янғын һүндереү машинаһы эшкә тотонғайны. Әммә кешеләр биҙрәләп һыу ташып һибеүҙән туҡтаманы. Шул уҡ ваҡытта йәштәрҙең бер төркөмө, янғынды телефонға төшөрөп, интернет селтәренә ебәреп, "хайп" алды. Ә шул янғын сыҡҡан өйҙән йыраҡыраҡ йәшәгәндәре, бер ни булмағандай, ҡәҙимге эштәре менән булыуын дауам итте: йәнәһе, янһа ни, беҙҙеке янмай бит!

МХО-ны алһаҡ, беҙгә битараф булыу һис килешмәй. Унда беҙҙең ир-егеттәребеҙ ут эсендә йөрөй. Беҙҙең бурыс - ошо операцияның мөмкин тиклем тиҙерәк тамамланыуына булышлыҡ итеү. Бер кем дә быларҙы маҡталыр өсөн, йә иһә башҡа бер шәхси мотив менән эшләмәй. Һәр кем аңлай: кемгә хәүеф янай, уларға ярҙам итеү сауаплы. Мин дүртенсе тапҡыр барғанымда отпускыла инем, әммә бармай ҡала алманым: ир-егеттәребеҙ беҙҙе һәр саҡ көтөп ала унда. Һүҙемде тамамлап, былай тип әйтер инем: Хоҙай Тәғәлә барыбыҙға ла түҙемлек бирһен!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фәндә һәм йәмғиәттә гендер тигеҙһеҙлеге хаҡында төрлө фекерҙәр, бер-береһенә ҡаршы килгән ҡараштар бар. Был иң элгәре ҡатын-ҡыҙҙарҙың власть органдарында бик тә аҙ булыуы менән бәйле. Ә бына тыуған Башҡортостаныбыҙҙа үҙенсәлекле социаль эксперимент башланып тора, тиһәк яңылышмабыҙ. Ике районды - Ҡыйғы һәм Иглин районларын тәү башлап ҡатын-ҡыҙҙар вәкилдәре - Зөһрә Гордиенко һәм Гүзәл Насырова етәкләй. Улар иңенә ололарҙан-оло яуаплылыҡ йөкмәтелгән: гүзәл заттарҙың да идара итеү өлкәһендә ирҙәрҙән ҡайтышыраҡ түгел, ә һөҙөмтәлерәк эшләй алыуын раҫлай алыу. Уларға ышанабыҙ һәм ихлас күңелдән: "Уңыштар юлдаш булһын!" - тибеҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*АҠЫЛ*

# ЮЛЫҒЫҘҘА ҺАБАҠ БИРЕҮСЕЛӘР

**Бер ҡарт уҡытыусы үҙенең шәкерттәре алдында тормошта алған һабаҡтары тураһында һөйләй:** "Минең бер остазым эт булды. Мин бик нык сарсап, йылға янына килгәндә унда эт тә бар ине. Ул да һыу эсергә теләне, әммә йылғала үҙенең шәүләһен күреп, уны икенсе бер эт тип уйлап, ситкә һикерҙе лә сабып китте. Ләкин сарсауы шул тиклем көслө ине, кире боролоп килеп, бер нигә ҡарамай, һыуға һикерҙе. Бәй, баяғы шәүлә үҙенеке булып сыҡты бит! **Мин беләм, был миңә Хоҙайҙан килгән аҡыл ине: ҡасан да булһа үҙеңдең ҡурҡыуыңды еңеп, боҙло һыуға ташланырға кәрәк.**

Минең тағы бер остазым бала булды. Мин ҡалаға ингәндә мәсеткә китеп барған ул бала ҡулына янған шәм тотоп килә ине. Мин малайҙы шаяртырға теләп, унан һорай ҡуйҙым:

- Ә һинең йөрәгеңдә шәм бармы?
- Эйе, бар.
- Шәмдең янған сағы ла, һүнгән сағы ла була. Ул уттың ҡайһы сығанаҡтан икәнен әйтә алаһыңмы?

Малай йылмайҙы, шәмде өрөп һүндерҙе лә, шулай тине:

- Хәҙер һин күрәһең - ут китте. Ул ҡайҙа китте? Ошо һорауға яуап бирегеҙ.

**Малайҙың яуабына аптырауымдың сиге булманы. Шул мәлдә мин үҙемдең ахмаҡлығымды юғалттым. Ошо мәлдә мин үҙемдең бар кәрәкмәгән белемемде ситкә ырғыттым…"**

✓ ***...ҡунаҡтар менән бергә кермәҫ өсөн Әсләм дә аҙымдарын әкренәйтһә лә, әллә килешелгән ваҡыттан алда килеп ҡоҙаларын уңайһыҙ хәлгә ҡуймаҫ өсөн, әллә башҡа сәбәптән былар аттарын бөтөнләй яйлатты.***



Әсләм ҡулын күлдәгенең түш кесәһенә тыҡты: салбар кесәһенән сығарып биргән аҡсаһы, ысынлап та, шунда ята ине. Ышанмай сығарып иҫәпләне - теп-теүәл! Торғаны бер фокус! Аҡсаһын нисек уға һиҙҙермәй генә һалыуына бер аптыраһа, икенсе аптырауы егеттең уның "эшен" төплө белеүендә ине. Хатта тегеләрҙе белә! Ҡайҙан шул тиклем мәғлүмәт эскесе ауыл егетендә?

Юҡ, бер сыҡҡас, барыбер ҙә барып, етеп ҡайтырға кәрәк. Асыҡларға, аңларға, тегеләргә аңлатырға кәрәк. Кем белә, бәлки, алыҫтан килгән, һуңлауында уның гәйебе юҡ таһа, ысынлап та, повестканы алмағандыр, ярҙам итәйек кешегә, тип йәһәт кенә йыйылып, судын да ҡабатлап үткәреп ҡуйырҙар. Эйе, барған барған булыр, гәйеп тапһалар, артабан нисек, ҡайһылайыраҡ эшләргә икәнен төшөнөп ҡайтыр. Справка-фәлән, башҡа документ йыйырға ла тура килер әле.

Ошо уйҙарынан һуң Әсләмгә нисектер еңел булып китте, зиһене яҡтырып күк ҡабағы асылғандай булды. Эйе, үҙенең гәйебе юҡ икәнен иҫбатлауы ауыр буласаҡ, әммә ана шул гәйепһеҙлеген күрһәтеү өсөн көрәшергә кәрәк. Егет әйткәнсә, яҡшы адвокат табырға. Кешеһе бар Әсләмдең, университеттың юридик факультетын тамамлаған һәм байтаҡ йылдар дәүләт органдарында эшләп, тик етәксеһе менән һүҙгә килешеп хеҙмәтенән киткән, бына бер нисә йыл үҙенең шәхси эшен аҫҡан Рим тигән иптәше бар. Алған процесстарының барыһын да еңеп сыға, тигән даны таралған. Иң мөһиме, гәҙел кеше, хаҡлыҡ тойғоһо көслө. Шуға үтенер. Моғайын, баш тартмаҫ.

Арып-талып, әләгә-йығыла байтаҡ атлағас ҡалын урман һирәгәйә, тәпәшләнә төштө, ул ваҡ ағастарға, һирәк ҡыуаҡлыҡтарға, бейек үләнгә алышынды. Әсләм еңел тын алды, кәйефе күтәрелде. Бер аҙ барғайны ауыл да шәйләнде. Ошомо икән инде мин киләһе ер, тип ни ҡыуанырға, ни аптырырға белмәй аҙымдарын әкренәйткәйне, артта ниндәйҙер дөңгөрҙәк тауыштар ҡолағына салынды. Көлөшкән дә һымаҡтар, ҡысҡырып һөйләшәләр ҙә, һайт-һайтлап сыбыртҡы шартлатып ат та ҡыуалар төслө. Хатта мылтыҡтан да атып ебәрҙеләр. Дошманын эҙәрлекләгән кавалерия килә, тиерһең. Тауыштар ауыл яғынан түгел, артта, урман эсендә яңырай. Улай тиһәң, урман юлы, беленер-беленмәҫ һуҡмаҡ, арба үтерлек түгел, тәгәрмәстәр һә тигәнсе ер өҫтөнә сығып ятҡан тамырға, төпһәгә килеп менәсәк, йығылған ағасҡа эләгәсәк. Теге көтөүсе ҡарт әйткән оло юлдан ғына килмәһәләр.

Әсләм туҡтаны ла урман яғына боролоп баҫты. Был "яу"ҙы үткәреп ебәрергә кәрәк, уларҙан алда ауылға килеү ярамаҫ. Һөйләшеүҙәренә ҡарағанда, күмәктәр - берәй байрамға йәки туйға китеп барыусылар, моғайын. Мылтыҡтан атыу - туй йолаһы.

Тауыш торған һайын асығыраҡ, яҡыныраҡ ишетелә барһа ла ат күренмәне лә күренмәне. Ҡабаланмайҙар, тип уйланы Әсләм, кәйефе ҡырылып. Уға йәһәтерәк барырға кәрәк, ә былар һис ашыҡмай. Көтә торғас ул ергә ултырҙы, тороп, егермеләгән метрлап алға китте, йәнә урман яғына ҡарап баҫты.

Ярты сәғәт кенә үткәндер йәнә, ниһайәт, урман ауыҙында тәпәш дуға, тәгәрмәстәре майланмағанлыҡтан шығырҙығы сыҡҡан ауыр арба һөйрәп башын аҫҡа ныҡ эйеп, тызырайып атлаған бейә күренде. Бер яҡ тәртәгә терәлеп килгән ҡолоно ла бар. Оҙон арбаның ике яғына дүртәр кеше ултырған, ятҡан, тубыкланған йәнә дүртме, бишме кеше, ә йәштәр, ошо ике рәт




араһына тығылған. Берсә үрләс, берсә түбәнләс тауҙар араһындағы юлда шунса халыҡты һөйрәп килһенсе әле меҫкен мал! Төшөп, арттан атлаһалар ни була. Атты йәлләү тигән нәмә юҡ икән. Етмәһә, береһе хайуандың арҡаһына ҡайыш сыбыртҡыһын төшөрөп-төшөрөп ала. Быныһы артынан икенсе арба ла күренде. Уныһына ла күбә бейеклек кеше тейәлгән. Тимәк, берәй төрлө байрам, ҡунаҡҡа китеп барыусылар.

Әсләм тапҡырына еткәс егеттәрҙең береһе:

- Эй, һин, беҙҙе ҡаршыларға сыҡҡан ҡоҙамы әллә? - тип һөрәнләне. Ҡыҙмаса. Йәйенке йөҙө ҡыҙарған, бөҙрә сәстәре туҙған, иҙеүе асыҡ.

- Ҡаршыларға килгән ҡоҙа шулай йәлҡош буламы ни? Улар тәтәй кеүек кейенә, ҡулына араҡы менән закуска була, - тип хихылданы икенсеһе. Әсләмдең меҫкен ҡиәфәтенә ишаралай инде, йәнәһе.

- Долой ундай ҡоҙа! Ундай ҡоҙа беҙгә кәрәкмәй! Беҙгә араҡылы ҡоҙа кәрәк.

- Ауылға байтаҡ әле, бәлки, ҡаршы алырҙар ҙа. Йола буйынса - тейештәр. Мейе һелкенеп бөттө, турайтырға кәрәк, ысынлап та.

- Әйҙә ултыр, яҡташ, ҡыҙ алырға китеп барабыҙ, һиңә лә берәй бетле баш табырбыҙ, ҡоҙасалар була торған, - тине иң тәүҙә өндәшкән егет.

- Үҙебеҙҙән артһа, - тип ауыҙ йырҙы икенсеһе.

- Ҡайҙан киләһең? Был ауылдан түгелме?

- Юҡ, - тине Әсләм.

- Шулай булғас, әйҙә, беҙҙеке бул. Һинең кем икәнеңде улар ҡайҙан белһен? Ҡыҙыҡ итәйек. Беҙҙеке тиербеҙ ҙә ҡуйырбыҙ. Туй йолаһы шулай - осраған һәр кем туй ризығынан ауыҙ итә ала.

- Рәхмәт, үҙегеҙ генә, мин бөтән йомош менән китеп барам.

- Улай тимә, әйҙә эйәр, кәзәһенән бигерәк мәҙәге. Һине генә туйындырыр ризыҡтары барҙыр әле ҡоҙаларҙың.

Аттар үтеп китте. Әсләм еңел тын алды, хатта ҡыуанды, сөнки районға судҡа китеп бараһың икән, тип һораманылар, тимәк, былар әлегә белмәй. Был тирәнән түгел, йыраҡтан киләләрҙер. Яҡын-тирә ауылдан булһа, моғайын, белерҙәр, белгәс, һорарҙар ине. Ана ниндәй ҡыйыуҙар, телдәрҙәр бит.

Әммә тиҙҙән ваҡиғалар көтөлмәгән боролош алды. Арбалар ауылға яҡынайған һайын ҡунаҡтар менән бергә кермәҫ өсөн Әсләм дә аҙымдарын әкренәйтһә лә, әллә килешелгән ваҡыттан алда килеп ҡоҙаларын уңайһыҙ хәлгә ҡуймаҫ өсөн, әллә башҡа сәбәптән былар аттарын бөтөнләй яйлатты. Һәм оҙаҡламай шулай килеп сыҡты - ул ауыл ҡапҡаһынан тегеләр менән бергәрәк барҙы ла керҙе. Ситкә ялтанырға самалаһа ла, ҡаршы алыусы йәш ҡатындарҙың береһе уның терһәгенән эләктереп алды һәм кеше араһына килтереп тә ҡушты. Әсләм, мин ҡоҙағыҙ түгел, мин икенсе, юлсы, тип аңлатып ҡарағайны ла, теге ҡатын ишетергә лә теләмәне, шаярма, ҡоҙа, шуҡ нәҫел икәнегеҙҙе беләбеҙ, тип ауыҙына рюмка килтереп тә терәне. Һәм эсемлекте башын тегеләй ҙә былай борғолаған Әсләмдең ауыҙына ҡойоп та ебәрҙе. Шунан икенсе рюмканы ла тултырҙы.

Ҡаршы алыусылар байтаҡ ваҡыт шулай ҡоҙаларын ауыл ҡапҡаһы төбөндә һыйланы. Ике арба халыҡты ҡаршы алған ике йәш ҡатын менән ике егеткә башҡа хужалар килеп ҡушылды. Таҡмаҡ әйтешеүҙәр, йыр, бейеү башланды. Һәм әллә күпме кешенән хасил ҙур төркөм, гармун моңо аҫтында ике егет әйҙәләүенә буйһоноп, ауыл эсенә атланы. Әсләм улар араһынан һис һурылып тороп ҡала алманы - һаман ҡоҙа ла ҡоҙа тип уны һис ебәрмәнеләр. Аҫ ҡарынына төшкән бер нисә рюмка араҡы уның башын томалап, аяҡ быуындарын бәлтерәтте.

Ихатаға кереү менән танышыу-күрешеүҙәр, ҡосаҡлашыуҙар башланды, килгәндәрҙе батмус йөрәтеп эсереүҙәр китте. Арбаларҙан хужаларға әллә күпме төйөнсөктәр, сумка, сумаҙандар тапшырылды. Әсләмдең арҡаһында - буш рюкзак. Уның да төҫө уңып бөткән. Ул ҡапҡа төбөндә лә, ихатаға кергәс тә хужаларҙан күҙ яҙҙыра алманы - бер нисә аҙым ситкә тайшаныуы була, береһе килә һалып етеп, елтерәтеп дөйөм төркөмгә килтереп ҡушып та ҡуя. Әсләмгә ҡай саҡ, башҡа ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарын улай уҡ ҡарамайҙар, бер уға иғтибарҙары ҙур һымаҡ тойола башлай һәм ошо тойғонан уңайһыҙлана. Өсөнсөгә ҡасырға ынтылыуҙан һуң уны гел эҙәрлекләгән йәш ҡатын, исеме Тәслимә икән, оло ғына йәштәрҙәге ир кешегә килтереп тотторҙо ла, абай бул, Рамазан ағай, был йәш ҡоҙа ниңәлер гел тайырға самалай, мин ҡараным, башҡа мәшәҡәтем бар, хәҙер һин яуаплы, тип тегенә терәтте. Тәслимә менән шаярышып һөйләшергә, сираттағы рюмканы эсмәҫкә лә мөмкин ине әле, был етди ҡоҙа менән мөнәсәбәттәр нык ауырлашты - бойороҡто хәрби кеше һымаҡ ифрат еренә еткереп үтәне - ҡултыҡлап алып өйгә инеп өҫтәл артына ултырышҡас та эргәһенә ултыртты.

Өй ҙур, иркен, йыуан ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған. Бер нисә бүлмәле. Бер яғында төкәтмәһе лә бар шикелле. Әсләм өсөн был ҡыҙыҡ яңылыҡ ине - улар яғында йорттарҙы төкәтмәй генә эшләйҙәр. Йыһаздары ла байтаҡ. Улар зауыҡ менән алынған һәм урынлаштырылған. Ҡыҫҡаһы, хужаларҙың ҡалын йәшәгәне күренеп тора. Йәштәр йүгерешә, ҡунаҡтар ултырыша, бындай осраҡта хас булғанса, тегеһен-быныһын ташыйҙар, ултырталар, өҫтәлде ҡарайҙар, тикшерәләр, исемләп-исемләп килгән ҡунаҡтарҙы барлайҙар.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бер-береһе менән танышҡан-танышҡан арала күтәрелгән тост-рюмкаларҙың бер нисәһенән һуң Әсләм тамам иҫерҙе. Сөнки тамағы ас ине, арығайны, эсемлек миҡдары ла байтаҡ булды. Ә эсеп ултырыуының сәбәбе - танышырғанда уға ла сират етеп хужаларға үҙен кем тип әйтерҙәр тигәнде ишетмәмешкә һалышыу өсөн ине. Башты иҫергә һалып өндәшмәй йәки берәй төрлө шаяртырмын да ҡуйырмын, тип ниәтләнде. Табын артындағыларҙың һәр ҡайһыһының баҫып оҙон өҫтәл башында ултырған кейәү менән кәләште ҡотлағандарын, бүләк тапшырғандарын да иҫләр-иҫләмәҫ хәлгә етте. Алдындағы тәрилкәһенә уның өсөн "яуаплы" ирҙең нимәләр һалғанын һәм ашарға ҡыстағанын да ярты-йорто ғына ишетә. Килгән ҡоҙаларға үҙенең бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡлығын, улар араһына осраҡлы ғына килеп эләгеүен, ысынында иһә район үҙәгенә ("ниндәй район үҙәге, был тирәлә ундай район үҙәге юҡсы"), судҡа китеп барыуын ("ниндәй суд, ҡуй әле, ҡоҙа, шаяртма") һөйләргә тырыша. Башлай, туҡтай, онота, ҡабаттан башлай, әммә "яуаплы" ҡоҙаһы уның буталсыҡ хәбәрен ысынға алмай. "Ҡуй, Әсләм ҡоҙа, ниндәй суд ти ул, беҙ бит туйҙа ултырабыҙ, һин яңылышаһың, әйҙә йәштәр бәхете өсөн берҙе (хәҙер нисә бер инде!) күтәрәйек", - тип рюмкаһын сәкәштереүен белә. Әсләмде эсерә (ҡоҙаларҙы мотлаҡ иҫертергә кәрәк, тигән бурыс ҡуйылыуын ул ҡайҙан белһен?), үҙе эсмәй, рюмкаһына иренен генә терәй ҙә кире ултырта. Әсләм үҙенең хәбәренә күршеһенең ышанмауына аптырай, асыуланып та ала, шунан йәнә һөйләргә тотона. "Яуаплы" иптәш ышанмағас, икенсе яҡ күршеһенә һөйләргә маташа, тик уныһы Әсләмде бөтөнләй тыңламай, тыңларға ла теләмәй, бисәһенә боролған да уны һыйлау менән мәшғүл. Ҡатынының ниңә шул тиклем күп ашай ул, етәр, бүтән һалма, һин мине тыңла, тип биленә төртә. Күрше, минең бит бер ниндәй гәйебем юҡ, улар миңә нахаҡ бәлә яға, тип аҡланырға тотона, шунан батырайып китеп тегеләрҙе әрләй башлай, яҡшы адвокат табам, Рим дуҫым бар, шуға барам, фашлаясамын, тип ант итә...

Тамағы кибеп, башы сатнап уянды Әсләм. Уянғас та ҡайҙа ятҡанлығын аңламай бер булды. Иҙәндә. Аҫтына матрас ташлағандар, башы аҫтына бишмәтме, фуфайкамы һалғандар. Ҡаҡ һикегә йәки өҫтәл аҫтына тыҡһалар ҙа килешер ине. Бөтөнләй сит-ят кешеләр өйөндә йоҡлап ята. Ниндәй оят! Иҙән ярығына төшөү мөмкинлеге булһа, валлаһи, төшөр ҙә китер ине. Эргәһендә "ҡоҙалары" теҙелешкән. Береһе яман хырылдай, Әсләм шуның тауышына уянғандыр ҙа, икенсеһе йоҡо аралаш нимәләр һөйләнә, өсөнсөһө әллә өнөндә, әллә төшөндә ҡатынын таптыра. Тимәк, уларҙы ҡатындарынан айырып Әсләм янына теҙгәндәр. Судҡа китеп барған кеше әллә кемдәргә ҡушылып керҙе лә аҙғын эскесе һымаҡ иҫереп, иҙәндә йоҡлап ята! Етмәһә, үҙенең ҡайҙа китеп барыуы тураһында һөйләп ултырҙы. Уй, ҡайһылай оят! Әсәһе йәки апаһы белеп ҡалһа? Ғүмерендә бындай хәлгә төшкәне юҡ ине. Торорға ла береһе лә күрмәҫ элек сығып тайырға! "Ҡоҙалар" ҙа килешкән - юлдарында тап булған бөтөнләй сит кешене үҙҙәре менән ал да кит, имеш. Беҙҙеке түгел ул иптәш, ҡоҙағыҙ түгел, тип әйтһәләр ни була? Әллә берәйһе менән бутанылармы, әллә берәй төрлө хәйлә, мәкер булдымы ҡылыҡтарында? Хужалар ҙа шәп: кемдең кем икәнен ҡоҙаларынан текемләп һорарға тейеш ине. Ә улар уны тыңларға ла теләмәй өҫтәл артына ултыртып ҡуйҙы.

**(Дауамы. Башы 46-сы һанда).**

*Төҙәтеү.*
*Гәзитебеҙҙә 46-сы һандан башлап баҫылған был "Ау" хикәйәһенең авторын Әмир Әминев тип уҡығыҙ.*
*Аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡты, авторҙан ғәфү үтенәбеҙ.*

ИНТЕРНЕТТАН



## МАНДАРИНМЫ? ГРЕЙПФРУТ!

■ Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының "Дауалау-реабилитация үҙәге" директоры Сергей Царенко фекеренсә, коронавирус пандемияһы медицина системаһындағы күп кенә проблемаларҙы асыҡлаһа ла, ул үҫеш өсөн этәргес тә булды. Вируслы сирҙәрҙе дауалауҙың яңы ысулдары асылды, кеше ҡул йыуыу кеүек ябай ғына ғәҙәттең күп ауырыуҙарҙан һаҡлауына ышанды. Шулай ҙа яңы ҡатмарлы пандемиялар булыу хәүефе юғалмай. Фәнни яҡтан шуныһы ла иҫбатланған: инфекцияларҙың кешенән-кешегә йоғоу юлы иң таралған ысул. Шуға ла киләсәктә тағы ла пандемия була ҡалһа, ул тағы ла респиратор буласаҡ. Медицина иһә профессиональ реаниматологтар, пульмонологтар әҙерләүҙе лә бурыс итеп алырға тейеш. Дауаханаларҙа персоналды һаҡлаусы саралар, респиратор техника запасы ла булырға тейеш, тигән фекерҙә ул.

■ Ҡыш - цитрус емештәре осоро. Уларҙың еҫе олораҡ быуында Яңы йыл байрамын хәтергә төшөрә. Декабрҙә кеше күберәк мандаринға өҫтөнлөк бирә икән. Белгестәр грейпфрутҡа ла иғтибар итергә саҡыра. Тап ул ҡышҡы рационды файҙалыраҡ итәсәк. "Сәләмәт туҡланыу" үҙәгенең директор урынбасары Алексей Кабанов билдәләүенсә, кешенең көндәлек туҡланыуы шәкәргә һәм майлы ризыҡтарға бай булһа ла, үҫемлектәр, омега кислоталарына ҡытлыҡ кисерә. Күберәк емешеләк ашау иһә кәнфит-печеньеларҙан баш тартыуға мөмкинлек бирә, был иһә сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһаясаҡ. Бынан тыш, грейпфрут ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә. Составындағы С витамины иммунитетты нығыта, ауырыуҙарҙан һаҡлай. Аҙнаһына бер-ике тапҡыр грейпфрут ашағыҙ, ул витаминдарға айырыуса бай, ти табип.

■ Отоларинголог Владимир Зайцев билдәләүенсә, һыуыҡтар ваҡытында тиренең туңыуынан һаҡланырға кәрәк. Тау саңғыһы менән шөғөлләнеүселәргә тәғәйенләнгән кейем иң ҡулайы. Шулай уҡ башлыҡ һәм ҡулға бейәләйҙәр ҙә мотлаҡ. Битте нисек һаҡларға тигән һорауға уның фекере шундай: маска йәки шарф менән ҡапланыу өшөүҙән артыҡ һаҡламаясаҡ. Сөнки кеше әле генә сығарған йылы тынын кире һуларға мәжбүр, был инфекция эләгеүгә лә килтерә. Шуға ла урамға сығыр алдынан маршрутты билдәләргә, мөмкин тиклем йәмәғәт транспортында хәрәкәт итергә кәрәк.

■ Күптәр "коро күҙ" синдромы менән яфалана. Был сир ваҡытында күҙҙәр әсетә, яҡтыға ҡарап булмай, тиҙ арый. Токио университетының медицина мәктәбе тикшеренеүселәре уны ҡаһүә эрҙамында дауаларға тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, кофеин тәкәрәк һәм ашҡаҙан һуттары бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул шулай уҡ күҙ йәше бизе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Был мәғлүмәтте Япония ғалимдары 78 оло кешелә тикшереп ҡараған. Уларҙың береһе лә "коро күҙ" синдромы, глаукома һәм башҡа күҙ ауырыуҙары менән ауырымаған. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, кофеин был ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

СЕРЛЕ ДОНЪЯ

# ТАМҒАНЫҢ БАҺАҺЫ ЮҒАРЫ

## Әммә ни өсөн юғары?

**Мәҡәләнең исемен уҡығас, ҡайһы берәүҙәр, тамға тураһында яҙмаһа ла була инде, был турала беҙ былай ҙа беләбеҙ, тип әйтеп ҡуйыр. Әлбиттә, был фекер менән килешмәйенсә булмай. Күптәр тамға тураһында белә. Уға хөрмәт менән ҡарай. Сит яҡтарҙан килгән ҡунаҡтарға ҡарағай олонона һуғылған тамғаны күрһәтергә онотмай. Ә һөйләй башлаһа... күптәр яңылыш һөйләй ҙә ҡуя.**

Был хәл минең өсөн көтөлмәгән асыш булды. Ярай, тамғаға ҡағылышлы мәсьәләне бөгөнгө мәҡәләлә асыҡларға тырышырбыҙ. Ә хәҙер "күптәр яңылыш һөйләй ҙә ҡуя" тигәнемде кирәм миҫалында тикшереп ҡарайыҡ әле. Уның менән танышҡандан һуң Бөрйән ҡунағы, моғайын, беҙгә ошондай һорау бирер ине.

- Кирәмдең ниндәй төрҙәре була?

Күптәр был һорауға дөрөҫ яуап бирер.

- Йүкә-кирәм һәм ҡайыш-кирәм була.

Икенсе һорау ҙа артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫ кеүек.

- Ә ни өсөн борон күберәген йүкә-кирәм менән ҡулланғандар?

Күптәр сәбәбен ошолайыраҡ аңлатыр ине.

- Борон ҡайыш ҡиммәт булған. Күптәрҙең уны һатып алырға хәленән килмәгән. Шуға ҡайыш-кирәм хәлле солоҡсола ғына булған. Ә йүкәне һатып алырға кәрәкмәй. Уны урманға барып бушлай һыҙырып алып ҡайтырға була. Шуға борон күптәр йүкәнән үрелгән кирәм ҡулланған.

Тәү ҡарамаҡҡа, яуап дөрөҫ һымаҡ. Ә ысынында иһә ул дөрөҫ түгел. Быны аңлар өсөн ошо һорауҙарға яуап бирер кәрәк. Ни өсөн ҡайыш ҡиммәт булған? Уның хаҡы ниндәй мәғлүмәттәргә таянып әйтелә? Ә, бәлки, ҡайыш арзан булғандыр? Бәлки, уны күптәрҙең һатып алырға хәленән килгәндер. Бына ошондай һорауҙарҙа асыҡлау һөҙөмтәһендә мин үҙҙә әйтелгән яуапты дөрөҫ түгел тип иҫәпләйем. Әлбиттә, был минең шәхси фекер. Ә шулай ҙа кирәм тураһында киләһе мәҡәләлә һөйләшербеҙ әле.

Хәҙер тамға тураһындағы һөйләшеүгә күсәйек. Нимә ул тамға? Тәүҙә ошо һорауҙы асыҡлайыҡ. Тәү сиратта, тамға - ул билдә. Был билдә, был - минеке, тигәнде аңлата. Әйтәйек, борон һәр ҡәбилә үҙ ерҙәрен тамға менән билдәләгән. Ул ике ҡәбилә ерҙәре сигендә үҫеп ултырған ниндәйҙер билдәле (янғыҙ, бейек, йыуан, ялбыр һәм башҡа) ағасҡа, осло булып сығып торған ҡая ташына, үҙҙәре өйгән таш өйөмөнә, үҙҙәре ҡаҙған тәрән соҡорға һәм башҡаһына һуғылған. Бындай билдәләү беҙҙең көндәргә тиклем еткән осраҡтар ҙа бар. Бына, әйтәйек, бөгөн беҙҙең районда Бөрйән һәм ҡыпсаҡ ерҙәрен билдәләгән тамғалар һаман һаҡлана, тип һөйләй ҡайһы берәүҙәр. Насип итһә, барып күрелер әле. Тамға тураһында мәғлүмәт ҡыҫҡаса ошолай.

Хәҙер төп хата фекер тураһында һөйләшеп китәйек.



Күптәребеҙ ошолай һөйләй - борон тамғаны уҡый-яҙа белмәгән кеше ҡулланған. Бының хата фекер икәнен иҫбатлауы ауыр түгел. Әйтәйек, берәй уҡымышлы кеше балыҡсы икән, тей. Уның кәмәһе лә бар икән, тей. Ул ишкәктәргә һәм кәмәгә нимә һуға? Тап шулай, ҡултамғаһын түгел, ә үҙ тамғаһын һуға. Борон тамға һәр кемгә - һунарсыға, балыҡсыға, тире эшкәртеүсегә, солоҡсоға, игенсегә, күмер яндырыусыға, балта оҫтаһына һәм башҡаһына кәрәк булған. Ғаилә башлығы үҙ тамғаһын бар нәмәгә һуҡҡан - көрәгенә, сүкешенә, урағына, һабанына, батманына, бураһына, балтаһына, мылтығына, атының янбашына, үгеҙҙең ҡулбашына, арбаһына, дуғаһына һәм башҡаһына.

Был теҙмәлә солоҡ ағасы ниндәйҙер айырым урын алып тормай. Ул бары ошо иҫәп эсенә генә инә. Ә ҡайһы берәүҙәр, тамға - ул солоҡсоноң милек билгеһе, тип хата һөйләп ҡуя. Был осраҡта, тамға - ул ғаилә милке билгеһе, тип аңлатыу дөрөҫлөккә тап килә. Алдан әйткәнемсә, тамға - был минеке, тигән билдә. Шуға ул элек урлашыуға ҡаршы төп кәртә булып торған. Сөнки тамғаны бер нисек тә юҡҡа сығарып булмай. Әйтәйек, берәүҙең мылтығын сәлдерҙең, тей. Әммә уны минеке тип иҫбатлап булмай. Сөнки уның һабында торған тамғаны соҡор ҡалдырмай ғына юнып ташлау мөмкин түгел.

Иң мөһиме, үҙ тамғаңды һуғып булмай. Сөнки борон сит тамғаны боҙоп, үҙ тамғаңды һуҡҡан өсөн ҡаты яза ҡаралған. Әйтәйек, кемдер берәү берәй балыҡсының кәмәһен үҙенә әйтмәй генә "ваҡытлыса" алып торҙо (дөрөҫөрәге, урланы) икән, тей. Әлбиттә, күпмелер ваҡыттан һуң был ҡырын эш асыҡлана. Хәҙер был уғры язаһын алырға тейеш. Уны билдәләү өсөн тәү сиратта тамғаны тикшерәләр. Тамға боҙолмаған. Ул кәмәлә һәм ишкәктәрҙә бар. Тимәк, был эш боҙоусы эште әле артыҡ боҙмаған. Уның тәҙәлеүенә өмөт бар. Әлбиттә, ул үҙ язаһын ала. Әммә ул артыҡ ҡаты булмай. Ә әгәр ул тамғаны боҙған булһа... Бында эш бөтөнләй икенсе төҫ ала. Ололар әйтеүенсә, заманында тамғаны боҙған өсөн дүрт ат йәки уларҙың хаҡын түләү язаһы ҡаралған.

Моғайын, тамға кешенең уҡый-яҙа белгәненә бәйле түгел икәнен уның солоҡ ағасында ғына булмауын аңлата алғанмындыр. Әммә ваҡыты менән төп хата ошондай көслө "дәлил" менән нығытыла.

- Борон уҡый-яҙа белмәгән кеше ҡултамға урынына тамға ҡуйған.

Һәм тағы бер көслө "дәлил" өҫтәлеп ҡуя.

- Тамға ҡуйылған рәсми ҡағыҙ юридик көскә эйә булған.

Әммә, минеңсә, был фекер дөрөҫлөккә тап килмәй. Бындай һығымтаны мин өйрәнеү-эҙләнеүҙәргә таянып әйтә алам. Улар миңә ошондай һығымта яһарға мөмкинлек бирә - борон рәсми ҡағыҙға уҡый-яҙа белгәне лә, уҡый-яҙа белмәгәне лә тамға ҡуйған. Сөнки ҡултамғаға ҡарағанда тамғаның баһаһы күпкә юғары. Ә нинә юғары? Был һорауға яуап юҡ (был турала һөйләшербеҙ әле). Минең өйрәнеү буйынса, рәсми ҡағыҙға ике тамға - ошо кешенең тамғаһы һәм уның атаһының тамғаһы, ҡуйыла. Атай тамғаһы был кеше кемдең улы икәнен күрһәтеп тора. Эш шунда, ҡайһы ваҡыт тамғала өҫтәмә һыҙыҡтар күбәйеп китә. Ваҡыты менән аралар араһында оҡшаш тамғалар барлыҡҡа килә башлай. Шуға атай тамғаһы кәрәк тә инде. Рәсми ҡағыҙҙа эш тамғалар ҡуйыу менән генә тамамланмай. Ул юридик көскә иңһен өсөн мотлаҡ ҡултамға кәрәк. Бында уҡыйяҙа белгәне үҙ ҡултамғаһын ҡуя. Ә уҡый-яҙа белмәгәне өсөн ауылдың уҡымышлы кешеһе - мөғәллим, үҙ ҡултамғаһын ҡуя. Бына ошо осраҡта ғына рәсми ҡағыҙ юридик көскә эйә була. Ми-

✔ *Ҡурҡыуығыҙҙы еңеп Тәҡдиргә ышанһағыҙ, көнәркәшлек инстинкты шунда уҡ юҡҡа сығыр. Әгәр көнәркәшегеҙ һеҙҙең идеяларығыҙҙы үҙенә аҡса эшләү өсөн ҡулланһа - тағы ла яҡшыраҡ, сөнки маятник мотлаҡ һеҙҙең яҡҡа ауышасаҡ.*



нең өйрәнеүҙәр ошондай һығымтаға килтерҙе.

Ә ни өсөн тамғаның баһаһы юғары? Был һорау әле асыҡланмаған. Ғалимдар өсөн ул һаман сер булып тора. Улар араһында тамғаның баһаһы юғары булыуында шик юҡ. Быны аңлау өсөн Ағиҙел буйына төшәйек тә ҡаяларға күҙ һалайыҡ. Бында ниндәй генә яҙыуҙар юҡ! Иҫ китмәле инде. Был яҙыуҙар араһында беренсе урында кеше исемдәре һәм исемшәрифтәрҙең баш хәрефтәре тора. Икенсе урында - ҡала-ауыл исемдәре. Өсөнсө урында - уҡ менән үтә атылған йөрәк, "мин бында булдым", "һине һис ҡасан онотмам", "беҙ тағы килербеҙ", "көт мине" тигән яҙыуҙар. Ғалимдар ошо яҙыуҙарҙы, былар замана кешеһе тамғаһы, тип аңлата. Кемдер быны менән ризалашмаҫ. Ундайҙар, был яҙыуҙар тамға түгел, тип әйтеп ҡуйыр. Шуға күрә беҙ уларҙы билдә тип атайыҡ. Быны менән күптәр риза булыр. Ғалимдар билдәләүенсә, бына ошо билдәләр ярҙамында кеше ошо ерҙә булғанлығын белгертергә тырыша. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, бөгөн кеше уҡымышлы. Әммә ҡая ташына ул үҙ ҡултамғаһын ҡуймай. Ул ниндәйҙер билдә һуға!

Ошо билдәләргә ҡағылышлы асыҡланмаған һорауҙар күп. Шуларҙың береһе - кешене бейек ҡаяға менергә һәм унда нимәләр яҙырға ниндәй көс алға этәрә икән? Бына ошо һорауға яуап юҡ. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, кеше үҙ яҙыуын мөмкин тиклем бейектә яҙырға тырыша. Ҡайһы бер яҙыуҙарға ҡарайһың да аптырап баш сайҡап ҡуяһың. Нисек унда менә алды икән... Ә ҡолап китһә... Тере ҡалыуы бит бик икеле. Асыҡ ҡаяла арҡан менән бәйләнеп тороп яҙып була, тип әйтеп ҡуйыр ҡайһы берәү. Әммә был аңлатмалар мәмерйә эсенә инеү менән юҡҡа сыға. Сөнки мәмерйә эсендә лә шул уҡ хәл. Уның эсендә ҡараңғы, таш стеналар еүеш, түшәм бейек. Һүрәт эшләү түгел, имен-аман сыҡһаң да шәп. Аптырамалы инде, мәмерйәнең эсе тулы һүрәт. Борон эшләгән һүрәттәр ҙә бар, замана кешеһе яҙған яҙыуҙар ҙа күп. Ярай, асыҡ ҡаяла торғанын күптәр уҡый ала. Ә мәмерйәлә яҙылғандарын кем күрер ҙә кем уҡыр. Әммә кеше барыбер яҙа!

Бына кешенең ошо билдәләрен ғалимдар аңлата алмай. Нишләп кеше нимәләр яҙам тип, үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, өҫкә табан үрмәләй? Ни өсөн ул өйҙә үк нимәләр яҙыр өсөн арҡан, буяу, бумала һәм башҡаһын алдан хәстәрләй башлай? Ошо урында беҙгә, кемдер нимәләр яҙған, тип аптырап ултырырға кәрәкмәй. Заманында беҙ үҙебеҙ ҙә бәке осо менән партаға йә эскәмйәгә нимәләр яҙып ҡуя торғайныҡ. Нимәгә яҙғанбыҙҙыр инде... Шуға күрә ғалимдар, бәлки, тәү осорҙа тамғаның шәхси милекселеккә ҡатнашы булмағандыр, тигән фекерҙе лә әйтеп ҡуя. Ҡыҫҡаһы, тамға ул тәү ҡарамаҡҡа ғына ябай. Бында асыҡ һорауҙар күп. Бәлки, был һорауҙарға йәш быуын өйрәнеүселәре яуап табыр. Тамға һуғыу ҡасандан бирле ҡулланыла? Уның төп тәғәйенеше нимәлә? Ул ни өсөн һаман һаҡлана? Уны ҡулланыу ҡасан юғалыр? Ҡыҫҡаһы, тамғаға ҡағылышлы һорауҙар күп.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ*

# ИР-ЕГЕТТӘР ИЛ ҺАҠЛАЙ

**Ир-егеттең ғаиләһен, йортон, тимәк, Тыуған илен агрессиянан һәм бәләнән һаҡлау теләге генетик кимәлдә һалына. Махсус хәрби операция башланыу менән был сифаттар Башҡортостан ир-егеттәрендә лә асыҡ сағылды. Уларға илһөйәрлек һәм Ватанды яратыу хисе этәргес бирә. Шул уҡ ваҡытта ир-егеттәр араһында үҙҙәренә ышанып етмәүселәр булыуы ла сер түгел, ҡайһы берәүҙәр тормош маҡсаттарын анығыҡ ҡына аңламай ҙа. Әммә улар ҙа Рәсәй Оборона министрлығы менән килешеү төҙөргә һәм Махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итергә бара.**

Республика клиник психотерапевтик үҙәгенең баш табибы Наталья ТҮЛБАЕВА уларҙы был аҙымға нимә этәреүе хаҡында һөйләне: "Йәшәү, маҡсатҡа ынтылыу, үҙенә яуаплылыҡ алыу өсөн кешенең эске ныҡлығы булырға тейеш, - ти Наталья Түлбаева. - Был айырыуса ир-егеттәргә кәрәк. Бөгөн дуҫтары, класташтары, күршеләренең Махсус хәрби операция зонаһынан яғға ҡайтып, хакимиәт башлыҡтары, мәктәп уҡыусылары менән осрашыуын күреп, яуаплы ҡарар ҡабул итергә йыйыныусылар үҙенә "Мин шулай булдыра аламмы?" тигән һорауҙы бирә. Фронт һыҙығындағы ауырҙар күңеле илһөйәрлек менән тулы, улар көслө мотивацияға эйә. Хәрбиҙәр сафында шулай уҡ тәжрибәләр ҙә, Рәсәй Ҡораллы Көстәрендә хеҙмәт иткән, әммә хәрби шарттарҙа булмаған йәш егеттәр ҙә бар. Һәм һәр ваҡыт шулай булды. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Ҡыҙыл армия сафында хәрби хеҙмәт тәжрибәһе булған ир-егеттәр менән бергә йәш егеттәр - эшселәр, колхозсылар, студенттар һәм мәктәпте яңыраҡ ҡына тамамлағандар ҙа фронтҡа китә. Йәштәрҙең ирекмән булып Ватанды яҡларға барырға теләүе - хәрби ысынбарлыҡтың ҡатмарлы шарттарын үтергә көс биргән эске двигатель, сөнки хәрби хәрәкәт ул кинофильмдағы матур һүрәт түгел. Унда барыһы ла башҡаса. Был хаҡта Афғанстанда, Төньяҡ Кавказда, Сирияла булған тәжрибәле яугирҙар һөйләй ала. Ветерандарҙың йәш егеттәрҙе атайҙарса хәстәрләүе уларға иғтибарлы, тәртипле, яуаплы булырға этәрә. Һуғыш кешене үҙгәртә. Уларҙа бөтәһенә лә атайҙарса, ағайҙарса мөнәсәбәт формалаша. Махсус хәрби операцияла башҡа төҫ юҡ, унда - тик аҡ һәм ҡара ғына.

Мин йәш яугирҙарҙың ата-әсәһе менән һөйләштем. Балалары менән ғорурланалар, ҡарарҙары ныҡлы булды, ти улар. Улдары өйҙә ҡалыу үтенестәрен ҡәтғи кире ҡаға. "Ватанды яҡлап сығырға тейешмен. Мин шуны көттөм һәм миңә шул маҡсат кәрәк ине", - ти улар. Ә был йәштәр өсөн бик мөһим мәл - тормошта үҙ маҡсатын табыу, үҙҙәрен танытыу, яңы ҡиммәттәр, яңы ҡараштар яулау, батырлыҡ, етәкселек, көндәлек тормошта булған һәм буласаҡ экстремаль ситуацияларҙа тиҙ арала эш итеү һәләте кеүек яңы сифаттар асыу".

Башҡортостан халҡының күбеһе кисә уҡытыусы, табип, төҙөүсе, архитектор булып эшләне, улар араһында менеджерҙар, слесарь, смена эшселәре, вахтасылар, ашнаҡсылар, парикмахерҙар бар, әммә улар Махсус хәрби операцияның хәрби заданиеларын үтәргә китте. Мәҫәлән, "Йылан" ҡушаматлы яугир махсус хәрби операцияла хеҙмәт иткәнгә тиклем ябай водитель булып эшләгән. Был хаҡта әлеге ваҡытта Донбасс ҡалаһында хәрби бурыс үтәгән Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадранов һөйләне. "Ябай кеше, ябай эшсе, әммә яу яланында "Йылан" үҙенең лидерлыҡ һәм идара итеү сифаттарын асты. Бындағы егеттәрҙең күбеһе шулай. Улар һеҙгә нисек хеҙмәт итеүен, ниндәй батырлыҡ ҡылыуын әйтмәйәсәк, был уларға кәрәкмәй ҙә. Фронтта уларҙың ысын сифаттары асыла", - тине Азат Бадранов.

Башҡортостан халҡы хәрби комиссариатҡа барыуын һәм килешеүгә ҡул ҡуйыуын дауам итә. Республиканың барлыҡ ҡалаларында һәм районадрында мобиль пункттар эшләй. Унда белгестәр буласаҡ һалдаттарға контракт төҙөү, льготалар һәм түләүҙәр буйынса кәңәш бирәсәк, ниндәй документтар талап ителеүен аңлатасаҡ. Пенсиялағы запастағы хәрбиҙәр, сағыры буйынса хеҙмәт иткәндәр, шулай уҡ армияла хеҙмәт итмәгән, әммә юғары йәки урта һөнәри белеме булған ир-егеттәр дәүләт менән килешеү төҙөй ала. 65 йәшкә тиклемге ир-егеттәр рядовойҙан алып прапорщикҡа тиклем контракт буйынса хәрби хеҙмәткә ҡабул ителә. Килешеү төҙөү өсөн республика халҡы 177-се һанлы берҙәм белешмәгә, 122-се ситуация үҙәгенә йәки (347) 218-19-19 һанына, күп функциялы үҙәктең "Минең документтарым" офисына мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ һорауҙарығыҙға яуапты bashbat.rf сайтында, Телеграмдағы чатботтарҙа алырға мөмкин.

Ағымдағы йылдың октябрендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәрби хеҙмәт үткән граждандарҙың айырым категорияларына социаль ярҙам саралары тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, 2023 йылдың 10 ноябренән мобилизация һәм сағыры буйынса хәрби хеҙмәткә алынғандар контракт төҙөгәндән һуң 100 мең һум өҫтәмә түләү аласаҡ.

Алдан әйтеп үтеүебеҙсә, 2023 йылдың октябренән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың минималь эш хаҡы 210 мең һумға тиклем артты. Килешеүгә ҡул ҡуйғандар шулай уҡ Оборона министрлығынан 195 мең һумлыҡ бер тапҡыр бирелә торған түләү хоҡуғына эйә. Өфө һәм Башҡортостандың башҡа ҡалалары меценаттары килешеүгә ҡул ҡуйғандар өсөн бер тапҡыр бирелә торған 100 мең күләмендә түләү индерҙе. Шулай итеп, республиканың яңы түләүен иҫәпкә алып, контракт буйынса һалдаттарға 400 мең һум самаһы бер тапҡыр бирелә торған түләү тәғәйенләнгән.

**Эдуард ҠУҪҠАРБӘКОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Был донъяға кемдеңдер инвалид, икенселәрҙең ярлы, өсөнсөләрҙең бай һәм һәләтле булып тыуыуын нисек аңлатырһығыҙ? Ә мин уны ғәҙеллек тием. Һеҙҙең тормошоғоҙҙо һәр саҡ контролдә тоторға тырышыусы диндарҙар реинкарнацияны инҡар итә һәм һеҙҙе тамуҡ уты менән ҡурҡыта. Эш нимәлә - реинкарнацияға ышаныу, әгәр был тормошта бер ниндәй ҙә уңыш ҡаҙанмаһағыҙ, киләһе тормошта тағы бер мөмкинлек бирелеүенә дәлил. Был иһә дингә һуҡырҙарса ышаныуҙан баш тартыуға килтерә.

Һеҙ ниндәйҙер эш боҙған балаларығыҙға хаталарын таныу мөмкинлеге бирмәнегеҙме? Шуға күрә, кәрәк ваҡытта беҙгә лә шундай мөмкинлек бирелә. Бынан тыш, барлыҡ диндәр ҙә реинкарнация концепцияһын хуплай. Дин тигәндә мин дини ойошмаларҙы күҙ уңында тотмайым. Быға инаныу өсөн Изге китаптарҙы уҡырға кәрәк.

Быны бәләкәй генә миҫал менән тикшереп ҡарайыҡ. Белеүегеҙсә, барлыҡ бөйөк рухи оҫталар үҙҙәренең рухи остаздарына танылыу алған. Был яҙылмаған ҡағиҙә булған. Әммә ни өсөн Ғайса бәйғәмбәр үҙен остазы булмаған кешегә үҙенә исем бирергә рөхсәт иткән? Ындай миҫалдарҙы күп табырға мөмкин.

Ә Тәҡдир - ул абсолют ғәҙеллек. Ул шул тиклем ғәҙел, хатта ғүмер буйы уның ғәҙелһеҙлегенә ышанып йәшәүегеҙгә лә риза.

## Көнәркәшлек юҡ

Мине тәңкитләй башларҙан алда, үҙегеҙгә ғәҙел генә итеп, әгәр башҡаларҙы үҙегеҙҙең көнәркәшегеҙ итеп һанамай башлаһағыҙ нимә булыры тураһында яуап бирегеҙ әле. "Барыһына ла билдәле: тәбиғәттә көслө көсһөҙҙө еңә," - һәр хәлдә был киң таралған инаныу. Әгәр һеҙгә лә шулай шулай тойола икән, тимәк, һеҙ бөтөнләй икенсе тәбиғәтте күҙәтәһегеҙ, сөнки минең тәбиғәттә тере йәндәр барыһы ла берберенә менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә йәшәй. Шул уҡ ваҡытта бергәләшеп ваҡыты-ваҡыты менән көсһөҙ ҙә, көслө лә булып алалар. Мин бында бөтөнләй көнәркәшлек күрмәйем.

Беҙ көнәркәш тип күргән һәр кем - беҙҙең союздаш. Быны күреү өсөн стандарт булмаған фекерләүгә эйә булырға кәрәк. Әгәр кемдер һеҙҙең ҡаҙаныштарығыҙ менән файҙаланырға теләй икән, уға "һуғыш" асмағыҙ, ә уның ниндәй һыңай яҡтары һеҙгә файҙа килтеререн күҙаллап, уның менән стратегик союзға инергә тырышығыҙ. Был һәр ваҡытта ла тормошҡа ашмай, әммә тәү маҡсатығыҙ ошо булырға тейеш.

Көнәркәшлек емергес көскә эйә. Ҡурҡыуығыҙҙы еңеп Тәҡдиргә ышанһағыҙ, көнәркәшлек инстинкты шунда уҡ юҡҡа сығыр. Әгәр көнәркәшегеҙ һеҙҙең идеяларығыҙҙы үҙенә аҡса эшләү өсөн ҡулланһа - тағы ла яҡшыраҡ, сөнки маятник мотлаҡ һеҙҙең яҡҡа ауышасаҡ. Был һәр саҡ шулай булған.

Был ғына ла түгел, идеяларығыҙҙы ҡулланған өсөн мин көнәркәштәрегеҙгә аҡса түләргә тәҡдим итәм! Кеше организмындағы күҙәнәктәр бер-береһенән файҙаланған кеүек, хеҙмәттәшлектән ике яҡлы файҙа алып, башҡаларҙы үҙ мәнфәғәтегеҙҙә файҙаланығыҙ.

Ысын мәғәнәһендә беҙҙең йәмғиәт күҙәнәктәргә оҡшаған. Әгәр мейенең иғтибарын йәлеп итеү өсөн һул ҡулығыҙ уңы менән сәкәләшә башлаһа нимә килеп сығыр? Башығыҙ ҡатыр.

Тап шундай идеялар өсөн кешеләр мине ысынбарлыҡтан айырылыуҙа ғәйепләй. Улар хаҡлы, мин уларҙың ысынбарлығында йәшәмәйем. Миңә үҙемдең ысынбарлығым оҡшай һәм башҡаларҙың иғтибарын йәлеп итеүемә шатмын. Әгәр ысынлап та дөрөҫлөктө белгегеҙ килһә, гәзит-журналдарҙы уҡып та тормай мейескә яғығыҙ...

**Пьер МОРАНСИ.**

*✓ Балаларҙың буш ваҡыттарында урамда йөрөүен күрәм. Мәктәп көсөнән килгәнсә барыһын да эшләй, мөмкин булған барлыҡ шарттар тыуҙырылған бында, әммә тағы ла яҡшыраҡ, әүҙемерәк эшләргә булыр ине.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# БАЛАЛАР ТЫҢЛАЙ,

## атай-әсәйҙәр аңлай



(Башы 6-сы биттә).

**Туғыҙынсы синыфтан һуң китеүселәр бармы? Бының сәбәбе ниҙә икән: БДИ ҡурҡытамы, әллә һөнәр үҙләштереп, үҙаллы булырға ашығамы хәҙерге балалар?**

- Әлбиттә, туғыҙынсы синыфтан һуң урта һөнәри белем усаҡтарына уҡырға китеүселәр йыл да була. Мәҫәлән, быйыл 9-сы синыфты 100 бала тамамланы, шуларҙың 40-ы 10-сыға ҡалды, 60-ы колледждарға уҡырға инде. Бының сәбәбен аныҡ ҡына аңлатып булмай, атай-әсәйҙәр ҙә, балалар ҙа үҙ киләсәге тураһында төрлөсә уйлай, хәл итә. Әлбиттә, Берҙәм дәүләт имтиханын һәр береһе нисек тә булһа тапшыра алыр ине, әммә әҙ балл йыйһа, түләүлегә уҡырға инергә тура киләсәк. Кемдәрелер, киреһенсә, урта һөнәри белем биреү усаҡтары ҡалала булғас, көн һайын йөрөүгә юл хаҡы ҡиммәткә төшөүен күҙ уңында тотоп, мәктәптә ҡалып торорға хәл итергә мөмкин. Быларҙы мин мәктәптә махсус комиссия төҙөп, 9-сы класс уҡыусылары һәм уларҙың ата-әсәләре менән айырым һөйләшеү ойоштороуға бәйле беләм. Барыһы менән дә ултырып һөйләшеп, кәңәшләшеп алабыҙ уҡыу йылы аҙағында.

Әйтергә кәрәк, хәҙер урта һөнәри белем биреү учреждениелары ла йәштәргә һөнәр һайларға ярҙам итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген күрһәтеү, танытыу юҫығында яҡшы эшләй. Мәктәпкә килеп осрашыуҙар үткәреп, үҙҙәре тураһында һөйләп китәләр, экскурсияға саҡырып ҡайталар. Быйыл беҙҙә 4 класс туғыҙынсылар, яңыраҡ улар баш ҡала урынлашҡан колледждарға барып, күреп, танышып ҡайттылар. Был уҡыу йорттары ла үҙгәреш кисерә, йәштәрҙе ылыҡтырырлыҡ бик ҡыҙыҡлы, заманса йүнәлештәр аса. Хатта БДИ-ны 100 процент яҡшы һөҙөмтәләргә тапшыра алырлыҡ уҡыусыларыбыҙ ҙа уларға өҫтөнлөк бирә ҡайһы саҡ.

**Бөгөн күп тел белгән һәм төрлө яҡтан үҫешкән йәш быуын тәрбиәләү бурысын ҡуялар. Был йәһәттән мәктәбегеҙҙә ниндәй эштәр аткарыла?**

- Балаларҙы күп телдәр белгән, төрлө яҡтан үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләү идеяһы минең дә күңелемә яҡын. Мин оҙаҡ йылдар Республика башҡорт лицей-интернатында рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, ғилми-методика эше буйынса директор урынбаҫары булып эшләнем. Шул осорҙа төрөктәрҙең белем биреү системаһының ыңғай һәм кире яҡтарын берҙәй күрҙем. Үҙемә уларҙың балаларға бер нисә сит телде камил үҙләштерергә маҡсат итеүҙәре, туған-ара бәйләнештәрҙе нығытыуға ҡоролған тәрбиә йүнәлеше күңелемә яткайны. Атай-әсәйҙәргә балалар менән туғандарға ҡунаҡҡа йөрөшөргә, зат-ырыу менән таныштырырға, аралашып йәшәргә өйрәтергә кәрәк.

Ә телдәрҙе белеүгә килгәндә инде, "Телдәр белгән - илдәр белгән", тип юҡҡа ғына әйтмәгән борондан халҡыбыҙ. Шуға киләсәктә мәктәбебеҙҙә полилингваль класс асыу ниәтен уйымда йөрөтәм: унда төрлө телдәр менән бер ҡатарҙан башҡорт теле лә өйрәнелер ине. Башҡортса белмәгән балалар ҙа был класта уҡырға теләһен, шунда әләгергә ынтылып торһон өсөн алдынғы булырға тейеш ул. Әле мәктәптә башҡорт, рус һәм инглиз телдәре уҡытыла. Бөтәһе лә башҡорт дәүләт телен 1-әр сәғәт өйрәнә, туған телгә 2 сәғәт бирелә. Ғөмүмән, беҙҙә бөтә телдәргә лә ыңғай ҡараш һалынған: урыҫ балалары араһында ла башҡорт телен ҡыҙыҡһынып өйрәнеүселәр бар, Республика көнөнә үткән байрамда телде ниндәй кимәлдә белеүенә ҡарамаҫтан, бөтәһе лә теҙелеп тороп башҡортса шиғырҙар һөйләнеләр. Балаларҙы йышыраҡ шулай ҡатнаштырырға кәрәк, уларҙың үҙҙәренә лә ҡыҙыҡ бит ул сәхнәгә сығыу, ә ата-әсәләренә ниндәй ғорурлыҡ! Башта әҙерәк ҡытыршыраҡ булһа, йәлап-йәлап телмәрҙәре шымара барасаҡ.

**Ә ниндәй мәсьәләләр борсой бөгөн мәктәп директорын?**

- Бөгөн шәхсән беҙҙең өсөн иң борсоған мәсьәлә - мәктәбебеҙ ҡеүәтенә уҡыусылар һаны тап килмәүе. Әйтеүемсә, мәктәп 550 уҡыусы һыйҙырa, ә беҙҙә 1500 бала белем ала. Был үҙ сиратында уҡыусыларға өҫтәмә белем биреү эшен үҫтерергә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Был өлкәлә эшләргә теләгән әллә күпме кеше бар, бихисап тәҡдимдәр - әммә урын етешмәй. Әле бына Шмидтово ауылында мәктәп бинаһы төҙөлә. Шуға был мәсьәлә тиҙҙән хәл ителер, могайын, тип ышанабыҙ.

Ауылыбыҙҙа берәй социаль-мәҙәни усаҡ булмауы ла бәкәлгә һуға, сөнки балаларҙың буш ваҡыттарында урамда йөрөүен күрәм. Мәктәп көсөнән килгәнсә барыһын да эшләй, мөмкин булған барлыҡ шарттар тыуҙырылған бында, әммә тағы ла яҡшыраҡ, әүҙемерәк эшләргә булыр ине. Дәрестәр һәм түңәрәктәрҙә шөғөлләнеп бөткәс, киске унынсы яртылар тирәһендә генә ябыла мәктәп ишектәре.

Беҙҙең балалар барыһы ла аҡыллы, һәләтле һәм шундай яҡшылар. Улар менән етди шөғөлләнгәндә, ниндәй өлкәлә булыуға ҡарамаҫтан, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә була. Тик мәктәп, атай-әсәй, бала бер маҡсатлы, бер фекерле булырға, аңлашып эшләргә кәрәк.

**Мәктәптә тәрбиә эше туктатылғаны юҡ, тигәйнегеҙ. Һуңғы осорҙа тағы ла көсәйә төшкәндәр был юҫыҡтағы эшмәкәрлегегеҙ, уҡыусыларҙың һәм уларҙың ата-әсәләренең быға мөнәсәбәте ниндәй?**

- Барлыҡ яңылыҡтарҙы ла, шөкөр, бик ыңғай ҡабул итте барыһы ла. Көн дә иртәнге сәғәт 8-ҙә Рәсәй һәм Башҡортостан гимндары яңғыратыла, аҙна һайын спорт залында флагтарҙы күтәреү тантанаһы уҙа. Унан һуң, балалар "Мөһим нәмә тураһында һөйләшеү"гә китә. Был уҡыусыларға бик оҡшай, сөнки был дәрестәр күҙ буяу өсөн генә үткәрелмәй, ысынлап та мөһим темалар күтәрелә. Уҡыусылар гимндарҙың һүҙҙәрен дә ятланы, ҡушылып йырлап торалар. Был да бик мөһим.

Ошо рәүештә тәрбиәләүҙең тик ыңғай яҡтарын ғына күрәм. Балаларҙың был мәсьәләлә аңлыраҡ булыуы һиҙелә хәҙер. Балалар тыңлай, атай-әсәйҙәр аңлай. Мәктәптәргә ҡайһы саҡ зарланыуҙар күп ишетелгән һымаҡ тойолһа ла, һәр ваҡыт һөйләшеп аңлашырға, кәңәшләшергә мөмкин булыуын белә атай-әсәйҙәр. Улар беҙҙең фекерҙәштәр булһын өсөн тырышабыҙ. Балалар кеше психологияһын бик яҡшы тойомлай, шуға ҡайһы уҡытыусының дәресендә шаярырға йәки бөтөнләй тыңламай ултырырға, ҡайһыныһына етди мөнәсәбәт күрһәтергә белә. Шуға тәү сиратта уҡытыусы үҙе эшенә етди ҡарарға, шундай мөнәсәбәтте башҡаларҙан да талап итергә тейеш. Был йәһәттән беҙҙә тәртип яҡшы һаҡлана, һөҙөмтәләр ҙә шуға ыңғай.

Уҡыусыларҙы оҙайлы йәйге каникулдар ваҡытында ла иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ. "Йәйләү", хеҙмәт һәм көндөҙгө балалар лагерҙары йыл да ойоштороло. Бик әүҙем йөрөйҙәр. Быйыл "Атайҙар ҡоро" ойошторҙоҡ: тәрбиә эшенә атайҙарҙы йәлеп итергә ниәтләйбеҙ.

**Педагог һәм остаз йылының һеҙҙең өсөн һөҙөмтәләре ниндәй?**

- Әйткәнемсә, беҙ - совет заманында октябрят, пионер булған, кемдәрҙер хатта комсомол сафына ингән быуын кешеләре. Шуға патриотик тәрбиә булһынмы, остазлыҡмы - былар һәр ваҡыт булды, был ниндәйҙер яңылыҡ түгел. Әле лә коллективҡа яңы килгән уҡытыусыға кәрәк саҡта ярҙам итер, кәңәш бирер бер коллегабыҙҙы тәғәйенләп ҡуйыу гүзәл дауам итә. Коллективта һәр уҡытыусыға мөмкин тиклем айырым иғтибар бүлеп, эштәрен ваҡытында баһалап торорға тырышам. Ветеран уҡытыусыларыбыҙҙы ла онотмайбыҙ, улар мәктәпкә саҡырған һайын шатланып килә. Быйылғы йыл тамамланһа ла, педагогтар һәм остаҙдар үҙ эшен намаҫлы үтәүҙе, белемле, лайыҡлы ил граждандары тәрбиәләүҙе дауам итәсәк.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Башта холоҡ тап, унан ғилем", тигәнгә таянғандарҙың эше алға китеренә шик юҡ. Шамонино мәктәбе етәкселеге һәм педагогтары быны яҡшы аңлаған өсөн дә бер нисә йыл эсендә генә тирә-яҡҡа танылған белем усағына әүерелеп, күптәрҙе үҙенә ылыҡтырып, эшләп киләләр. Ул - ошо ауылдарҙың ҡотон һаҡлап ҡалыр яңы киләсәгебеҙ нигеҙе.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 декабрь Премьера! "Юғалған ваҡыт артынан..."** (Е. Шварц буйынса), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**23 декабрь "Джут. Һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 18.00 16+
**23-24 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 10.30, 13.00, 15.30 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 декабрь Премьера! "Играем Пушкина: Царевна Лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Искужина), әкиәт. 11.00, 13.00 6+
**19 декабрь Премьера! "Играем Пушкина: Царевна Лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 9.00, 11.00, 13.00 0+
**20 декабрь Премьера! "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 10.00, 12.00 6+
**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**21 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**22 декабрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 10.00, 12.00 0+
**"Новогодний переворот"** (О. Пичурин), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**23 декабрь Премьера! "Играем Пушкина: Царевна Лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 6+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**24 декабрь Премьера! "Играем Пушкина: Царевна Лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 6+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**"Униженные"** (З. Биишева), драма. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23-24 декабрь "Щелкунчик"** (Ю. Ким), әкиәт. 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 декабрь "Новогодний ретро-бум"** И. Абдуллиндың концерты. 6+
**23-24 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы"** 11.00, 13.00, 15.00 0+
**24 декабрь "Время и вечность".** 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19-29 декабрь Премьера! "Һуғышсы Аждаһа тураһында легенда"** (Р. Ғәйнуллин), Яңы йыл әкиәте. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**22-29 декабрь Премьера! "Карамбули-карамбаба!" - так велит Ягуля-баба"** (Д. Нурғәлин), әкиәт. 10.00, 12.00, 15.00, 18.00 0+
**"Карамбули-карамбаба!" - так велит Ягуля-баба"** (Д. Нурғәлин), әкиәте менән **21 декабрь** - Әбйәлил районы Гусев ауылында 11.00, 13.00, 16.00; **22 декабрь** - Гранитный ҡасабаһында 9.30, 11.30; **22 декабрь** - Сыртинский ҡасабаһында 15.00, 17.00; **23 декабрь** - Ҡыҙыл ауылында 10.00, 12.00, 15.00. 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 декабрь Премьера! "Театр ҡунаҡханаһы"** музыкаль программа. 18.00 6+

✓ *Айыу балаһын итәккә һалһаң да илекмәҫ, бүре балаһын бүреккә һалһаң да берекмәҫ.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# ЯҢЫ РУХТАҒЫ ТАМАША




**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Юлдаш" радиоһы "ЮлдашХит" йыр фестиваленә йомғаҡ яһаны. "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙған йыр-моң байрамында популяр йырҙар яңғыраны, һәр айҙың хит-парады еңеүселәре билдәләнде, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары бүләкләнде, төрлө бүләктәр уйнатылды, "Теге өсәү" - Филүс Ҡасимов, Йәмил Ишмөхәмәтов һәм Айбулат Сисәнбаев концертты күңелле итеп барҙы.**

Быйыл йыр фестивале халыҡ-ара кимәлгә сыҡты - Ҡаҙағстандан һәм Ҡытайҙан, шулай уҡ Силәбе өлкәһенән башҡарыусылар сығыш яһаны. Астана ҡунағы Акимхан Маженов ҡаҙаҡса ла, башҡортса ла йырланы. Ә Ҡытайҙан килгән Динь Ян ҡурайға һәм баянға ҡушылып, башҡорт халыҡ йыры "Сыңрау торна"ны башҡарҙы.

Алдан хәбәр ителеүенсә, "Юлдаш"тың социаль селтәрҙәрендә "Радионың халыҡ артисы" исеменә тауыш биреүҙәр ойошторолғайны. Был бәйгелә 54 процент тауыш йыйып, йырсы Гөлназ Асаева еңеп сыҡты. Сәхнәлә шулай уҡ уҡытыусылар һәм уларҙың уҡыусылары, атайҙары һәм балалары, тотош ғаиләләр йырланы. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рөстәм Шаһыбалов һәм уның атаһы, республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Садиҡ Шаһыбаловтың дуэты бик тулҡынландырғыс булды. Профессор, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Иҙрис Ғәзиев уҡыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Заһир Исәнсурин менән бергә Салауат Низаметдиновтың "Күҙ нурым" хитын йырлап ишеттерҙе. Ә Фәдис Ғәниев һәм Лилиә Биктимерова, уларҙың улы Кәрим, ҡыҙы Гөлназ Асаева һәм уның тормош иптәше Вилли (Вилдан Шәмсетдинов) "Моңло ғаилә" исемен яуланы.

Радио республика музыка индустрияһының иң сағыу вәкилдәрен дә билдәләне. Еңеүселәр һигеҙ номинацияла иғлан ителде. Улар - Башҡортостандың йыр мәҙәниәтенә ҙур өлөш индергән шағирҙар һәм композиторҙар, блогерҙар һәм аранжировкалаусылар, ансамблдәр һәм йәш башҡарыусылар, уҡытыусылар, легендар шәхестәр. Башҡортостандың халыҡ шағиры Тамара Ғәниева - йыл шағиры, Ризуан Хәкимов - йыл композиторы, Миләүшә Мортазина һәм Фәрзәнә Сәғитова - йыл педагогтары, Ғәлинур Юламанов йыл аранжировкалаусыһы тип танылды. Билдәле музыканттар һәм педагогтар - ҡурайсы Азат Айытҡоловты һәм баянсы Миңләхмәт Ғәйнетдиновты ла легенда тип билдәләнеләр. Йыл блогеры исемен Учалынан Булат Пирғәлин алды.

Фестивалдә классик сәнғәт минуттары ла булды. Йырсы һәм флейтасы, Башҡортостандың халыҡ артисы Радик Динәхмәтовтың улы Даян Динәхмәтов виолончелдә Бах музыкаһын ишеттерҙе. Концерт Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы Элвин Грей (Радик Юлъяҡшин) һәм Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы Айҙар Ғәлимовтың дуэты менән тамамланды.

# БЫЛ БЕРЛӘШТЕРӘ



**Өфөлә "Рәсәй рәссамдары ижадында эпостар һәм иртәктәр" күргәҙмәһе асылды. Күргәҙмә киләсәктә асыласаҡ Күсмә цивилизациялар Евразия музейының фонды өсөн махсус төшөрөлгән картиналарҙан тора. Был - "Турахан" этно-художестволы симпозиумда ҡатнашҡан замандаш рәссамдарҙың ижады.**

Симпозиум быйыл июль айында Бөрйән районында "Шүлгән-Таш" музей комплексында үткәрелде. Картиналар "Торатау" конгресс-холының күргәҙмәләр залында ҡуйылған. Күргәҙмәне асыу тантанаһында республика Хөкүмәте, БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ, республика музейҙары һәм мәҙәни учреждениелар етәкселәре ҡатнашты.

- Картиналар оптимизм менән һуғарылған, тормошсан. Беҙ илебеҙҙең бер бөтөн булыуын шик аҫтына ҡуйып, аңыбыҙға тәьҫир итергә һәм айырырға маташҡан осорҙа йәшәйбеҙ. Бындай мәлдә барлыҡ халыҡҡа, милләттәргә лә үҙенең яҡшы һәм мәңгелек ҡиммәттәрен, традицияларын киләсәк быуындарға тапшырып, артабан йәшәү өсөн берләшергә кәрәк булыуын барыбыҙ ҙа яҡшы аңлай. Ижад һәм сәнғәт беҙҙе берләштергән йомшаҡ көстәрҙең береһе. Картиналар - кешеләр күңеле, Ватаныбыҙ күңеле. Һәм улар күсмә цивилизациялар музейында урынлашасағы бик мәслихәт, - тине ҡунаҡтарҙы сәләмләп БР Хөкүмәте департаменты директоры Энже Вернигора.

Республиканың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин күргәҙмәне ойоштороу тарихы менән таныштырҙы. "Радий Фәрит улы Күсмә цивилизацияларҙың Евразия музейы проектын эшләргә ҡушҡанда картиналар галереяһын да күҙ уңында тотоуҙы һораны. Эште ниҙән башларға белмәнек һәм рәссамдарға мөрәжәғәт иттек. Уларҙың ярҙамы менән тәүҙә симпозиум үткәрҙек һәм унда күсмә цивилизациялар музейы картиналар галереяһының нигеҙен тәшкил итер ошо эштәр барлыҡҡа килде лә инде. Ә симпозиумды үткәреү урыны итеп "Шүлгән-Таш" музейы һайланыуы Шүлгәнташ мәмерйәһенең Рәсәй тарихында иң боронғо рәсемдәр галереяһы булып тороуына бәйле", - тине симпозиумды ойоштороусы.

Абакан, Ангарск, Баймаҡ, Киров, Махачкала, Мәскәү, Пермь һәм Өфө ҡалаларынан булған ижадсылар сағылдырған эпостар һәм иртәктәр донъяһын һәр кем үҙе барып ҡарай ала. Замандаштарҙың эштәре өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтарына 15 ғинуарға тиклем асыҡ. Инеү бушлай.

ТЕЛҺӨЙӘР

# КҮРШЕЛӘРҘЕҢ ТЫЗЫЙЫ

**Иғтибарығыҙға - башҡорт теленән бер нисә һүҙ. Уларҙы иҫке тиергә тел әйләнмәй, сөнки бөгөн дә төшөнсәләре заманға бик тә ярашлы. Тик һирәк ҡулланылыуҙары күңелде ҡыра. Ҡабатлап үтеү менән үк ул һүҙҙәр иҫегеҙҙә ҡалыр.**

**Тызый.** Был һүҙҙе күберәге ҡортсолоҡта оҫта һәм бал яратыусан Дим буйы башҡорттарынан ишетерһегеҙ. Улар бал ҡортон "тызый" тип атай. Миҫалға: Күршеләрҙең тызыйы айыра. Тызыйҙар быйыл балды күп йыйған.

**Тымғыл.** Йылымыс берәй нәмә хаҡында һүҙ барғанда был сифатты "тымғыл" тип тә билдәләп була. Тымғыл һөт. Тымғыл һыуҙа ҡойоноу.

**Тымпат.** "Тымпат" - һауа торошон ҡылыҡһырлаған һүҙ. "Тыныс ҡына, болотло һәм йылы" мәғәнәһенә эйә. Тымпат кис. Көн бөгөн тымпат тора.

**Тыныш.** "Тыныш" - "Тәнәфес, пауза" тигән һүҙҙәргә синоним. Һөйләгәндә урынлы тыныш яһау. Әңгәмәлә тыныш урынлашты.

**Тырмыс.** Тығыҙ төйөн күҙҙә тотолһа, "тырмыс" тип атала. Тырмысты тағатыу тиҙ булды. Икенсе мәғәнәлә "тырмыс" һүҙе "түңәрәк" әйберҙе белдерә. Тырмыс ҡорот баштары. Тырмыс таштар.

**Бөгөн иҫкә төшөргән һүҙҙәр ҙә күс айырғандағы тызый кеүек тынғы бирмәй, үҙҙәрен ҡулланыуҙы талап итһен.**

**Фәймә МӘЖИТОВА әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕРӘҮҘӘР ТҮРӘ

## берәүҙәр түрә янында көн күрә

Айыу балаһын итәккә һалһаң да илекмәҫ, бүре балаһын бүреккә һалһаң да берекмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙың ни теләгәнен белер өсөн... ир-егет уға өйләнергә тейеш.

**(Шолом-Алейхем).**

Эшлекле кешеләр һымаҡ фекер йөрөтөгөҙ. Уйлы кешеләр һымаҡ ҡарар ҡабул итегеҙ.

**(Анри Бергсон).**

Үҙ-үҙенә һыйтанған кешенән дә һөйкөмһөҙөрәк әҙәм юҡтыр.

**(Гибер).**

Белем - былай ҙа яҡшы нәмә, ләкин ул оло көскә әйләнһә һәм төрлө яҡшы эштәр ҡылыуға булышлыҡ итһә, тағы ла мең тапҡырға яҡшыраҡ.

**(Франсуа Гизо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауыл мәктәбендә бик хөрмәтле уҡытыусы ир эшләгән. Ул балаларҙы бик нык яратҡан, бар ваҡытын улар менән үткәргән, төрлө ҡыҙыҡлы саралар ойошторған. Уның тағы бер ҡыҙыҡ ҡына ғәҙәте булған: бар балаларға бүләктәр өләшергә яратҡан. Әммә уның магазиндан һатып алған йә үҙ ҡулдары менән эшләгән бүләктәренең барыһы ла тиҙ ватылыусан, нескә генә булған. Балалар уҡытыусы биргән бүләктәр менән нисек кенә һаҡ ҡыланырға тырышмаһын, улар ватыла торған. Ҡайһы бер балалар ҡыйралған уйынсығына ҡарап, күҙ йәштәре түккән. Әммә уҡытыусы күпмелер ваҡыттан уларға уйынсыҡтың барыбер тиҙ ватыла торған яңыһын бүләк иткән.**

**Бер саҡ бер нисә ата-әсә уҡытыусыға шулай тип мөрәжәғәт иткән:**

**- Хөрмәтле уҡытыусы, һеҙ шул тиклем ҙур йөрәкле, изге кеше, беҙҙең балаларҙы яратаһығыҙ. Ләкин ни өсөн һеҙ уларға шундай тиҙ генә боҙола йә ватыла торған бүләктәр алып бирәһегеҙ? Улар ул уйынсыҡтарҙы һаҡларға, ипләп кенә уйнарға тырыша, әммә барыбер ватылыуҙан ҡотола алмай. Шунан улар илай, беҙ уларҙы көскә тынысландырабыҙ. Һеҙҙең бүләктәр шул тиклем матур, тик улар ыуалыусан, ватылыусан булғас, уйнауға ярамһыҙ бит...**

**Уҡытыусы уларға шулай яуаплаған:**

**- Бына был балалар мәктәпте тамамлар, үҙаллы тормош юлына аяҡ баҫыр. Кемдер уларға үҙ йөрәген бүләк итер. Йөрәк бит был уйынсыҡтарға ҡарағанда ла нескәрәк. Минең бүләктәрем балаларҙы бына шундай нескә, әммә ҡиммәтле бүләктәр менән мөғәмәлә итергә өйрәтмәҫме икән, тигән ниәттән ине был ҡылығым..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
15 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3177
Заказ - 1778
1 582218 911006 23049